ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискe Өфө

24-30 июнь (һөтай) 2017

№25 (755)

15 йыл

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Төрлө милләттәнбеҙ...**

Тимәк, бөтәһен бер "тараҡ менән тарау" урынһыҙ **3**



**Халыҡтың йәшәү көсө...**



милли һәм дини берҙәмлектә **8-9,11**

**Умыртҡалыҡты ла...**

күҙең ҡараһылай һаҡлау кәрәк **12**



**Ҡартлыҡ бәхетен...**



татый алмағандар ҙа бар бит! **13**

**ТВ-программа 14**

***Уйлап та тормайынса миңә яуызлыҡ күрһәткән кешегә мин баш эйәм һәм уны иң йомарт һөйөү менән бүләкләйем; ул ни тиклем күберәк яуызлыҡ ҡылһа, мин шул тиклем күберәк изгелек ҡыласаҡмын.***

***(Будда).***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Һеҙҙең ғаиләлә ниндәй милли һәм дини йолалар күҙәтелә?

***Светлана БУРАНБАЕВА, Рәсәйҙең мәғариф отличнигы, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы", Сибай ҡалаһының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзаһы:*** Үҙен туған халҡының лайыҡлы вәкиле тип иҫәпләгән, үҙен ихтирам иткән һәр башҡорт өс нәмәне: йондоҙҙарҙы, риүәйәт- легендаларҙы һәм шәжәрә тамырҙарын белергә тейеш, тигән хәҡиҡәт барыбыҙға ла яҡшы мәғлүм. Тамырҙарынды белмәйенсә тороп, үҙеңдең асылынды ла белмәйәсәкһең, йәғни маңҡортҡа әйләнәсәкһең. Шөкөр, һуңғы сирек быуат эсендә халҡыбыҙ ошо хәҡикәтте төшөнөп, үҙ асылына ҡайтыу юлдарын күҙалланы. Күптәр ырыу тамырҙарын, ата-бабалары тарихын юллап, үҙҙәренең шәжәрә ағасын төҙөтөп алыуға өлгәште. Үҙебеҙең ғаилә шәжәрәһенә килгәндә, ул күптән инде өйөбөҙҙөң иң түренән урын алып, тормошобоҙҙо нурлап, уға тос мәғәнә биреп, балҡып тора. Ғаиләбеҙ менән милли һәм дини йолаларыбыҙ мөхитендә йәшәйбеҙ. Был шулай булырға тейеш, тип тырышыуҙан да, "модаға" эйәреү ҙә түгел, бәлки, ана шул мөхиттең быуаттар буйы йәшәп килгән рухы аң һәм аҡылыбыҙға, ҡаныбыҙға һеңгәнгә күрәлер ҙә. Быныһы күңелебеҙҙә милли ғорурлыҡ тойғоһо уятһа, дини йолалар ҙа быуындан-быуынға күсә килеп, йәшәү рәүешебеҙгә әүерелгән. Шәжәрә тамырҙарыбыҙҙа ике указлы мулла, мәзиндең булыуы ла күпте һөйләй. Атайым Кинйәбай Дәүләтбай улы Каруанһарай педтехникумында уҡып йөрөгәнендә бергә уҡыған етем ҡыҙ менән танышып, ғаилә ҡоралар. Әсәйебеҙ Елизавета Дмитриевна, шулай итеп, ғүмер буйы башҡорт теле уҡытыусыһы булып эшләне. Мосолман динен ҡабул итеп, ғүмеренең ахырында үҙен урын-еренә еткереп, мосолман йолаһы буйынса тәрбиәләп, мосолман зыяратына, атайыбыҙ эргәһенә ерләүҙе васыят итеп ҡалдырҙы. Бер туған апайым Тамара шулай уҡ 40 йыл балалар уҡытып, ялға киткәс, иман юлына баҫты, әле ул абыстай. Нәҫелдә диндарҙарҙың булыуы бала-сағалар, ейән-ейәнсәрҙәребеҙҙең булмышында, әхлаҡлылыҡ дәрәжәһендә сағылмай ҡалмағандыр, тимен. Ейәнебеҙ Тамерлан, ни бары 6 йәштә генә булһа ла, яттан әллә күпме доға белә, аҙан ҡысҡыра. Түбәтәй кейеп алып, өлкәндәр менән ҡуша аяттарға йөрөй. Барсабыҙ ҙа дини йолаларҙы ихтирамлап, уны тәрбиә һәм әхлаҡлылыҡ нигеҙе тип ҡабул итәбеҙ. Шөкөр, йылына бишәр тапҡыр аяттар бағышлатып, ҡорбандар салдырып, хәйерҙәр таратып, һәр мосолманға тейешле булған башҡа ғәмәлдәрҙең барыһын да теүәл башҡарып барырға тырышабыҙ шулай.

Үҙем хәҙер инде байтаҡ йылдар Сибай ҡалаһының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзаһы булараҡ, милли йолаларыбыҙҙың уртаһында ҡайнап йәшәйем. Һәр төрлө саралар ойоштораБыҙ, йәштәрҙе милли рухта тәрбиәләп, уларҙы туған тел һәм мәҙәниәтебеҙ мөхитенә йәлеп итергә тырышабыҙ. Сибай ҡалаһының балалар баҡсаһында "Өләсәйем һандығы" байрамын үткәреү яҡшы йолаға әүерелде. Балалар уны көтөп ала. Мәктәптәрҙә, урта уҡыу йорттарында йыш булабыҙ. Сибай институтының традицион һабантуйы ла беҙҙең ҡатнашлыҡтан тыш үтмәй. "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы янында "Ете ҡыҙ" матурлыҡ студиябыҙ уңышлы эшләп килә. Унда ҡыҙҙарҙы башҡорт милли кейемдәре тегергә, хәситә, селтәр, ҡашмауҙар эшләргә өйрәтәбеҙ. Әле бына бүлмәмдең стенаһында, музейҙағы кеүек, үҙ ҡулдарым менән эшләгән өс селтәр, бер хәситә, иҫ киткес гүзәл ҡашмауым эленеп тора. Күңелгә яҡтылыҡ бирә, кәрәк саҡта тынысландыра ла һине улар. Өйөбөҙгә килгән һәр кем шулай тип әйтә, сикһеҙ һоҡланыу менән тамаша ҡыла. Һуңғы йылдарҙа ағинәйҙәр менән ана шул матур һөнәрҙе үҙләштереп, теләгән бер кешегә, айырыуса йәштәргә уның серҙәрен төшөндөрә алыуыбыҙ менән ләззәт кисерә күңел. Башҡорт милли кейемдәре фестивален үткәреүҙе лә беҙҙең ағинәйҙәр башлап ебәргәйне бит. Артабан, ана, ниндәй ҡолас алып, тотош халыҡ байрамына әүерелеп китте. Милли һәм дини йолаларыбыҙ йәшәһен, тиһәк, уларҙы ғаиләләр эсендә генә башҡарыу етмәй, минеңсә. Йолаларыбыҙҙы йәмәтселеккә алып сығыу сараларын һәм юлдарын тағын да әүҙемләштерә төшөү кәрәктер, тигән фекерҙәмен.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# МИЛЛИ КЕЙЕМ ТАНТАНАҺЫ

**Баш ҡалабыҙҙа быйыл икенсе тапҡыр "Евразия йөрәге" халыҡ-ара сәнғәт фестивале сиктәрендә милли кейем парады үтте һәм Башҡортостанда йәшәгән төрлө милләт вәкилдәрен бергә йыйҙы. Парад Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры эргәһендәге майҙандан башланып, Салауат Юлаев эргәһендәге майҙанда тамамланды.**



**(Дауамы 15-се биттә).**

12+

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2017 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылыу тамамланып килә. Республикабыҙҙың һәр районы-ҡалаһында, иң төпкөл ауылдарҙа ла 50665 индексლы "Киске Өфө"гә - 559 һум 56 тингә, 50673 индекслыһына (ойошмалар һәм предприятиелар өсөн) - 589 һум 56 тингә, ә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары өсөн - 447 һум 64 тингә яҙыла алаһығыҙ.**

• Уҡыусыларыбыҙ гәзитебеҙҙе - үҙе бүләк ул, тип ҡабул итһә лә, даими рәүештә дәртләндереү, бүләкләү саралары ла тәҡдим итеп тороуыбыҙҙы беләһегеҙ. Гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер, гәҙәттәгесә, матур китаптарға лайыҡ буласаҡ. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!



• Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

• **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ:**

• Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға **420 һумға** яҙылырға була.

• Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға килтереп бирә: ярты йылға - **258 һум**.

• Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - **258 һум**.

• Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә он-лайн яҙылыу мөмкинлеге лә бар. Уның өсөн "Киске Өфө"нөң интернеттағы **kiskeufa.ru** сайтында "Яҙылыу" тигән төймәгә баҫып, "Шәхси яҙылыусылар өсөн он-лайн яҙылыу" һылтанмаһы аша **vipishi.ru** сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойошторолған. Бланкка үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса күсерергә генә ҡала.

• Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Электрон почта: **kiskeufa@mail.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Һеҙҙең ғаиләлә ниндәй милли һәм дини йолалар күҙәтелә?



(Башы 1-се биттә).

***Радик ӨМӨТҠУЖИН, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, Әбйәлил районы Хәлил ауылы:*** Бөтөн яҡшы, изге ғәмәлдәр ғаиләнән башлана. Шул уҡ Тыуған иленә, туған теленә һәм милли-дини йолаларға һөйөү тойғоһо ла. Сөнки мәктәптәге теге йәки был сараларға ҡарағанда, ғаилә эсендә ата-әсәнең ҡылған һәр ғәмәле бала күңеленә нығыраҡ уйылып ҡалыусан. Шөкөр, ҡатыным менән икебеҙ ҙә намаҙҙабыҙ. Ошо унайҙан шәйех Мехмет Әдил ән-Нәҡшбәндиә әфәнденең Башҡортостанда булғанында Мөжәүир хәҙрәттең тыуған ауылы Манһырҙа әйткән вәғәзе һәр саҡ иҫкә төшөп кенә тора. Намаҙ уҡыған кеше күңеленә тыныслыҡ табыр, эштәре уң барыр. Ике рәкәғәттән булһа ла башлап ебәрһә, артабан өйрәнеп китер, әммә ләкин бер генә көнөгәҙҙә лә Аллаһҡа баш эймәйенсә үткәрмәгеҙ, тигәйне ул. Намаҙ булһынмы, ураҙамы, башҡа дини йолаларҙы башҡарыуыма - иң мөһиме, эске ихтыяжыңдан тыуған ғәмәл булһын ул, ә кешегә күрһәтеү, башҡаларҙан ҡалмаҫҡа маташыу йә мода ҡыуыуҙан ғына барлыҡҡа килмәһен ине йола тотоу ғәҙәте. Ауылыбыҙҙа мәсет, указлы муллабыҙ - имам хатиб бар. Аллаһ йортонон буш торғаны юҡ, шуныһы ҡыуаныслы. Кесе йома һайын зикергә йөрөйбөҙ. Ураҙа, Ҡорбан байрамдарын бергәләп үткәрәбеҙ, башҡа дини даталарҙы ла билдәләп, күңел хәтеренә һала барабыҙ. Милли һәм дини йолаларыбыҙ - ул бит асылда беҙҙең йәшәү рәүешебеҙ, беҙ ошо йолаларыбыҙ эсендә йәшәйбеҙ, көн итәбеҙ. Шуға ла уларҙы тормошобоҙҙан айырып ҡарау, килеп етер, үтеп китер календарь даталар тип ҡарау дөрөҫ булмаҫ ине. Әле бына "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" байрамына әҙерләнеп ятабыҙ. Сценарий яҙыу минең өҫтә. Ваҡыт юҡ, тип тә тороп булмай, сөнки был, һабантуй кеүек үк, төп байрамдарыбыҙҙың береһе. Сит яҡтарҙа йәшәгән ауылдаштар, күптән күрешмәгән туғандар ҡайтасаҡ. Ауылыбыҙ балҡып, гөрләп торһон ҡунаҡтар ҡаршылағанда. Күреп-белеп китһендәр: беҙҙә лә тормош ҡайнай, хәлилдәр ата-олатайҙар нигеҙен һыуытмай, быуындар бәйләнешен өҙмәй, байрам-йолаларын онотмай. Быуындар бәйләнеше, тигәндән, ул шәжәрәбеҙҙә лә асыҡ сағылып тора. Ете быуын ырыуын белмәгән - маңҡорт булыр асылы. Мин ете быуынымды белһәм, улым һигеҙҙе белә. Шулай ялғанып китә ғүмерҙәр. Ырыу-нәҫелендә дауам итер уландар үҫтереү ҙә милли йолабыҙ бит, уйлап ҡараһаң...

***Закир ИШМЫРҘИН, Ғафури районы Сәйетбаба ауылының ветерандар советы рәйесе:*** Ил йолаһыҙ булмаҫ, тигән халҡыбыҙ. Башҡорт халҡының милли һәм дини йолалары бик күп һәм улар тәрән мәғәнәгә, бай йөкмәткегә эйә. Был үҙе генә лә халҡыбыҙҙың боронғо ҡәүем булыуын дәлилләп тора. Өҫтәүенә, совет дәүерендә онотола яҙған бик күп йола-традицияларыбыҙ тергеҙелә һуңғы йылдарҙа. Яңыларына нигеҙ һалына. Йола тотоу, уның быуындан-быуынға күсәгилешлеген тәьмин итеү ғаиләнән тора, тип әйтер инем. Башҡорт ғаиләһе, үҙегеҙ беләһегеҙ, борон-борондан халыҡ йолаларына таянып көн күргән: бала тыуғандан алып, ғүмеренең ахырына саҡлы, уны һуңғы юлға оҙатҡансыға тиклем әҙәм ғүмере йолаларға бәйле була. Йолаһын белмәгән йә һанға һуҡмағанды халыҡ та һанламай, сөнки ул үҙ йөҙөн юғалтҡан берәҙәк, ҡамғаҡ менән бәрәбәр. Республикабыҙҙа ғына түгел, моноэтник составы буйынса хатта донъяла иң ҙур һәм боронғо башҡорт ауылы булараҡ, Сәйетбаба ошо ерҙең аҫабаһы Сәйетбаба Көбәков исеме менән бәйле. Уның шәжәрә тамырҙары табын ырыуы башлығы Майҡы бейгә барып тоташа. Шуға нигеҙләнеп, беҙ, сәйетбабалар, үҙебеҙҙең шәжәрә ағасын төҙөтөп алдыҡ. Шәжәрә карталары, минеңсә, һәр өйҙәң түренән урын алып торорға тейеш. Балаларыбыҙ, ейәндәребеҙ ете быуынын танып-белеп, нәҫел-нәсәбе менән ғорурланып үҫергә тейеш. Йоғонтоло бер тәрбиә сараһы бит ул шәжәрәләребеҙ уның бәсен, әһәмиәтен аңлаған кешеләргә. Тап Сәйетбабаның Башҡорт тарихи-мәҙәни үҙәге итеп һайланыуы ла ауылдаштарға, һәр бер ғаиләгә өлгөлә, сәләмәт йәшәү рәүешенә эйә булыу, йорт-ҡураһын матур итеп, таҙа, тәрбиәле тотоу бурыстарын йөкмәтә. Әйткәндәй, беҙ, сәйетбабалар, заманында Урта Азияға эмиграцияға юлланған Әхмәтзәки Вәлидиҙең ауылыбыҙ аша үтеп киткәнендә имам хатибтарға, аҡтар яғына ла, ҡыҙылдар яғына ла ҡушылмаҫҡа, ин мөһиме - халыҡты, туған телде һәм диндә һаҡларға, тип әйтеп киткән аманатын һәр саҡ хәтерҙә тотабыҙ. Өйҙә башҡортса аралашып, иманлы балалар тәрбиәләү - һәр беребеҙҙең бурысы. Милләтебеҙ сафлығын, әсә телен һаҡлауҙың бер юлы - ҡатнаш никахтарға юл ҡуймау. Бында эш баланың ихтыярын ирекһеҙләүҙә түгел һис тә, ә бәләкәйҙән ошо йолаға аңына һеңдерә алыуҙа. Ғаиләмдә мин ошо мәсьәләгә ныҡ иғтибар бирҙем. Ҡатыным менән 5 бала үҫтерҙек. Шөкөр, барыһы ла үҙ милләте вәкилдәре менән бәйләнә яҙмыштарын. Ҡатыным бөтә күңеле менән дингә бирелгән кеше. Балалар тәрбиәһендә уның йоғонтоһо ла ҙур әһәмиәткә эйә булды. Ауылыбыҙҙа үткәрелгән бөтөн дини-мәҙәни сараларҙы ҡалдырмай ҡатнашабыҙ. Ҡөрьән уҡытып, ҡорбандар салдырып, хәйер-саҙаҡаларын биреп торабыҙ, Хоҙай Тәғәлә сауаптарын насип итә күрһен. Ураҙа байрамын да матур итеп, ҙурлап үткәреп ебәрергә яҙһын!

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанға рәсми сәфәр менән Ҡырғыҙ Республикаһы Президенты Алмазбәк Атамбаев килде. Дәүләт етәксеһен тормош иптәше Рәйсә Атамбаева оҙатып йөрөй. Өфө аэропортында уларҙы республика Башлығы Рөстәм Хәмитов һәм уның хәләл ефете Гөлшат Хәмитова, Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачёв ҡаршы алды.

✓2016 йылда Башҡортостан менән Ҡырғыҙстандың тышҡы сауҙа әйләнеше күләме 30,7 миллион доллар тәшкил иткән һәм нигеҙҙә экспорттан торған. Башҡортостандан оҙатылған продукция араһында - нефть продукттары, шулай уҡ ҡорос сым, каустик һәм кальцийлы сода, гербицидтар, ашламалар, пластмасса әйберҙәр, ағас-сүсле һәм ағас-юнысҡы плитәләр. Импорттың төп тауарҙарына электр лампалары, алюминий һәм баҡыр изделиелар инә.

✓22 июндә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында Ҡырғыҙстан мәҙәниәте көндәрен асыу тантанаһы булды. Унда Ҡырғыҙ Республикаһы Президенты Алмазбәк Атамбаев та ҡатнашты. Ҡырғыҙстан мәҙәниәте көндәре программаһында Ҡырғыҙ Республикаһы сәнғәт оҫталарының концерты, "Родина" кинотеатрында ҡырғыҙ кинематографының нәфис фильмдарын күрһәтеү ҡаралғайны. Уларҙың ҡайһы берҙәре "Көмөш Аҡбуҙат" кинофестивалендә ҡатнашып, призер булған.

✓Башҡортостанда күп балалы ғаиләләргә социаль ярҙам күләмен ике тапҡырға, ай һайын өстән алты меңгә тиклем арттырырға ниәтләйҙәр. Республика Башлығы указы буйынса, демография һәм тыуымды арттырыу мәсьәләләре буйынса эш төркөмө ойошторолған, уға 2020 йылға тиклемге осорға эш планын әҙерләргә ҡушылған. Студент ғаиләләре өсөн яңы социаль ярҙам сараларын индереү мәсьәләһе лә ҡарала.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов төбәктә дәүләт һәм туған телдәрҙе уҡытыу мәсьәләләре буйынса кәңәшмә үткәрҙе. Федераль һәм республика ҡануниәттәрен теүәл үтәп, туған телдәрҙе өйрәнеү йәһәтенән уҡыусыларҙың ихтыяждарын тәьмин итеү мәғариф менән идара итеү органдары һәм белем биреү ойошмалары эшмәкәрлегенең өҫтөнлөгө булырға тейеш, тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Рөстәм Хәмитов. Бигерәк тә ғәмәлдәге хоҡуки даирә был эште лайыҡлы кимәлдә ойошторорға мөмкинлек бирә.

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# ТӨРЛӨ МИЛЛӘТТӘНБЕҘ...

## Тимәк, бөтәһен бер "тараҡ менән тарау" урынһыҙ

**Утыҙ һигеҙ йыл мәктәптә эшләгән дәүерҙә халыҡ мәғарифының әлләни хәтле үҙгәрештәр кисереүенә шаһит булырға, төрлө эксперименттарҙа ҡайнарға тура килде. Заманың ниндәй - йәшәйешең дә шундай шул. Глобалләшеү, төрлө технологиялар үҫеше осоронда йәшәйбеҙ бит. Шуға ярашлы, мәктәптәрҙә дәреслектәр ҙә эленән-әле үҙгәреп тора. Ярай ҙа бит улар балаларҙың аң кимәлен, психологик үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып төҙөлһә...**



Былтыр бер әсәнең беренсе синыф балаһына дәрес әҙерләткәненә шаһит булырға тура килде. Бала "Букварь" китабы буйынса уҡый икән (авторҙары: Р.Н. Бунеев, Е.В. Бунеева, О.В. Пронина). Китапта "Федераль дәүләт мәғариф стандарттары" тип яҙылған. Дәрестә *Кк, Нн* хәрефтәрен өйрәнгәндәр. Ҡыҙыҡ өсөн генә дәрестә өйрәнгән хәрефтәргә ниндәй һүҙҙәрҙе миҫал итеп килтергәндәрен яҙып алғайным: Луганск, Кострома, Игарка, Инта, Курск, Клин, Минск, Котлас, Лимпопо, Миссисипи, Монако, Миссури, Нагасаки, Канары, Ниагара, Осака, Токио һ.б. Бала ауырлыҡ менән уҡыны был ят һүҙҙәрҙе. Бер дәрестә генә анау хәтлем географик атамаларҙың мәғәнәһен беренсе класс балаһының мейеһенә һеңдереп буламы? Уҡытыусыһы тиреһенән сыға яҙып аңлатырға тырышҡан хәлдә лә, был һүҙҙәр баланың аңына барып етмәгәненә иманым камил. "Миссури", "Ниагара", "Монако" һ.б. һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен аңлатыр өсөн әллә нисә дәрес кәрәк. Берәй ауыр хәл килеп тыуһа, үҙ илен биш тингә һатыр сит ил граждандарын тәрбиәләйбеҙме икән ни, тип аптырауға ҡалдым. Әсәй кеше:

- Сит телдән кергән һүҙҙәрҙең нимә аңлатҡанын һорап ҡуймаһа ғына ярар ине, тип ҡурҡып ҡына торам, ҡайһы берҙәрен үҙем дә белмәйем бит, - тине, әсенеп.

- Әллә стенағыҙға ҙур карта элеп ҡуяһығыҙмы? - тигән булдым, аптырағас.

Хатта карта элгән хәлдә лә, был һүҙҙәрҙең мәғәнәһе баланың аңына барып етмәйәсәге көн кеүек асыҡ бит. Белорет педагогия училищеһында уҡыған саҡтарҙы, беҙгә тырышып-тырмашып белем биргән, уҡытыусы һөнәренә һөйөү тәрбиәләгән уҡытыусылармыҙы һәр саҡ һағынып, ҙур хөрмәт менән иҫкә алам. Белем биреп кенә ҡалмаған, бөтөн яҡтан да тормошҡа әҙерләп сығарған бит улар беҙҙе. "Башланғыс класс уҡытыусыһы" дипломын алып сыҡһаҡ та, һигеҙ йыллыҡ мәктәптәрҙә эшләгәндә, башҡа предметтар менән бер рәттән, рәсем, музыка, хеҙмәт, физкультура дәрестәрен дә уҡытырға тура килә торғайны. Практика ваҡыттарында уҡытыусыларыбыҙ: "Дәрестә балаға аңлашылмаған бер генә һүҙ ҙә ҡалырға тейеш түгел", - тип, һүҙлек өҫтөндә эшкә ныҡ иғтибар бирерҙәр ине. Аңлашылмаған һүҙҙәрҙе айырым карточкаларға яҙып, һүрәтен йәки, мөмкин булһа, әйберҙең үҙен килтереп күрһәтер инек уҡыусыларыбыҙға.

Һуңғы йылдарҙа "Федераль дәүләт мәғариф стандарттары" тип, бөтә башланғыс синыф балаларын юғарыла телгә алынған дәреслек менән уҡыта башланылар. Быйылғы йылдан беренсе синыф балалары икенсе "Букварь" китабын ("Школы России") уҡыйҙар. Был дәреслек төүгеһенә ҡарағанда күпкә уңайлыраҡ. Нисек кенә булһа ла, элекке дәреслектәр Тыуған иленә, халҡына ҡарата һөйөү, ғорурлыҡ тойғоһо тәрбиәләнә. Хәҙер беренсе космонавтың кем икәнен һәм уның ҡасан йыһанға осҡанын белмәгән балалар ҙа етерлек.

Интернетта бер ҙур ғына ҡалала "Удмуртия ниндәй ил? Ҡайҙа урынлашҡан?" тигән һорау үткәреүҙәре тураһында уҡығайным. Журналист урамда осраған бер кешене туҡтатып, шул һорауҙы бирә. Шаҡ ҡатырлыҡ бит: Рәсәй Федерацияһы эсендәге республикаларҙы, унда ниндәй милләт кешеләре йәшәгәнен бөтөнләй белмәйҙәр булып сыға. Нисәмә кеше араһынан ни бары береһе генә дөрөҫ яуап бирә.

Нимә яҙам һуң әле мин быларҙы? Әлеге шул интернетта: "Баланы илһөйәр, рухлы башҡорт итеп тәрбиәләгән "Тормош һабаҡтары" дәреслектәре сүплеккә сығарып ташлана", - тигән юлдарҙы уҡып, йөрәгем өшөп китте. Бөтә мәктәптәрҙә лә балалар Федераль дәүләт мәғариф стандарттары буйынса уҡытылырға тейеш, тип, уҡытыу пландарынан йылдан-йыл төбәк компоненттары ҡыҫырыҡлап сығарыла. Һәр милләт балаһы үҙ телендә һөйләшһә, ата-бабаларынан ҡалған мираҫты, йырҙарҙы, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, йолаларҙы өйрәнһә, насармы икән ни? Үҙ илебеҙҙә, Башҡортостаныбыҙҙа йәшәп, ике генә сәғәт әсә телен уҡытып, балаға ниндәй белем, тәрбиә биреп була? Бигерәк тә ҡала мәктәптәрендә телде белгән балалар менән бөтөнләйгә белмәгән балалар бер класта бергә уҡығанда, ниндәй тел тәрбиәһе булыуы мөмкин! Быһынан ни файҙа? Оптималләштерәбеҙ, аҡсаны һаҡсыл тотонабыҙ, тип, ваҡытты бушҡа әрәм итеү, балаларҙы йҙалатыу, туған телгә ҡарата нәфрәт тәрбиәләү була бит был. Быларҙың эҙемтәләре нисек булыр икән? Үҙ телен белмәгән, бәләкәй илен яратмаған бала ҙур илдең патриоты була алырмы?

Һәр милләт балаһында тәбиғи милли үҙенсәлек (природосообразность) һаҡланырға тейеш, тип иҫәпләйем. Ата-бабаларҙан быуаттар буйына мираҫ итеп тапшырыла килгән тәрбиә, донъяуи белем, ауыр хәл-ваҡиғаларға тарығанда, әҙәм балаһына ярҙам итмәйенсә ҡалмай. Атайымдың бер фронтовик танышының яҙмышы тураһында һөйләгәне хәтеремдә уйылып ҡалған. Һәр иртә яҙҙан беҙҙең ауыл кешеләре, Нөгөш буйлап һал ағыҙып, ялан яҡ кешеләренә һаттылар. Атайым һалға сыҡҡан һайын дуҫ-иштәрен, хеҙмәттәштәрен күреп, хәләхүәлдәрен белешеп, күңеле күтәрелеп ҡайтыр ине. Уның бер танышы һуғыш ваҡытында әсирлеккә эләгеп, ғәрәп илдәренең береһенә барып сыҡҡан. Ул атайыма үҙе тураһында ошоларҙы бәйән иткән:

- Күмәк әсирҙәр туйынып ултырабыҙ. Беҙҙән әҙ генә ситтәрәк ғәрәптәр урынлашҡайны. Ашап бөткәс, ғәҙәтем буйынса "Аллаһу әкбәр!" тип, битемде һыпырып ҡуйҙым. Кинәт мине ғәрәптәр һырып алдылар ҙа ниндәй сүрәләр белеүем тураһында һораша башланылар. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бер сүрә лә белмәй инем шул. Ҡайһылай булһа ла, шул ғәрәптәр миңә Тыуған илемә ҡайтырға ярҙам иттеләр...

Учалының 12-се Башҡорт лицейында эшләгән саҡта башланғыс кластарҙа "Шәжәрә" байрамы үткәргәйнек. Башҡорт балалары ла, башҡа милләт балалары ла был сараға ихлас әҙерләнеп, матур итеп шәжәрәләрен төҙөп килделәр. Ғорурлыҡ менән үҙҙәренең ата-бабалары тураһында һөйләнеләр, хатта ғаилә архивынан булған иҫтәлекле әйберҙәрен дә килтерҙеләр. Сығышы менән Баттал ауылынан булған икенсе класс балаһы бик борон ауылдарына Баттал исемле олатаһы нигеҙ һалыуы тураһында һөйләне. Ул, күҙҙәрен осҡонландырып: "Үҙем ҙур үҫкәс, улым тыуһа, Баттал исемен ҡушам", - тип өҫтәп ҡуйҙы. Ошо түгелме ни тыуған еренә, халҡына оло мөхәббәт, быуындар бәйләнеше, күсәгилешлелек!

Хоҙай Тәғәлә халыҡтарҙы төрлө милләт кешеләре итеп яралтҡан, шулай булғас, бөтәһен бер "тараҡ менән тарау" урынлымы? Йәмғиәтебеҙҙә кешене асылынан яҙҙырып аҙғын тормош, талау, үлтереш тураһында көнө-төнө төрлө яҡлап мәғлүмәттәр ағылған заманда баланы туған телендә һөйләшеүҙән, тарихыбыҙҙы, мәҙәниәтебеҙҙе өйрәнеүҙән мәхрүм итеү урынлымы? Юҡ, был ҙур енәйәт, тип иҫәпләйем. Уйланығыҙ, йәмәғәт! Көслөп асҡан күҙҙең яҡтыһы булмай. Һәр бала үҙ туған телендә һөйләшергә, шәжәрәһен, тыуған еренең тарихын белергә, батырҙары менән ғорурланып үҫергә тейеш, шул саҡта ғына беҙ милләт булып һаҡланып ҡала алырбыҙ.

**Шәһүрә ӘХМӘҘИЕВА.**
**Учалы районы.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Рәсәйҙең Үҙәк һайлау комиссияһы Башҡортостан Үҙәк һайлау комиссияһының әлеге башлығы Хәйҙәр Вәлиевты яңы срокка һайларға тәҡдим итте. Ошо хаҡта ҡарар Мәскәүҙә һайлауҙы ойоштороусыларҙың ултырышында ҡабул ителде. Башҡортостандың Үҙәк һайлау комиссияһы яңы составта беренсе ултырышҡа 27 июндә, элекке комиссияның вәкәләттәре ваҡыты тамамланғас, йыйыла.

✔М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры Мәскәүҙең М.С. Щепкин исемендәге театр училищеһында "Актерлыҡ сәнғәте" һөнәре буйынса уҡыу өсөн конкурс иғлан итте. Һайлап алыуҙа ҡатнашыуға документтарын тапшырған дәғүәселәр өсөн 3 июлгә тиклем ижади консультациялар уҙғарыла. Баш ҡала профессорҙары үҙҙәре Өфөгә килеп, дәғүәселәрҙән имтихан аласаҡ.Тулыраҡ мәғлүмәт - 8(347) 235-78-16, 8(347) 233-59-00 телефондары буйынса.

✔Башҡортостан статистары социаль әһәмиәтле аҙыҡ-түлеккә сираттағы хаҡтарҙың артыуы хаҡында хәбәр итте. Бер аҙна эсендә аҡ күсәнле кәбеҫтәнең хаҡы - 21 процентҡа ҡиммәтләнгән һәм килограмы 49,78 һумға еткән. Шулай уҡ картуф, алма, кишер, башлы һуған ҡиммәтләнгән. Хаҡтары арткан аҙыҡ-түлектәрҙең исемлегенә шулай уҡ шәкәр, он, йомортҡа, тоҙ, дөгө ярмаһы, тауыҡ, һыйыр ите, арыш ононан, арыш һәм бойҙай оно ҡатышмаһынан бешерелгән икмәк, ҡайнатылмаған һөт һәм сәй ингән.

✔"Йәшлек моңо - 2017" башҡорт эстрада йырҙарын башҡарыусылар төбәкара конкурсы 30 июндән 1 июлгә ҡәҙәр Илеш районының Үрге Йәрмәкәй ауылында "Башҡорт йәштәре дуҫтарын йыйа" йәштәр мәғариф форумы сиктәрендә уҙғарыла. Конкурстың ойоштороусылары - Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты, Мәҙәниәт министрлығы, Илеш районы хакимиәте.

✔"Өфөнән һөйөү менән" фильмын Мәскәү халыҡ-ара кинофестивале сиктәрендә күрһәтәләр. Уны Мәскәүҙә 25 июндә Кино йортоноң ҙур залында "2017 йылғы иң яҡшы Рәсәй фильмдары панорамаһы" конкурстан тыш программаһы сиктәрендә күрһәтеү күҙаллана. Кино йортоноң залы 1000 урынлыҡ, инеү ирекле, тип аңлатты ойоштороусылар.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Кеше буш ваҡытында күңеленә ятҡан, теләп башҡарған эш менән мәшғүл булһа, ҡайҙалыр урамда фонарь ватып йөрөргә теләге лә тыумаҫ. Мин аралашҡан таныш үҫмерҙәр тап шундай, һәр кемдең үҙенә оҡшаған шөғөлө бар.*



ӘЙТӘГҮР!

# МАТУРЛЫҠТЫ...

## күрә белһен бала



**Өфөлә мәҙәниәт һәм сәнғәт ҡомартҡыларын емереү, бина диуарҙарын бысратыуҙы иҫкәртеү ниәтендә ошо көндәрҙә Якутов исемендәге паркта "День М" тип аталған флэшмоб уҙҙы. Сөнки баш ҡалала яңы төҙөкләндерелгән парктарҙа, урамдарҙа вандалдарҙан зыян күреү осраҡтары йышайҙы. Ошо күңелһеҙ күренеш тураһында Республика инженер-лицей интернаты уҡыусыһы Алмас Ғиниәтуллин менән һөйләшәбеҙ.**

➔ **Мәҙәниәт һәм сәнғәт ҡомартҡыларын емереүселәрҙең ҡылығы нимәгә бәйле тип уйлайһың? Уларҙы төрлө иҫкәртеү саралары ярҙамында тәрбиәләп буламы?**

- Мәҙәниәт һәм сәнғәт ҡомартҡыларын емереүсе таныштарым юҡ, мин аралашҡан йәштәштәрем араһында ундай тәртип боҙоп йөрөүселәрҙе белмәйем. Әммә баш ҡала урамдарында йөрөгәндә торлаҡ йорттар диуарҙарына яҙылған аңлайышһыҙ һүҙҙәр, тамғалар йыш күҙгә ташлана. Ҡалала тәртип боҙоп йөрөүселәрҙең күбеһе минең менән йәштәш үҫмерҙәрҙер, моғайын, йәки саҡ ҡына олораҡтарҙыр. Ләкин уларҙың ни сәбәптән шулай матурлыҡ өсөн эшләнгән нәмәләргә зыян килтереүенә аңлатма бирә алмайым. Парктарҙа кискеһен ял итеп йөрөгән кешеләргә уңайлы булһын өсөн фонарҙар ҡуйыла - вандалдар уны берәмләп ватып китә. Тәрбиә етмәгәндән шулай итәләрҙер, бәлки. Йәки күңел асыр өсөн көс ҡулланыуҙы норма итеп алғандарҙыр. Шундай кешеләр ҙә була бит: берәйһен кәмһетһә, ниндәйҙер этлек эшләһә, күңелдәре күтәрелә. Үҙе йәшәгән ҡаланы, ундағы халыҡты яратмаған һәм зыян килтереп кәйефен күтәреүсе кеше инде ул вандал. Ярай әле, биналарҙы ғына бысратып буяп йөрөһәләр, ҡайһы берҙәре тарихи ҡомартҡыларҙы да боҙа бит, һәйкәлдәрҙе ватып, буяп китә. Улар шул рәүешле кемдәргәлер протест белдереп, үҙенең көсһөҙлөгө өсөн башҡаларҙан үс алып маташа, күрәһең.

Бала тирә-яғындағы матурлыҡтарҙы ҡәҙерләргә өйрәнеп үҫһен өсөн уға үҙе яратҡан шөғөлдө табырға ярҙам итергә кәрәк. Кеше буш ваҡытында күңеленә ятҡан, теләп башҡарған эш менән мәшғүл булһа, ҡайҙалыр урамда фонарь ватып йөрөргә теләге лә тыумаҫ. Мин аралашҡан таныш үҫмерҙәр тап шундай, һәр кемдең үҙенә оҡшаған шөғөлө бар. Мин үҙем компьютерға программалар яҙыу, IT-технологиялар менән мауығам, күп кенә проекттарым да бар. Таныштарым, дуҫтарым араһында спорт, һүрәт, фильм төшөрөү, мәҡәләләр яҙыу, роботтар төҙөү менән шөғөлләнгәндәр күп. Шуға күрә, балалар өсөн әлеге Якутов паркында ойошторолған флэшмоб кеүек саралар гел үткәрелеп торорға тейештер, тип уйлайым. Ундай саралар ваҡытында, гәҙиттә, асфальтҡа һүрәт төшөрөү, граффити буйынса оҫталыҡ дәрестәре лә ойошторола. Һәр хәлдә, унда балалар һәм үҫмерҙәр үҙҙәренә яңы шөғөл табасаҡ, һис юғы, һүрәт төшөрөү оҫталыҡтарын дөрөҫ ҡулланырға өйрәнәсәк, тип ышанам.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

БАШ ҠАЛАМ

# РЕКЛАМА ТУРАҺЫНДА ЛА...

## һөйләшеп тороу кәрәк

**Ҡуртым ваҡыты үтеү сәбәпле, Өфөләгә 400-ҙән ашыу реклама конструкцияһы хужаларына рекламаларын алырға ҡушылды. Реклама щиттарының күпселеге Өфө - аэропорт трассаһынан, Октябрь һәм Салауат Юлаев проспектынан, шулай уҡ ҡала үҙәгенән алынырға тейеш. 2014 йылдан алып баш ҡалала реклама конструкциялары 1,5 мең самаһы берәмеккә кәмегән. Ҡала халҡы уларҙың аҙайыуына иғтибар иттеме икән, әллә реклама түгел, улар өсөн башҡа мәсьәләләр мөһимерәкме? Ошоно асыҡлау өсөн һорауҙарыбыҙҙы яҙыусы Фәрзәнә АҠБУЛАТОВАға төбәнек.**



➔ **Өфөлә бөгөнгө урамдарҙағы рекламаларҙың өстән бер өлөшө алынған, йәғни ҡала йөҙө бер ни тиклем таҙарып ҡалған. Был үҙгәреш күҙгә салындымы?**

- Эйе, элек улар күҙҙе бик сыбарлай ине. Хәҙер сама, зауыҡ тигән нәмә һиҙелә башланы шикелле. Телеүҙәк эргәһендәге ҙур щиттар һирәгәйҙе. Юғиһә, көсլө ел-дауыл булһа, ҡурҡыта торғайны. Етмәһә, эргә-тирәлә машина күп ҡуйыла. Хәүефһеҙлек яғынан ҡарағанда ла дөрөҫ эшләнә, тип уйлайым.

➔ **Реклама - прогресс двигателе, тиҙәр. Хәҙерге заманда уларһыҙ ҙа йәшәп булмай. Үҫеш, алға китеш булһын өсөн рекламаның ниндәй төрөн тәҡдим итер инегеҙ?**

- Рекламаһыҙ тормошто, әлбиттә, күҙ алдына килтереп булмай. Улар мәғлүмәт бирә, нимәгәләр беҙҙең иғтибарҙы йәлеп итергә тырыша. Мин Көнбайыштың күпселек һатып алыусыһы реклама серен өйрәнгән, алға киткән, тип уйлайым. Беҙҙең башҡорттарға үҙ тауарын рекламаларға уларҙан өйрәнергә кәрәк. Артта ҡалғанбыҙ. Ниндәй төр булһа ла, ул ышандырырға тейеш. Быныһы инде реклама биреүсенең хәстәре.

➔ **Хәҙер халыҡ, нигеҙҙә, реклама буйынса йәшәй һәм нимә рекламалана - шуны һатып ала. Һеҙ ҙә шулай итәһегеҙме? Һеҙҙең ҡарамаҡҡа рекламаның ыңғай һәм кире яҡтары?**

- Халыҡтың төрлөһө бар. Ул рекламаны мәғлүмәт тип ҡабул итә. Шуға ышанып һатып ала. Минең дә ышанып киткән саҡтар була, алданған мәлдәр ҙә. Ләкин хәҙер рекламаны ҡарғандан һуң уйлап-тикшереп, бүтәндәрҙән белешеп кенә һатып алырға тырышам. Интернетта күп баһалама яҙалар. Һәр тауар тураһында шунда уҡ мәғлүмәт табырға була. Ышанам халыҡ фекеренә, улар биргән баһаға. Рекламаның кире яҡтары балаларға йоғонто яһай, тием. Улар рекламаның һәр һүҙен яттан һөйләй ала, хатта шиғырҙы ла улай ятламаҫтар. Фастфуд күпләп һатып алына. Һимереү сире барлыҡҡа килде күп илдәрҙә. Мосолман донъяһы рекламаға, йәғни тауар тәҡдим итеүсегә бер ни тиклем ҡаршы тороу мөмкинлеге бирә. Хәләл ризыҡ - бына уның төп талабы. Беҙ Ислам ҡанундарына таянһаҡ, күп сир, бәләләрҙән ҡотола алабыҙ. Һәйбәт тауар рекламаланырға тейеш. Шуныҙ ихтыяж булған әйберҙе нисек табайыҡ? Ыңғай яҡтары ла, кире яҡтары ла күп. Был мәсьәлә тураһында даими һөйләшеүҙәр ойошторорға, аралашырға, уҡыусылар, ҡулланыусылар, йәмғиәтселек фекерен еткереп барырға кәрәк.

**Земфира ХӘБИРОВА яҙып алды.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ВАҠЫТЫНАН АЛДА - ПЕНСИЯҒА

Ғәмәлдәге Рәсәй законы буйынса биш һәм унан күберәк бала табып, уларҙы 8 йәшкә тиклем тәрбиәләгән һәм 15 йыл эш стажы булған күп балалы әсәләр ваҡытынан алда пенсияға сығыу хоҡуғына эйә. Был осраҡта пенсия пенсия йәшенә (ҡатындар өсөн 55 йәш) етерҙән 5 йылға алдараҡ тәғәйенләнә. Башҡортостан Республикаһында әлеге көнгә ҡартлыҡ буйынса страховкалы пенсияға ваҡытынан алда сыҡҡан 35057 күп балалы әсәй йәшәй.

Алыҫ Себер райондарында 12 йыл эшләгәндәр, йәки шуға тиңләштерелгән урындарҙа 17 календарь йыл стажына һәм шулай уҡ 20 йыл страховкалы эш стажына эйә булған ике һәм унан күберәк балаһы булған ҡатындар ҙа ваҡытынан алда страховкалы пенсияға 50 йәштән сығыу хоҡуғы менән файҙалана ала. Пенсия тәғәйенләү өсөн талап ителгән күләмдә пенсия балина ла эйә булырға кәрәк. 2017 йылда уның күләме 11,4-тән дә кәм түгел. Республикала 652 ҡатын ошондай хоҡуҡтары менән файҙаланды ла инде.

Ғәмәлдәге пенсия законы шулай уҡ күп балалы әсәләрҙең эшләй алмаған осорҙарын иҫәпкә алып барыу тәртибен дә ҡарай. Баланы йәш ярымға тиклем ҡараған осор, тик ул дөйөм алғанда 6 йылдан да артыҡ булмаһа, страховкалы стажға индерелә. Был осорҙар өсөн пенсия балдары шулай иҫәпләнә: 1,8 - тәүге баланы ҡараған осор; 3, 6 - икенсеһен; 5,4 - өсөнсө һәм дүртенселәрен.

**Рәсәй Пенсия фондының БР бүлексәһе матбуғат хеҙмәте.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓30 июндә - 1 июлдә Башҡортостанда ер һөрөү буйынса Рәсәйҙең асыҡ чемпионаты ойошторола. Уны Өфөләге Нижегородка биҫтәһе янында үткәреү күҙаллана. Бөтәһе Рәсәйҙең 30 төбәге һәм биш сит ил - Бөйөк Британия, Ирландия, Нидерландтар, Польша, Эстония ғариза биргән.

✓Алдағы көндәрҙә төбәктә ҡыҫҡа ваҡытлы ямғырҙар, боҙ ҡатыш ҡойон яуындар һәм йәшен менән үҙгәреүсән һауа тороошо республиканың күпселек райондарында һаҡланасаҡ. Температура фоны күп йыллыҡ уртаса күрһәткестәрҙән түбәнерәк буласаҡ. Һауа температураһы төндә +8,+13, көндөҙ +19, +24 градус тәшкил итәсәк.

✓Өфөлә туғыҙынсы тапҡыр "Коляскалар парады" ғаилә фестивале ойошторолдо. Балалар өсөн иң сағыу һәм үҙенсәлекле коляскаларҙың парады Ленин урамы буйлап "Башҡортостан" дәүләт концерт залынан алып И. Якутов исемендәге мәҙәниәт һәм ял паркына тиклем дауам итте.

✓Башҡортостанда "Сынла, салғы!" бесән сабыусыларҙың республика фольклор байрамына ғаризалар ҡабул ителә. Байрам 7 июлдә Ҡырмыҫҡалы районының Бишауыл-Уңғар ауылы эргәһендә ойошторола. Бесән сабыусылар ярышында теләгән һәр кем ҡатнаша ала. Ғаризалар 1 июлгә тиклем gukrcnt@mail.ru электрон адресына ҡабул ителә. Байрамды ойоштороусылар - Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, Ҡырмыҫҡалы районы хакимиәте.

✓Башҡортостан юлдаш телевидениеһының тапшырыуҙарын Ҡытайҙа күрһәтәсәктәр. Ҡытайҙа "Башҡортостан" медиахолдингы менән Аньхой телекомпанияһы араһында тейешле килешеүгә ҡул ҡуйылды. Был - Рәсәй-Ҡытай мөнәсәбәттәре тарихында ошондай форматтағы беренсе документ. Яҡтар киске эфирҙа урын алған видеоматериалдарҙы ебәрәсәк.

✓Ағымдағы йылдың 1 июлендә илдә эшкә яраҡһыҙлыҡ тураһындағы ҡағыҙҙарҙы электрон формала биреү тәжрибәһе таратыла башлай. Тиҙҙән ошо документтар буйынса ваҡытлыса эшкә яраҡһыҙлыҡ, йөклөлөк һәм бала табыу буйынса пособиелар түләнәсәк. Вице-премьер Ольга Голодец һүҙҙәренсә, пилот проекты Рәсәйҙең алты төбәгендә ҡулланыла ла инде.

✓ *Былтыр 5 балалар баҡсаһында башҡорт телен өйрәнеүсе яңы төркөмдәр асылды. Әле 21 балалар баҡсаһында туған башҡорт телен өйрәнеүсе төркөмдәр бар. Сентябрҙән тағы бер нисә төркөм асыу планлаштырыла.*



...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

**Өфө ҡала округы хакимиәтенең "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында" БР Законын тормошҡа ашырыу буйынса комиссияһы даими рәүештә ултырыштарын уҙғарып тора. Уларҙа ҡалалағы ойошмалар һәм предприятиелар, учреждениеларҙың дәүләт телдәрен ҡулланыу мәсьәләләре тикшерелә, асыҡланған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү буйынса кәңәштәр бирелә, кәрәкле урындарҙа методик һәм терминологик ярҙам күрһәтелә.**




# ҮҘ ТЕЛЕҢДӘ МӨРӘЖӘҒӘТ ИТ ТӘ...

## үҙ телеңдә яуап ал!

Уҙған аҙнала ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов етәкселегендә үткән сираттағы ултырышта Өфөнөң Орджоникидзе һәм Совет районларында, физик культура һәм спорт, ҡулланыу баҙары, туризм, ҡала дизайны өлкәләрендә ҡанундың үтәлеше мәсьәләләре тикшерелде.

- Орджоникидзе районында был йүнәлештә эш 1999 йылдан алып тормошҡа ашырыла, телдәр һәм терминология комиссияһы эшмәкәрлеге юлға һалынған. Отчет осоронда районда 80 яңы сауҙа үҙәге асылған, районда сауҙа, йәмәғәт туҡланыуы, көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү ойошмалары менән 57 кәңәшмә үткәрелде, - тип белдерҙе үҙенең сығышында райондың Гуманитар мәсьәләләр һәм мәғариф буйынса идаралыҡ начальнигы Юлия Мостафина. - Район территорияһында 4 эшкәртеү предприятиеһы эшләй һәм улар етештергән продукцияға мәғлүмәт ике дәүләт телендә яҙыла. Йыл башынан алып комиссия тарафынан район территорияһында урынлашҡан спорт объекттарына рейд үткәрелде һәм асыҡланған етешһеҙлектәр, хаталар әлеге көнгә төҙәтелде.

"Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында" БР Законын тормошҡа ашырыуҙа мәғариф ойошмалары ҙур урын алып тора. Үҫеп килеүсе быуынды грамоталы итеп тәрбиәләү маҡсатында районда уҡыусылар араһында хаталарҙы табыу буйынса конкурс үткәрелде. Уҡыусылар хаталарҙы фотоға төшөрөп ебәрҙе һәм комиссияға барлығы 70 фото килде. Районда 25 дөйөм белем биреү учреждениеһы эшләй. Уларҙа 16440 бала белем ала. 2016 - 2017 уҡыу йылында райондың 17 мәктәбендә - туған башҡорт телен, 12-һендә татар телен уҡытыу ойошторолған. Мәктәптәрҙә 41 туған тел кабинеттары бар, шуларҙың 34-е - башҡорт теле кабинеты, 7-һе - татар теле. 48-се Башҡорт лицейы белем биреү ойошмалары араһында Бөтә Рәсәй асыҡ смотр-конкурсында еңеү яуланы. Районда ике - 102 һәм 221-се - башҡорт балалар баҡсаһы бар. Былтыр сентябрҙә 5 балалар баҡсаһында башҡорт телен өйрәнеүсе яңы төркөмдәр асылды. Әле 21 балалар баҡсаһында туған башҡорт телен өйрәнеүсе төркөмдәр бар. 2017 йылдың сентябренән туған телдәр өйрәнеүсе тағы бер нисә төркөм асыу планлаштырыла. Районда башҡорт, татар, немец йәкшәмбе мәктәптәре эшләй. Уларҙа 300-ҙән ашыу бала белем ала. ЗАГС хеҙмәтендә никах теркәү ике дәүләт телендә алып барыла. Барлыҡ таныҡлыҡтар закон талаптарына тап килтереп тултырыла. Ата-әсәгә, балаға исем һайлағанда консультациялар бирелә.

Районда телдәрҙе, милли мәҙәниәттәрҙе үҫтереүгә арналған милли-мәҙәни саралар уҙғарыла. Һәр ҡайһыһы халыҡ исемен йөрөткән ете үҙешмәкәр коллектив бар. Улар киң күләм сараларҙа әүҙем ҡатнаша. Барлыҡ саралар тураһында мәғлүмәт ике дәүләт телендә ҡала хакимиәтенең сайтына урынлаштырып барыла. Шулай уҡ социаль селтәрҙәрҙә лә районлың үҙ төркөмө бар. Йылына ике тапҡыр матбуғат баҫмаларына яҙылыу ойоштороло

Совет районындағы хәлторош менән район хакимиәте башлығы урынбаҫары Ольга Ижбулдина таныштырҙы.

- Даими эшләүсе комиссияға 12 кеше инә. Ошо ваҡыт эсендә милли мәғариф, мәҙәниәт, нәшриәт, эш ҡағыҙҙарын, алтаҡталарҙы ике дәүләт телендә яҙыу һ.б. буйынса күп эштәр тормошҡа ашырылды. Былтыр 4 ултырыш уҙғарылһа, быйыл ике ултырыш үтте. Уларҙа сауҙа, сәнәғәт, мәғариф, мәҙәниәт һәм йәштәр сәйәсәте өлкәһендә дәүләт телдәрен тормошҡа ашырыу мәсьәләләре ҡаралды. Район баш ҡаланың үҙәге булараҡ, унда урамдарҙың визуаль биҙәлешенә ҙур иғтибар бирелә. Терминология комиссияһы урамдарҙың, йорттарҙағы аншлагтар һәм алтаҡталарҙың дөрөҫ аталышын һәм яҙылышын тикшерә. Предприятие, ойошма, учреждениелар етәкселәренә методик һәм ғәмәли ярҙам күрһәтә. Йыл башынан хаталы 102 алтаҡта табылды, шул иҫәптән 48-е - сауҙа предприятиеһы, 20-һе - көнкүреш хеҙмәте, 6 - йәмәғәт туҡланыуы, 5 -медицина хеҙмәте ойошмалары, 5 - коммерция дарыуханаһы, 2-һе - туҡталыш павильонында. Башҡорт телендә хата булған 58 алтаҡта булыуы асыҡланды. Бик йыш дөрөҫ булмаған тәржемәләр осрай. Башҡорт теленә тәржемәләре бөтөнләй булмаған алтаҡталар ҙа бар. Бындай етешһеҙлек 75 предприятиела асыҡланды. Отчет осоронда 500-ҙән ашыу предприятиела күсмә тикшереүҙәр барышында асыҡланған хаталарҙы бөтөрөү буйынса эш алып барыла. ЗАГС-тарҙа никахтар ике дәүләт телендә теркәлеп кенә ҡалмай, тантаналар барышында милли йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәр башҡарыла.

2016/2017 уҡыу йылында райондың дөйөм белем биреү мәктәптәрендә 14185 бала белем ала. Барлығы мәктәптәрҙә 30 милләт балаһы уҡый. Башҡорт теле һәм әҙәбиәтен 2304 уҡыусы уҡый (башҡорт балаларының 95,8 проценты) һәм өйрәнә. Китапханалар фонды башҡорт әҙәбиәте менән тулыланып тора. Районда милли спорт уйындарына ҙур иғтибар бирелә. Даими рәүештә киң мәғлүмәт саралары мониторингы үткәрелә һәм район тураһындағы тәнҡит мәҡәләләре тәржемә ителеп, район хакимиәте башлығына хәл итеү өсөн тапшырыла.

Район хакимиәтендә граждандарҙың дәүләт телдәрендә мөрәжәғәт итеү хоҡуғы һаҡлана. Уларға яуап мөрәжәғәт яҙылған телдә бирелә. Һуңғы ваҡытта граждандарҙың алтаҡталарҙы, иғландарҙы һ.б. дөрөҫ яҙыуға иғтибар итеү буйынса әүҙемлеге һәм иғтибары арта барыуын билдәләргә кәрәк...

Шулай уҡ ултырышта Сергей Степановтың, Игорь Сысолятиндың, Рустамхан Аббасовтың сығыштары тыңланды. Мәғлүмәт буйынса фекер алышыуҙарҙан һуң ҡарар проекты нигеҙҙә ҡабул ителде.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

КӨНАУАЗ

# ИМТИХАНДАР ТАМАМ...




**Мәктәп уҡыусылары ошо көндәрҙә Берҙәм дәүләт имтихандарын тапшырып бөттө. Имтихандың төп этабы 29 майҙан 19 июнгә тиклем дауам итте, һуңғы һынауҙар химия һәм тарих предметтары буйынса үтте. Әлеге көндә тәүге тапҡырҙан тейешле балл йыя алмаған уҡыусылар, ғәфү итерлек сәбәптәр буйынса тапшырмағандар һәм үткән йылдарҙың сығарылыш уҡыусылары өсөн 1 июлгә тиклем һынау осоро билдәләнгән.**

Берҙәм дәүләт имтиханын быйыл Башҡортостанда ун һигеҙ меңдән ашыу уҡыусы тапшырҙы. БР Мәғариф министрлығының 20 июнгә ҡарата мәғлүмәттәре буйынса ете предметтың һөҙөмтәләре билдәле булған. Билдәләүҙәренсә, алдағы йылдар менән сағыштырғанда быйыл уҡыусыларҙың әҙерлек кимәле күпкә яҡшырған: БДИ-ның уртаса балдары күтәрелгән һәм "икеле" алыусылар һаны кәмеүе күҙәтелгән. Йылдағыса, техник йүнәлешле юғары уҡыу йорттарына уҡырға инеү өсөн профилле математика буйынса имтихан тапшырыусы уҡыусылар һаны күп, быйыл да улар 60-70 процентты тәшкил итә. Профилле математика буйынса уртаса балл былтыр 49,6 булһа, быйыл ул 50,8 балға тиклем күтәрелгән. Ә информатика предметы буйынса белемде баһалау 55,7 балдан 59,9 балға тиклем артҡан. Берҙәм дәүләт имтиханын беренсе тапҡырҙан тапшыра алмаған уҡыусылар һаны ла кәмегән. Былтыр имтихандың төп этабында "икеле" алыусылар 11,1 процент тәшкил итһә, быйыл 9,4 процент тәшкил иткән. Тимәк, бала мәктәп йылдарында яҡшы өлгәшкән предметтары буйынса БДИ тапшырһын, үҙенә кәрәкле һөнәрҙе мөмкинлектәренә ҡарап һайлаһын өсөн дә мәғариф учреждениеларында тейешле эш алып барыла.

Әйткәндәй, уҡыусылар үҙҙәре һайлап алған предметтар араһында иң беренсе урында профилле математика тора. Юғары уҡыу йортона уҡырға инергә дәғүә итеү өсөн был предмет буйынса иң кәмендә 27 балл йыйырға кәрәк. Шулай уҡ уҡыусылар йәмғиәтте өйрәнеү фәненә лә өҫтөнлөк бирә, уның буйынса вуздарҙа талап ителгән имтихан һөҙөмтәһе 42 балдан кәм булмаҫҡа тейеш. Республика уҡыусылары биргән имтихандар араһында популярлыҡ буйынса өсөнсө урында физика фәне килә, уның буйынса 36 балл минималь тип билдәләнгән. Артабан биология һәм тарих фәндәре, уларҙан кәмендә 36 һәм 32 балл йыйыу талап ителә. Ә бына мотлаҡ тапшырылырға тейешле рус теле предметы буйынса БДИ һөҙөмтәләре ошо арала билдәле буласаҡ, әлегә уҡыусыларҙың яуаптары тикшерелә.

БР Мәғариф министрлығы белгестәре әйтеүенсә, республикала Берҙәм дәүләт имтихандары буйынса иң юғары - 100 балл йыйған уҡыусылар ҙа бар. Бөгөнгө көндә географияны 1, информатиканы - 13, профилле математиканы - 1, йәмғиәтте өйрәнеүҙе - 1, рус әҙәбиәтен - 5, физиканы 14 уҡыусы иң юғары балға яҙған. "Республикабыҙҙың аҡыллы, тырыш, маҡсатлы уҡыусылары күп һәм беҙ улар менән хаҡлы рәүештә ғорурланабыҙ. Бәләбәй ҡалаһының 1-се һанлы гимназия уҡыусыһы Александр Козлов исемле егет һоҡландырҙы, ул профилле математика һәм информатика буйынса имтихандарын 100 балға тапшырҙы, физика буйынса ла юғары балл йыйҙы", - тине БР Мәғариф министрлығының бүлек етәксеһе Жанна Миникеева.

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Хроник бронхит

❖ 1 ҡалаҡ арыҫлан ҡойроғо үләне менән 2 ҡалаҡ кесерткәнде ваҡлап, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәттән һуң һөҙөргә һәм көн дауамында 3 өлөшкә бүлеп эсергә. Төнәтмәне көн һайын яңынан әҙерләргә.

### Гайморит

❖ Йәш кәбеҫтә япрағын төнгөлөккә маңлайға өс ҡат итеп һалып бәйләргә.

### Панкреатит

❖ Хроник панкреатит көсәйеп китһә, 1 ҡалаҡ үгәй инә үләне, 2-шәр ҡалаҡ һырлан (череда) һәм андыҙ тамырын эмаль һауытҡа һалып, ярты литр һыу ҡойорға, ҡайнау хәленә еткерергә, 5 минут талғын утта ҡайнатырға, 2 сәғәт төнәтергә һәм ашарҙан ярты сәғәт алда 0,5-1-әр стакан эсергә. Хәл яҡшырғансы көн һайын яңы төнәтмә яһап эсергә.

### Лейкоз

❖ Лейкоз аҙмаһын өсөн 1 ҡалаҡ ҡарабойҙай сәскәһенә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, һыуынғас, һөҙөргә һәм бер ай буйына көнөнә 3-4 тапҡыр яртышар стакан эсергә. Көн һайын яңы төнәтмә әҙерләргә.

### Артроз

❖ Артроз мәлендә һыҙланыуҙы баҫыу өсөн: 3 ҡалаҡ ваҡланған лавр япрағына 200 мл көнбағыш йәки етен майы ҡойорға, 6 көн йылы урында торорға, һөҙөргә һәм һыҙлаған урындарға һөртөргә.

### Баш ауыртыуы

❖ 1 балғалаҡ андыҙ тамырына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 10 минуттан һөҙөргә һәм ашарҙан ярты сәғәт алда көнөнә 4 тапҡыр 1/4 стакан эсергә.

### Тире сирҙәренән

❖ Диатез менән дерматитты дауалау өсөн 3-4 әстерхан сәтләүеген мейестә көрән төҫкә ингәнсе бешерергә. Һыуынғас, ярырға һәм сәтләүектәрҙе иҙергә, балыҡ майы ҡушып, компресс итеп һалырға. Кипһә, тағын алыштырырға. Оҙаҡ та үтмәй, тире таҙара.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ 2011 йылда Әбйәлилдә "Берҙәмлек" халыҡ-ара милли мәҙәниәттәр фестивале үтте, донъяның 17 иленән вәкилдәр килде. Шул сарала минең шәхси эштәремде Һиндостан, Франция, Кипр, Германия, АҠШ вәкилдәре һатып алды.



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## Фәрештә менән осрашыуы

Хәҙисәгә өйләнеүенә бер нисә йыл үткәс, сәйер күренештәр башлана - Мөхәммәт ваҡыты-ваҡыты менән ҡапыл ҡалтырана башлай, тәне тартышып, тотош тиргә бата. Был ваҡыттарҙа әле аңын юғалтмай. Бөркәнеп ята ла, береһен дә яҡын килтертмәй. Табиптарға йәки күрәҙәселәргә күренеүҙән дә ҡырҡа баш тарта.

Мәккәнән бер нисә сәғәтлек юлда урынлашҡан тауҙарға барып, шунда яңғыҙы ҡалыуҙы мәртәбә һанай башлай. Ул тауҙар тирәһендәге ер шул тиклем уңдырышһыҙ була, унда хатта көтөүселәр ҙә мал ҡыумай. Шуға ла Мөхәммәткә унда береһе лә ҡамасауламай. Мөхәммәт иһә унда намаҙ уҡый, доға ҡыла, уйҙарын ипләй. Үҙе менән аҙыраҡ ризыҡ ала ла, шул тауҙарға бер нисә көнгә ҡуна бара. Ер өҫтөнә ятып йоҡлай, ямғыр яуа башлаһа, мәмерйәгә инә. Ҡайһы берҙә, Мөхәммәт рөхсәт итһә, Хәҙисә лә уның менән бергә була. Изге рамаҙан айҙарын да Мөхәммәт ошонда үткәрә. Доғалар һәм намаҙҙар ярҙамында ул яйлап ҡына тыныслана һәм таҙарына.

610 йылдың рамаҙан айын да Мөхәммәт ошо тауҙарҙа үткәрә. Шулай уҡ доға уҡый, намаҙ ҡыла. Һәм бына рамаҙан айының 24-се көнө тамамлана. Төн етә. Мөхәммәт мәмерйәгә инеп йоҡларға ята. Ҡапыл уны кеше ҡиәфәтендәге ниндәйҙер йән эйәһе уята. Был йән эйәһенең ҡулында ниҙер яҙылған ҡағыҙ төргәк була.

- Уҡы! - ти ул Мөхәммәткә, төргәккә күрһәтеп.

- Мин уҡый белмәйем, - ти Мөхәммәт.

Йән эйәһе төргәкте Мөхәммәттең күкрәгенә һала. Төргәк тауҙай ауыр була, Мөхәммәттең тыны ҡыҫыла.

- Уҡы! - тип бойора уға йән эйәһе икенсе тапҡыр.

- Мин уҡый белмәйем, - тип үҙ һүҙен ҡабатлай Мөхәммәт, бик ныҡ ҡурҡыуына ҡарамаҫтан.

Йән эйәһе төргәк менән Мөхәммәттең күкрәген баҫа. Мөхәммәт тонсоға башлай.

- Уҡы! - тип уға өсөнсө тапҡыр бойорола.

- Нимә уҡырға һуң миңә? - тип һорай Мөхәммәт.

Йән эйәһе уға ошондай һүҙҙәр әйтә:

- Һине барлыҡҡа килтергән Раббыңдың исеменә уҡы. Кешене Ул уҡмашҡан ҡандан яратты, уҡы, һинең Раббың иң йомарт, Ул ҡәләм менән өйрәтте. Ул кешегә белмәгән нәмәне өйрәтте.

Мөхәммәт әйтелгән һүҙҙәрҙе ҡабатлау менән йән эйәһе күҙҙән юғала. Мөхәммәт иһә тәрән йоҡоға тала. Уянғас, төндә ҡабатлап әйтелгән һүҙҙәр йөрәгенә яҙылған кеүек тойола.

Мөхәммәткә ебәрелгән тәүге асылыш шулай була. Бынан һуң ул бәйғәмбәргә әүерелә, тик үҙе был турала белмәй әле.

Өйөнә ҡайтҡас, ул барыһын да Хәҙисәгә һөйләй. Төндә килгән йән эйәһенең фәрештәме, әллә яуыз рухмы икәнлеген аңғармай ҡалыуын әйтә. Хәҙисә иһә яуыз рухтарҙың фәҡәт ҡара күңелле кешеләргә генә килеүе, ә Мөхәммәттең бөтөн Мәккәлә иң изге, иң ихлас, иң ғәҙел кеше булыуы, ярлыларға ла йомарт булыуы тураһында оҙаҡ итеп телмәр тота. Тик Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе тулыһынса ышандыра алмай.

Ошо ваҡыт һүҙгә Хәҙисәнең Варака исемле ике туған ағаһы ҡушыла. Варака йәш сағында бик күп илдәрҙә сәйәхәт иткән, ә әлеге ваҡытта диндең төрлө йүнәлештәрен, дини китаптарҙы ныҡлап өйрәнгән кеше була. Ошо ваҡытта ул Хәҙисәләрҙең йортонда йәшәп, Муса бәйғәмбәрҙең китаптарын ғәрәп теленә тәржемә итеү менән шөғөлләнә. Мөхәммәткә Муса бәйғәмбәргә килгән фәрештә мөрәжәғәт иткән, тип белдерә ул.

**(Дауамы бар).**

ЕТМЕШ ҺӨНӘРЛЕ...

# ЯҢЫ ШӨҒӨЛ ӨЙРӘНЕРГӘ ТЕЛӘҺӘГЕҘ...

## уҡыусы табығыҙ

**Мәҡәләнең башындағы был һүҙҙәрҙе Әбйәлил районы Буранғол ауылынан "Кейеҙ йорто" етәксеһе Зөлфирә Ишбулды ҡыҙы Мәхийәнованан ишеттек. Ул бына 17 йыл инде семәрле кейеҙҙәр баҫа, был эштә ярайһы уҡ уңышҡа ла өлгәшкән. Әйтәйек, уның хеҙмәт емештәрен Франция, Кипр кеүек сит дәүләттәр кешеләре һатып алған. Зөлфирә Мәхийәнованың уңыш сере ниҙә? Ауылда йәшәп, конкурентлыҡҡа һәләтле тауар етештереп буламы? Һәм оҫталығыңды арттырыу өсөн ни өсөн уҡытыусы түгел, ә уҡыусы табырға кәңәш ителә? Ошо һәм башҡа һорауҙарға Әбйәлил оҫтабикәһенең үҙ яуабы бар. Уның уңыш тарихы ауылда йәшәүселәргә лә, ҡала халҡына ла - уңышҡа өлгәшергә теләгән олоһона-йәшенә лә яҡшы өлгө, файҙалы белем булыр, тип ышанабыҙ. Һүҙ - ҡунағыбыҙға.**









- Әбйәлил районы Исҡаҡ ауылында мәҙәниәт йорто мөдире булып эшләгән сағымда ауылыбыҙҙан 4 километр алыҫлыҡта ятҡан күрше Буранғол ауылындағы "Кейеҙ йорто"-на етәксе итеп тәғәйенләндем. Тәүҙәрәк мунса ҙурлыҡ ҡына йортта эшләһәк, тора-бара ауыл хакимиәте беҙгә ҙурыраҡ йорт һалып бирҙе. Бөгөн предприятиебыҙ ике ҡатлы бинала урынлашҡан.

"Кейеҙ йорто"ноң тап Әбйәлил ерендә эшләүе юҡҡа түгелдер. Кейеҙ баҫыу шөғөлө беҙҙең яҡтарҙа киң таралған. Уның сәбәбе, минең уйымса, инәйҙәрҙең йола ташламауында. Беҙҙең яҡта элек-электән ҡыҙҙарға бирнәлеккә кейеҙ әҙерләгәндәр. Ҡыҙ кейәү йортона күскән саҡта бирнәһен - кейеҙен дә биреп ебәрер булғандар. Был йоланы ҡайһы бер инәйҙәр бөгөн дә онотмаған. Минең үҙемдең дә бирнә-кейеҙем бар ине. Шулай итеп, бирнәгә кейеҙ әҙерләү йолаһының һаҡланып ҡалыуы арҡаһында был күренеш бөгөнгәсә килеп еткән дә инде.

Традициялар нигеҙендә кейеҙ баҫыу эшен йәнләндереп ебәреү әллә ни ҡыйын булманы. Әлбиттә, ҡайһы бер ауырлыҡтар ҙа булды. Әйтәйек, тәүҙәрәк үҙебеҙҙең түңәрәккә мәктәп балаларын йәлеп итеү ауырға төштө. Ни өсөн тигәндә, кейеҙ баҫҡанда ҡайнар һыу менән эш ителә. Шунлыҡтан, ата-әсәләр балаларын беҙҙең түңәрәккә йөрөтөргә ҡыйынһына ине. Ә беҙ тотторҡ та үҙ балаларыбыҙ менән шөғөлләнә башланыҡ. Ул саҡта 5-6-сы синыфтарҙа уҡыусы балалар хәҙер ҙурҙар инде. Беҙҙең түңәрәккә йөрөй башлаған балаларҙың тәүге уңыштары башҡаларға ла ышаныс өҫтәне - тәүҙәрәк беҙҙе һынап ҡына күҙәткән ата-әсәләр үҙ балаларын беҙгә йөрөтөргә, балаларына яңы һөнәр өйрәтеү мөмкинлеген ҡулдан ысҡындырмаҫҡа тырыштылар. 2000 йылдарҙа беҙҙең эш йәнләнде. Эшебеҙгә йәштәрҙе, балаларҙы йәлеп итеүсе ике сәбәптең береһен, ыңғай миҫалды, әйттек инде. Икенсеһе - ата-бабалар шөғөлөнә яңыса ҡараш булдырҙыҡ. Йәғни, беҙ кейеҙ етештереүҙе сәнғәт әҫәре ижад итеү кимәленә күтәрә алдыҡ. Кейеҙгә традицион ысул менән биҙәк һалғанда улар, тәүге формаһын юғалтып, тарала ла китә ине. Аныҡ ҡына сиге булмаған һүрәт, әлбиттә, сәнғәт әҫәре тип аталыуҙан алыҫ тора. Шуға ла беҙ үҙебеҙгә уҡыусылар йәлеп иттек. Ябай уҡыусылар түгел, ә рәссам һөнәрлеләрен һәм ошо һөнәргә уҡып йөрөүселәрҙе.

БР-ҙың атҡаҙанған рәссамы Тәлғәт Хәсән улы Мәсәлимов үҙенең студенттары менән йәй һайын беҙгә килә. Маҡсаттары кейеҙ баҫыу серҙәрен төшөнөү икәнен әйтеп тороуҙың кәрәге юҡтыр. Беҙ, үҙ сиратыбыҙҙа, рәссамдарҙан кейеҙгә һүрәттәр төшөрөү оҫталығын үҙләштереп ҡалабыҙ. Шулай итеп, беҙ - уларҙы, улар - беҙҙе өйрәтә, байыта. Рәссамдарҙың кейеҙгә һүрәт һалыу ысулы былай: улар биҙәкте энә ярҙамында һала. Шунлыҡтан, семәр нескә лә, айырым-асыҡ та килеп сыға. Ике яҡлы тәжрибә уртаҡлашыу һөҙөмтәһендә кейеҙгә рәсемдәр төшөрөү күренеше барлыҡҡа килде. 2011 йылда Әбйәлилдә "Берҙәмлек" халыҡ-ара милли мәҙәниәттәр фестивале үтте, донъяның 17 иленән вәкилдәр килде. Был ваҡиға беҙҙең эшмәкәрлегебеҙ тарихына алтынептәр менән яҙылды. Шул сарала минең шәхси эштәремде Һиндостан, Франция, Кипр, Германия, АҠШ вәкилдәре һатып алды. 30 һумға һатып алынып, 250 һумға теттерелгән йөндән бәйләнгән күкрәксенде бер француз 3 мең һумға һатып алды.

Һәйбәт итеп шөғөлләнһәң, был эштән ярайһы уҡ килем алырға ла була. Хәҙер кейеҙ модаға инеп китте бит. Беҙҙең тарафтан "аҡса саҡыра торған тауар" тип аталған ваҡ ҡына уйынсыҡ бейма-сувенирҙар, семәрле кейеҙ түбәтәйҙәр, биҙәкле биймалар, рамға ҡуйылған кейеҙ картиналарыбыҙ ҙур һорау менән файҙалана. Күптән түгел Өфөләге "Өфө-Ладья" күргәҙмәһенә килеп, ҡасандыр беҙҙә уҡып киткән таныш рәссамдарҙың матур-матур эштәрен күрҙек. Халҡыбыҙҙың боронғо был кәсебен заман талаптарына ярашлы итеп үҫтереүгә үҙ өлөшөбөҙҙө индереүебеҙ беҙҙе ҡанатландыра, дәртләндерә, рухландыра. Беҙҙең артыбыҙҙа аҙнаһына 4-әр сәғәтлек дәрестәргә йөрөүсе балалар һәм үҫмерҙәр тора. Улар араһынан был милли кәсепте шәхси эшҡыуарлыҡ дәрәжәһенә еткерер егеттәр, ҡыҙҙар ҙа килеп сығыуы бик ихтимал әле.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ҡунағыбыҙ - Әбйәлил районы Буранғол ауылы "Кейеҙ йорто" етәксеһе Зөлфирә Ишбулды ҡыҙы Мәхийәнованың һөйләгәненән кем ниндәй фәһем, аҡыл алыр - әлегә билдәһеҙ. Бәлки, кемдер тәүәккәлләп кейеҙ баҫыуға тотонор, кемдер битараф ҡалыр, ә кемдер, бәлки, үҙ эшендә әлеге ыңғай миҫалды - бер-берендe өйрәнеүҙе файҙаланып, оҫталығын камиллаштырып, эшен йәнләндерер. Һәр хәлдә, бер кем дә отолмаҫ.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

✓ ***Өфө губернаһында башҡорттар Ырымбур губернаһына ҡарағанда ла күберәк булып, ҡырҡ процентты тәшкил итә. Шуға күрә лә, һәр яҡтан Өфө Башҡортостандың баш ҡалаһы булырына хоҡуҡи нигеҙҙәр етерлек була.***



*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

**Бөгөн тарих фәне ярайһы уҡ үҫеш алды. Быҕаса ҡалыплашҡан ҡайһы бер тарихи мәғлүмәттәргә икенсе ҡараштар асылды. Тарихи тикшеренеүҙәр тәрәнәйҙе, белемле йәш тарихсылар үҫеп сыҡты, дөрөҫлөк, хәҡиҡәт алға ҡуйылды. Был күренештәр башҡорт халҡы тарихында ла сағылыш тапты. Аптырарға ла түгелдер. Тарих бит ул шундай нәмә: нисек кенә булғанда ла унын мәғлүмәти һүрәтләнешен ил сәйәсәте хәл итә. Әгәр ил сәйәсәте теге йәки был мәғлүмәтте халыҡҡа үҙенә ҡулайлы юҫыҡта еткерергә теләй икән - шулай була ла, тарих киләһе быуындарға бөтөнләй икенсе эстәлектә барып етә. "Тарихи хәҡиҡәт" рубрикаһында беҙ халҡыбыҙ тарихындағы ҡалыплашҡан һәм әллә ни дөрөҫлөккә тап килеп етмәгән фекерҙәрҙе, мәғлүмәттәрҙе яҡтырта киләбеҙ. Хәҡиҡәти һүҙ талап ителгән ҡайһы бер һорауҙарҙы әле БР Китап палатаһы директоры, тарихсы, хәрби-тарихи фәнни-публицистик мәҡәләләр һәм китаптар авторы Азат ЯРМУЛЛИНға төбәйбеҙ.**

# ТЕМӘС БАШ ҠАЛА БУЛҒАНМЫ?

**Азат Шәкирйән улы, Темәс ауылы Башҡортостандың тәүге баш ҡалаһы, тигән мәғлүмәтте асыҡлайыҡ әле. Милли хәрәкәт Ырымбурҙа башлана, Темәскә күсеү ваҡиғалар ағышында мәжбүри килеп сыға. Билдәле булыуынса, бер тарихи документтарҙа ла Темәстең баш ҡала итеп иғлан ителеү факты юҡ, әммә был легенда бар. Һәм ошо легенда Башҡортостанды тик Бәләкәй Башҡортостан булып ҡына формалашырға тейеш булған, тигән яңылыш фекер тыуҙыра. Ошо өлкәне өйрәнгән белгес булараҡ, аныҡ ҡына аңлатма биреүегеҙҙе һорайбыҙ?**



- Республикабыҙҙың гүзәл тәбиғәтле Темәс юлдарынан үтеп йөрөгәс, унда торған "Башҡортостандың тәүге баш ҡалаһы" тигән мәртәбәле яҙыуҙы ла күрәм һәм, тарихсы булараҡ, һәр ваҡыт ошо мәсьәләне асыҡларға кәрәк, тип уйлай инем. Ни өсөн Темәс ауылы Башҡортостандың тәүге баш ҡалаһы булып киткән икән? Документтарҙы өйрәнә башлағас, бик тә ҡыҙыҡлы фактарға юлыҡтым.

Беренсенән, тәү баштан уҡ башҡорт халҡы үҙ милли дәүләтселегенең баш ҡалаһы итеп Өфөнө күргән. 1917 йылдың декабрендә Ырымбур ҡалаһында 3-сө Дөйөм Башҡорт ойошторою ҡоролтайы була, автономия раҫлана, Башҡортостан хөкүмәте төҙөлә. Быңа шунда 20 декабрҙә ҡабул ителгән ҡарарҙа *"Резиденция правительства Башкурдистана должна быть в городе, находящемся в центре края"*, тип әйтелә. Белеүебеҙсә, Ырымбур Башҡортостандан ситтә ятҡан ҡала, хатта Әхмәтзәки Вәлидиҙең автономия картаһында ла ул Башҡортостанға индерелмәгән. Үҙәктә иһә борон-борондан Өфө ҡалаһы ята. Хатта революцияға тиклемге үҡ матбуғатта ла Өфө ҡалаһы Башҡортостандың баш ҡалаһы итеп телгә алына: *"Уфимская губерния, если можно так выразиться, губерния башкирская - по преимуществу; г.Уфа условно называется часто в печати "Столицей Башкирии"*. Тимәк, Өфө ҡалаһы электән үк Башҡортостандың үҙәге, баш ҡалаһы булараҡ танылған. Шунлыҡтан, Башҡортостан хөкүмәте Ырымбурҙа, Каруанһарайҙа ултырһа ла, Башҡортостан үҙәге Өфөлә булырға тейеш, тигән ҡарар ҡабул иткән. Бында Өфө ҡалаһы телгә алынмай, сөнки унда Ваҡытлы хөкүмәт органдары, төрки-татар милли мәжлесе урынлашҡан була. Бәхәскә инмәү өсөн ҡаланың исеме аталмаған, моғайын. Бының тап шулай булыуын Әхмәтзәки Вәлиди үҙенең иҫтәлектәрендә лә яҙа.

Икенсе Дөйөм Башҡорт ҡоролтайы 1917 йылдың августында махсус рәүештә Өфөлә үткәрелә. Был, Өфө ҡалаһы - Башҡортостандыҡы, тигәнде күрһәтеү маҡсатынан эшләнә. Әйткәндәй, Өфө губернаһында башҡорттар Ырымбур губернаһына ҡарағанда ла күберәк булып, ҡырҡ процентты тәшкил итә, урыҫ халҡы уларҙан һан яғынан әҙерәк була, башҡа халыҡтар тураһында әйтеп тораһы ла түгел. Шуға күрә лә, һәр яҡтан Өфө Башҡортостандың баш ҡалаһы булырына хоҡуҡи нигеҙҙәр етерлек була. Бөгөн ҡайһы бер хөсөттәр, ҡайһы бер интернет селтәрҙәре, һеҙҙең автономия ул Бәләкәй Башҡортостан сиктәрендә генә һәм уның баш ҡалаһы Темәс булған бит, тип, халыҡ аңына ялған фекер һеңдерергә тырыша икән, уларҙың раҫлауында бер ниндәй дәлил дә, нигеҙ ҙә юҡ.

Ә дөрөҫө шулай: 1917 йылдың 15 ноябрендә бөтә башҡорт ерҙәре Башҡортостан автономияһы тип иғлан ителә, улар - Өфө, Ырымбур, Пермь, Һамар губерналары территорияһын үҙ эсенә ала. Әммә иғлан итеү - бер эш, уны тормошҡа ашырыу - икенсе мәсьәлә. Шуның өсөн беҙҙең ул замандағы милли хәрәкәт етәкселәребеҙ, эштең ҡатмарлылығын аңлап, бик аҡыллы йүнәлеш ала. Тәү сиратта автономияны Ырымбур һәм Пермь губерналарындағы башҡорт олоҫтарында ғәмәлгә индерергә, шунда автономия органдарын булдырырға, тигән ҡарар ҡабул итәләр. Шул территориялар аҙаҡ "Бәләкәй Башҡортостан" тигән исем ала. 3-сө Дөйөм Башҡорт ҡоролтайында былай тип ҡарар ҡылалар: 1917 йылда Бәләкәй Башҡортостан сиктәрендәге автономияны ғәмәлгә ҡуйбыҙ, унда үҙебеҙҙең автономия идараһын индерәбеҙ. Артабан, 1918 йылда Өфө губернаһы өйәҙҙәрендә йыйындар үткәреп, автономия органдарын булдырып, Башҡортостанға ҡушабыҙ, тиҙәр. Өфө губернаһы өйәҙҙәрендә йыйындар үткәреү даталары ла билдәләнгән була. Һәр өйәҙ ҡоролтайына вәкил итеп Башҡортостан хөкүмәте ағзалары тәғәйенләнә. Мәҫәлән, Шәйехзада Бабич үҙенең тыуған яғы Бөрө өйәҙенә вәкил итеп һайлана. Документта былай тиелгән: *"В той части Башкирии, где новое автономное управление уже вводится в жизнь, а именно: на башкирской территории Оренбургской губернии, Шадринского, Екатеринбургского и Красноуфимского уездов Пермской губернии и Юмран-Табынской волости Бузулукского уезда Самарской губернии, - правительство Башкурдистана взамен уездных и губернских земств учреждает кантональные думы, присоединяя к этой территории и восточную часть Уфимской губернии, тоже населеной башкирами.*

*Для введения автономного управления в западной Башкирии, а именно: в западных частях Уфимской, Самарской и Пермской губернии - должны быть созваны там не позже января 1918 года уездные съезды. На этих съездах мусульмане западной Башкирии должны организовать кантональные управления и тем взять бразды правления в свои руки. Правительство же Башкурдистана со своей стороны должно употребить все усилия к тому, чтобы Уфимская губерния присоединилась целиком к Башкирии без особой ломки с готовым государственным аппаратом и механизмом"*. Йәғни, был эшкә баштан уҡ автономияны шулай ике этапта тормошҡа ашырыу идеяһы һалынған була. Тәүге этапта, 1917 йылда, Бәләбәй Башҡортостан сиктәрендә, шунан, 1918 йылда, Оло Башҡортостанда автономия булдырыу ҡаралған була. Әммә 1918 йылдың февралендә Ырымбур ҡалаһында большевиктар тарафынан Башҡортостан хөкүмәте ҡулға алына һәм шул сәбәпле был план тормошҡа ашырылмай ҡала. Артабан Граждандар һуғышы башлана. Һөҙөмтәлә, 1919 йылдың 20 мартында Советтар менән килешеү төҙөгәндә Бәләкәй Башҡортостан территорияһындағы автономия ғына күҙҙә тотола. Оло Башҡортостан (Өфө губернаһы башҡорттарын ҡушыу) идеяһы ниәте тормошҡа ашмай торып ҡала.

**Миләүшә ХӘБИЛОВА**
**яҙып алды.**
**(Дауамы бар).**

---

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

### Ҡыпсаҡтар

Ҡайһы бер авторҙар үҙҙәренең хеҙмәттәрендә "Кырғыҙ" атамаһын ҡуллана. Ҡасандыр күп кенә ҡыпсаҡтарҙы шулай атағандар. Тарихсылар, шул иҫәптән Бахши Иман ҡайһы ваҡыт башҡорттарҙы ҡырғыҙ тип атай. Ҡол Ғәли үҙенең "Хан китабы"на конспекттарында: "Юлбашсы Ҡыпсаҡ 40 төрөк ҡыҙын көләш итеп ала, уларҙан тыуған балалары төрки телле саҡтарҙың 40 ырыуын нигеҙләй. Уларҙы Ҡыпсаҡтың 40 ҡатыны хөрмәтенә "ҡыр(ы)ҡ ҡыҙ" тип атай башлайҙар. Һөҙөмтәлә был атама "ҡырғыҙ" формаһын ала". Быңдай аңлатма башҡорттарҙың этник тарихы менән дә аңлатыла, сөнки "ҡырғыҙ" атамаһы унда ла бар. Ҡыпсаҡтарҙың ҡайһы бер этнонимдары XVI-XVII быуаттарҙа ла йөрөгән. Улар "Дәфтәри Сыңғыҙнамә" йылъяҙмаһында сағылыш таба, ә юрматылар шәжәрәһе юрматы ҡәбиләһенең ҡыпсаҡтарҙың ҡарағай һәм гәрәй ырыуҙары менән оҙай ваҡыт аралашып йәшәүе хаҡында һөйләй.

XII быуатта көнсығыш Европа далаларында 15-тән ашыу ҡыпсаҡ урҙалары күсеп йөрөгән, унда яҡынса 500-600 мең йән иҫәпләнгән. Көнсығыш географтары яҙыуынса, ҡыпсаҡтарҙың составында башҡорттар, мишәрҙәр, баранджарҙар, болғарҙар, сыуарҙар, сыуастар, скилдар һ.б. айырылып торған. "Ҡыпсаҡ" атамаһы улар өсөн дөйөм һаналған. М. Ҡашғари фекеренсә, ҡыпсаҡтарҙың теле төрки тел һаналған. Й. Бәширов фекеренсә, ҡыпсаҡтарҙың ҙур өлөшө башҡорттар тарафынан йотолған, Алишев уларҙы болғарҙарға ҡарағанда күберәк мишәрҙәр йотҡан тип иҫәпләй. Ҡазан ханлығы тарихында ҡыпсаҡ компонентының ҙур роль уйнауы ла билдәле.

Ҡыпсаҡ ҡәбиләһе күп һанлы ырыу-ҡәбиләләрҙе берләштереп, урта Волгала һәм Уралда йәшәүсе халыҡтарҙың этник составында ҙур роль уйнаған. XIII-XIV быуаттарҙа ҡыпсаҡтарҙың этник составында бер нисә ырыу-ҡәбилә төркөмө билдәле: ҡыпсаҡ ырыуҙарын үҙ эсенә алған ҡыпсаҡ төркөмө; ҡара ҡыпсаҡ, йылан ҡыпсаҡ, һары ҡыпсаҡ, һарыш ҡыпсаҡ, бошман ҡыпсаҡ һ.б.; ҡаштай, меңле, табын төркөмдәре. Был ваҡытта инде ҡыпсаҡтар башҡорттар составында була, улар Ағиҙел, Ыҡ йылғалары аралығында йәшәй.

Р. Йәнгужин билдәләүенсә, ҡыпсаҡтар Ағиҙел йылғаһы аша үтеп, Ағиҙелдең һул ярында, Дим йылғаһы башында һәм ҡушылдығында, Ыҡ, Сөн йылғалары буйында урынлаша. Уларҙың бер өлөшө Алтын Урҙа ҡыҫымында төньяҡҡа китергә мәжбүр була. Көньяҡ Урал итәктәрендә, Һаҡмар йылғаһы буйына XIV-XV быуаттар аҙағында ҡара, аҡ, сәнкем, һыуын, бошман ҡыпсаҡтары ултыра. Ҡаңлы, гәрәй, йылан, ҡырғыҙ һәм танып ырыуҙары тарихы ҡыпсаҡ конфедерацияһы сиктәрендә үҫешә. Ҡыпсаҡтар Ҡимаҡ ҡағанаты составында ла була.

Дәште Ҡыпсаҡ иле XI-XV быуаттарҙың ғәрәп һәм фарсы сығанаҡтарында Иртыштан Дунайға, Ҡырымдан Болғарға тиклем һуҙыла, унда ҡыпсаҡтар (половецтар) йәшәгән, буйы һигеҙ айлыҡ, арҡырыһы алты айлыҡ юлды тәшкил итә тип теркәлгән. Был хаҡта Ибн Баттут яҙып ҡалдырған. Ул үҙенең яҙмаларында Мәскәүҙең көньяғында бер ниндәй ҙә ҡырағай дала булмаған, тип теркәй. Унда тарихын томан ҡаплаған ил йәшәгән. Был ил Коломнанан Каширға тиклем һуҙылған. Дәште Ҡыпсаҡ аша Дунай, Днестр, Днепр, Дон, Ағиҙел, Яйыҡ, Иртыш, Обь, Енисей һәм Лена йылғалары аҡҡан. Совет энциклопедияһында яҙылыуынса, был дала иле XI быуатта түгел, ә IV быуатта барлыҡҡа килә, һәм халыҡтарҙың Бөйөк күсенеү дәүләте XVIII быуатҡа тиклем йәшәй.

**(Дауамы бар).**

***✓ Суфыйсылыҡ - ул ихласлыҡ тигән һүҙ. Шайтан да ғалимдар һәм ихласлыҡ булған ерҙә юҡҡа сыға. Беҙҙең суфыйсылығыбыҙ ихласлығыбыҙҙан килә. Икенсеһе, халҡыбыҙҙың тарихын өйрәнеү. Был бик мөһим.***



# ХАЛЫҠТЫҢ

## милли һәм дини

**Бер психологтың әйткәне: "Ағаста ултырыусы ҡош ботаҡтың ҡапыл һыныуынан ҡурҡмай. Сөнки ул ботаҡҡа түгел, үҙенең ҡанаттарына ышана..." Әгәр ҙә беҙ ошо кескәй генә ваҡиғала ҡош урынына - халыҡты, ә ағас урынына - ул халыҡ йәшәгән дәүерҙе, ботаҡтар урынында халыҡ йәшәгән көндәрҙе күрһәк, халыҡтың яҙмышы үҙенең ҡулында булып сыға. Ә инде ошо образлы сағыштырыуҙы ысынбарлыҡҡа бороп әйтһәк, халыҡ фәҡәт үҙенең милли булмышына, гөрөф-гәҙәттәренә таянып ҡына үҙен һаҡлап ҡала ала. Кешелек тарихы шуға ла шаһит: Аллаһы Тәғәләне, Уның берҙән-бер илаһ икәнлеген таныған ҡәүемдәр генә тарих арбаһынан төшөп ҡалмайынса, хәҙерге көнгәсә килеп еткән. Рәсәй мосолмандарының Үҙәк Диниә назараты ғилми советы ағзаһы, "Ишан Зәйнулла Рәсүлев" мосолман дини ойошмаһы имам-хатибы Әхмәт хәҙрәт ӘХМӘРОВ һәм Башҡортостан юлдаш телевидениеһы журналисы, "Йома" тапшырыуҙарын алып барыусы Морат хәҙрәт ЛОҠМАНОВ менән ҡорған әңгәмәбеҙ ошо хаҡта, йәғни милләт һәм дин берҙәмлеге тураһында.**

### МОРАТ ЛОҠМАНОВ:

*Атай-олатайҙарыбыҙ шул тиклем көслө мосолман булып та, туған телебеҙ нисек һаҡланып ҡалған һуң? Башҡорттар империяны һелкетерлек көс-ғәйрәтте ҡайҙан алған? Әйтергә кәрәк, быңдай көстө улар Хоҙай менән милли рух берҙәмлегенә өлгәшеүҙән алған. Аллаһы Тәғәлә оло хикмәт менән динде эсендә милләтте яралтҡан.*

**Һеҙ шундай хәлгә иғтибар иткәнегеҙ бармы: ни өсөндөр дингә килгән ҡайһы бер кешеләр өсөн үҙ милләте икенсе планға күсә. Бәғзеләр: "Мин кемгә өйләнһәм дә, кейәүгә сыҡһам да, барыбер, мосолман булһа, еткән", - тип тә ысҡындыра. Ундайҙар милләт менән дингә бутай: милләт - ҡандан, дин иһә инаныуҙан килгән төшөнсә. Мосолманлыҡ йә христианлыҡ милләт билдәһе түгел. Нимә генә тимә, үҙ милләтеңде һанлау, ихтирам итеү, уны һаҡлау өсөн фиҙаҡәрлек күрһәтеү - ул иң беренсе нәүбәттә атай-олатайҙарыңды ихтирам итеү билдәһе. Ә инде атай-олатайҙарын ихтирам итмәгән кешене мосолман тип атап буламы икән? Тимәк, дин юлына килгәндән һуң милләтен танымаған кеше бының менән үҙе үк гонаһлы булып сыға. Ошо мәсьәләләргә һеҙҙең мөнәсәбәтегеҙ нисек?**

**Морат Лоҡманов:** Яңыраҡ бер осрашыуҙа яҙыусылар: "Һеҙ бына Ислам диненә саҡыраһығыҙ ҙа ул, әммә беҙ барыбыҙ ҙа ошо дингә инеп китһәк, милләт булараҡ юҡҡа сыҡмаҫбыҙмы?" - тигән һорау бирҙе. Мин уларға шундай сағыштырыу килтерҙем. Үткән тарихыбыҙға боролоп ҡараһаҡ, йәнен фиҙа ҡылған юлбашсыларыбыҙ дин ярҙамында халҡыбыҙҙы күтәргән. Барыһы ла намаҙ уҡыған. Бөгөн милләт өсөн көрәшеп йөрөүселәрҙең күбеһе диндән алыҫ тора, күбеһенең балалары башҡа телдә һөйләшә. Киреһенсә, беҙ дингә килеп, милләтебеҙҙе ныҡыта алабыҙ. Атай-олатайҙарыбыҙ шул тиклем көслө мосолман булып та, туған телебеҙ нисек һаҡланып ҡалған һуң? Башҡорттар империяны һелкетерлек көс-ғәйрәтте ҡайҙан алған? Батша генералдары: "Башҡорт халыҡ булараҡ юҡҡа сыҡты, йөҙ йыл былы баштарын да күтәрә алмаясаҡ", - тип рапорт биргәндән һуң биш йыл да үтеп өлгөрмәгән, тағы ла ҡалҡҡан атай-олатайҙарыбыҙ. Уларға быңдай көс ҡайҙан килгән? Әйтергә кәрәк, быңдай көстө улар Хоҙай менән милли рух берҙәмлегенә өлгәшеүҙән алған. Аллаһы Тәғәлә оло хикмәт менән динде эсендә милләтте яралтҡан.

**Әхмәт Әхмәров:** Бында милли һәм дини берҙәмлекте генә төп сәбәп итеп килтереү аҙ булыр ине. Ни өсөн тигәндә, хәҙерге ваҡытта башҡа телдәрҙә һөйләшкән, әммә көслө рухлы башҡорттар ҙа күп. Мин Мораттың әйткәндәренә гөрөф-гәҙәтте, милли мәҙәниәтте лә тип өҫтәр инем. Тел, гөрөф-гәҙәт, мәҙәниәт, дин - ошо дүрт төшөнсә бергә ҡушылған осраҡта ғына кеше шундай көс-ғәйрәткә эйә була алалыр. Хәҙерге ваҡытта урыҫтар Исламға күпләп килә башланы, башҡа милләт вәкилдәре лә ошо юлға баҫа. Тимәк, дин юлында йөрөгәндә беҙ башҡа мәҙәниәттәр менән ҡушылып, үҙебеҙҙең мәҙәниәтебеҙҙе юғалтыуыбыҙ ихтимал. Шуға күрә, беҙ башта әйткән гөрөф-гәҙәт - мәҙәниәт - тел - дин берҙәмлегендә генә милли үҙенсәлегебеҙҙе һаҡлап ҡала алаcаҡбыҙ.

**Морат Лоҡманов:** Бер ғалим әйткәнсә, ошо берҙәмлектең берәүһен генә бушаттың икән, башҡаһына зыян килә, иң мөһиме: динеңдән тайпылдың икән, милләтең зыян күрә. Шул уҡ ваҡытта гөрөф-гәҙәтеңде бушатһаң, динең дә, милләтең дә ҡаҡшай. Был төшөнсәләрҙе бер-береһенән айырып ҡарап булмай.



**Шул уҡ ваҡытта беҙ Ғәрәп илдәрендәге, Кавказдағы, Урта Азиялағы мосолмандар һымаҡ уҡ диндар була алмайбыҙ. Сөнки беҙ Ислам диненә тиклем үк формалашҡан халыҡ булараҡ, Исламды үҙ милли гөрөф-гәҙәттәребеҙгә нигеҙләнеп ҡабул иткәнбеҙ һәм шуға ла дингә ҡарашыбыҙ үҙебеҙсә. Шулай түгелме?**

**Морат Лоҡманов:** Беҙ Ислам диненә тиклем формалашҡан милләтбеҙ, тип әйткән сүрәттә лә, Әҙәм ғәләйһис-сәләм ергә төшөрөлгәндән бирле беҙ "Аллабыҙ бер" тигән инаныу менән йәшәйбеҙ. Бәйғәмбәрҙәрҙең ҡайһыһын алһаҡ та, улар бер Аллаға алып килгән. "Бәҡара" сүрәһенең бер аятынан сығып фекер йөрөткәндә лә, Ул беҙҙе бер атанан барлыҡҡа килтереп, төрлө халыҡтар итеп тараҡкан. Ошондағы "төрлө-төрлө халыҡтар" тигәнгә иғтибар итеп ҡараһаҡ, унда "төрлө" тигән төшөнсә төрлө халыҡтарҙың төрлөсә икәнен аңлата. "Төрлөсә" һүҙе ул халыҡтарҙың төрлө ризыҡтар менән туҡланыуын да, башҡа төрлө айырымлыҡтарҙы ла аңлатыуы мөмкин. Шуның шикелле, халыҡтарҙың дингә килеү юлдарында, дингә үҙҙәренең тормошторында сағылдырып йәшәүҙәрендә, әлбиттә, айырмалыҡ бар. Был төшөнсәне беҙ менталитет тип атайбыҙ. Әйтәйек, германдар менән башҡорттар араһында айырмалыҡтар бик күп, шуның кеүек, халыҡтарҙың дингә килеү юлдарында ла бар быңдай айырмалыҡ. Мәҫәлән, беҙ тажиктар менән аралашабыҙ. Беҙ уларҙың ҡыҫҡырып һөйләшеүенә иғтибар итәбеҙ. Әйтәйек, башҡорттарҙа мәжлес барған саҡта һуңлаған ҡунаҡ шым ғына килеп инә. Ул башын һелкеп кенә сәләм бирә лә, кешенең күҙенә салынырға тырышмай, тиҙ генә урын табып, табынға ултыра һала. Тажиктарҙа һуңлаған ҡунаҡ килеп ингәс тә ҡаты итеп: "Әссәләмөғәләйкүм!" тип ҡысҡырып һаулыҡ һораша. Табында ултырыусылар барыһы бер юлы уға диҡҡәтен йүнәлтеп: "Вәғәләйкүмәссәләм!" тип уны сәләмләй. Был насар ҙа түгел, һәйбәт тә түгел, һәр халыҡтың үҙенә генә хас тәбиғәте формалашҡан. Шуға күрә, һәр халыҡ үҙенең тәбиғәтенә ярашлы дингә ҡабул иткән. Мәҫәлән, шул уҡ Ғәрәп илдәрендә мәсеттәрҙә доға ҡылып ултырған бабайҙар, муллалар юҡ. Өҫтәл артында сәй эскәндән һуң саҙаҡа таратмайҙар. Шул уҡ ваҡытта саҙаҡа өләшеү, бүләк бирешеү матур дини йола һанала.

**Әхмәт Әхмәров:** Хатта бер хәҙис тә бар: "Бер-берегеҙгә саҙаҡа өләшһәгеҙ, бүләк бирешһәгеҙ, арағыҙҙа мөхәббәт артыр". Шул уҡ ваҡытта яңылышлыҡ китмәһен өсөн шуны ла әйтергә тейешмен: Ислам дине барлыҡ милләттәр өсөн дә бер үк ул. Унда "һинеке былай Ислам", "минеке былай Ислам" тигән айырыу юҡ. Исламдың һөлдәһе: тәһәрәт, биш намаҙ, шәриғәт, ураҙа, хаж - барыһы өсөн дә мотлаҡ үтәлергә тейешле талап. Барыбыҙ өсөн дә аяттар ҙа, хәҙистәр ҙә берҙәй үк уртаҡ. Әммә һәр бер халыҡтың үҙенсәлеге бар. Мәҫәлән, Башҡортостандағы Ислам Татарстандағы Ислам кеүек түгел. Халыҡ менән аралашҡанда, ниндәйҙер нәсихәт һөйләгән ваҡытта ла үҙенсәлегебеҙ бар. Хатта Татарстандан килеп, беҙҙең дини байрамдарҙа ҡатнашыусылар: "Һеҙҙә, башҡорттарҙа, үҙ-ара йомшаҡ мөғәмәлә, бер-берегеҙгә ҡарата мөхәббәт хисе бар. Һеҙ бер-берегеҙҙе яратып, хөрмәт итеп һүҙ һөйләйһегеҙ", - тип һоҡланыуын белдерә. Мин бының сәбәптәрен тарихсы булараҡ та әйтә алам: беҙҙең атай-олатайҙарыбыҙ араһында ишандар, шәйехтәр, суфыйҙар күп булған. Һәр бер ауылдың диндарҙары уларҙың йоғонтоһонда торған. Тимәк, ул саҡта суфыйсылыҡтың кешеләр араһында яҡшы мөнәсәбәт ҡорорға, йөрәкте таҙартырға булышлыҡ иткәнен танайбыҙ. Шуға күрә, Башҡортостанға хас Ислам башҡа урындарға ҡарағанда ныҡ айырыла. Шул уҡ ваҡытта ул Исламға ҡаршы килә, тип тә әйтергә ярамай.

Бөгөн халыҡҡа өс нәмәне өйрәтергә кәрәк: беренсеһе - ул Ислам диненең ҡанундары. Уны белеүҙең дә үҙ шарттары бар. Беҙ үҙебеҙҙең ата-бабаларыбыҙ тотҡан диндә, улар үтәгән дини ҡанундарҙы яңылыш булған тип әйтә алмайбыҙ. Шул уҡ Өфө өйәҙендә йәшәгән бөтөн донъяға даны таралған мәшһүр башҡорт ғалимы Морат Рәмзи әл-Минзәләүиҙең яҙмаларын бер кем дә дөрөҫ түгел тип әйтмәгән. Шуға күрә беҙ ата-бабаларыбыҙҙан килгән дини ғилемде яңылыш булған тип инҡар итә алмайбыҙ. Иң тәүгеһе - ул Хәнәфи мәҙһәбендә тороу, икенсеһе - Аллаһҡа ышаныу, уны аҡидә тиҙәр. Өсөнсөһө - тассауфты, йәғни суфыйсылыҡты ҡабул итеү. Йәғни ул, ысынлап та, тарихта булған күренеш. Урал-Волга буйы мосолмандары Йәсәүи тәриҡәте аша үткән һәм ул юл беҙҙең дә юл. Беҙ әле ул кимәлгә күтәрелә алғаныбыҙ юҡ. Әлеге ваҡыттағы суфыйсылыҡты мин уларҙыҡына тиңләй алмайым. Имам Раббани үҙенең "Мәктүбә" тигән китабында: "Тәриҡәт һәм хәҡиҡәт шәриғәттең ярҙамсылары ғына. Нимәлә ярҙамсыһы - ихласлыҡта ярҙамсыһы", - тип яҙған. Суфыйсылыҡ - ул ихласлыҡ тигән һүҙ. Шайтан да ғалимдар һәм ихласлыҡ булған ерҙә юҡҡа сыға. Беҙҙең суфыйсылығыбыҙ ихласлығыбыҙҙан килә. Икенсеһе, халҡыбыҙҙың тарихын өйрәнеү. Был бик мөһим. Беҙгә халҡыбыҙҙың, республикабыҙҙың, Рәсәйҙең тарихын белергә кәрәк. Үҙ милләтенең тарихын белмәгән кеше дини юлда ла еңел генә аҙашып китеүе бар.

Өсөнсөһө, гөрөф-гәҙәттәребеҙҙе өйрәнеү һәм үтәү зарурлығы. Дингә гөрөф-гәҙәткә ҙур иғтибар бирелә. Ҡөрьәндә гөрөф-гәҙәт "хөкөм ҡылынған" мәғәнәһендә йөрөй. Әгәр ҙә беҙҙең милли йолаларыбыҙ, гөрөф-гәҙәттәребеҙ шәриғәткә ҡаршы килмәй икән, беҙ уны үтәргә тейешбеҙ. Ундай гөрөф-гәҙәттәребеҙ үҙенән-үҙе диндең эсенә инеп китә, йәғни беҙҙең диндә бар кеүек була. Шуға күрә лә беҙ үҙебеҙҙең гөрөф-гәҙәттәребеҙҙе тотонып, уны үтәп йәшәргә бурыслыбыҙ. Беҙ балаларыбыҙға дини ғилем бир-

***✓ Элек беҙҙең быуындар бәйләнеше сылбыры ныҡлы булған һәм шуның өсөн дә беҙҙе бер генә һынау алдында ла ҡаҡшата алмағандар. Шуның өсөн дә батша беҙгә ҡарата махсус программа булдырырға мәжбүр булған.***

гән саҡта ошо өс шарттың үтәлеүен һаҡлаһаҡ, улар динле булған осраҡта ла, милли асылыбыҙҙан тайпылмаясаҡ, радикал йүнәлештәргә лә бирелмәйәсәк.

**Әхмәт хәҙрәт, һеҙҙең, ата-бабаларыбыҙ тотҡан дини юлды инҡар итә алмайбыҙ, тигән фекерегеҙҙе ҡеүәтләп, шуны ғына әйтке килә: тарихи философияла "ата-бабалары үткән юлды инҡар итеүсе үҙен дә инҡар итә" тигән бер фәлсәфә бар. Тап шуның кеүек, әгәр ҙә ата-бабаларыбыҙ үткән юл хата булһа, беҙ халыҡ, милләт буларaҡ, хәҙерге көнгә тиклем һаҡланып та ҡалмаған булыр инек бит?**

**Әхмәт Әхмәров:** Һис шикһеҙ, шулай, һеҙ минең фекерҙе икенсе төрлө итеп әйттегеҙ генә.

**Мин бынан биш йыл элек бер ғалимдан: "Суфый булған диндар менән суфый булмаған диндар нимәһе менән айырыла?" - тип һорағайным,**

# Йәшәү көсө...

## берҙәмлектә

### ӘХМӘТ ӘХМӘРОВ:

*Беҙҙең халыҡта тәрбиә өлкәһендәге быуындар күсәгилешлелеге, быуындар бәйләнеше тигән төшөнсәләр шул утыҙынсы йылдарҙа юҡ ителгән, өҙөлгән. Ҡыҫҡаһы, беҙҙе атай-олатайҙарыбыҙ менән тоташтырған рухи күперҙәр өҙөлгәс, беҙ ул бәйләнештәрҙе китаптар аша ғына белә алабыҙ. Күп кенә йәштәрҙең радикализмға бирелеүе лә шул быуындар бәйләнеше өҙөлөүҙән килә. Әгәр ҙә беҙҙең күңелебеҙҙә: "Минең олатайым, атайым мулла ине, ул миңә бына шулай тип әйтеп ҡалдырҙы", - тигән аңлау юҡ икән, был осраҡта беҙ башҡа сығанаҡтан абруйҙар эҙләй башлайбыҙ.*



**ул: "Суфый булыр өсөн әллә ниндәй кимәлдәр үтергә, хәләүәттә ултырырға, тағы ла әллә ниндәй шарттарҙы үтергә кәрәк, тип ҡалын-ҡалын китаптар яҙалар, бының менән кешенең башын ғына бутайҙар. Ә мәсьәләнең асылы ябай ғына: суфый булмаған диндарҙың - теле, ә суфыйҙың йөрәге "Аллаһ" тип әйтә", - тип яуап бирҙе. Ошондай аңлатыуҙа нигеҙ бармы?**

**Әхмәт Әхмәров:** Бар. Ысынлап та, шулай. Әммә әлеге ваҡытта яулығын да дөрөҫ ябына белмәгән, намаҙҙы ла дөрөҫ уҡымаған апайҙарҙың үҙҙәрен суфый тип атауҙарын күргәндән һуң, был мәсьәләлә бик һаҡ булырға кәңәш итер инем. Шәриғәтте аңламаған кешеләрҙең суфый булыуы мөмкин түгел.

**Морат Лоҡманов:** Хатта "Шәриғәт яҡшыраҡмы, тәриҡәт һәйбәтерәкме?" тип фекер йөрөтөүселәр ҙә бар. Шәриғәтһеҙ тәриҡәт ул спорт менән шөғөлләнмәйенсә мускулдарындың үҫеүен көтөп ултырыуға тиң. Шуның кеүек, тәриҡәткә генә бирелеп китеп, шәриғәт хаҡында ишетергә лә теләмәүселәр бар. Бында шәриғәт менән тәриҡәтте бер-береһенә ҡаршы ҡуйырға ла, бәхәс ойоштророрға ла кәрәкмәй. Әгәр ҙә ундай бәхәс тыуа ҡалһа, был - ғилемһеҙлектән.

**Әхмәт хәҙрәт, һеҙҙең ғөрөф-ғәҙәт шарты тураһындағы фекерегеҙҙе ҡеүәтләп, бәләкәй генә ҡисса. Атай кеше вафаты алдынан улын саҡырып алып, уны намаҙға баҫтыра алмауына үкенес белдергән һәм ул донъя ҡуйғандан һуң 40 көн һуҙымында мәсеткә барып, башҡаларға ҡушылып доғалар ҡылыуын үтенгән. Ул кеше атаһының әйткән һүҙен үтәп, 40 көн буйына мәсеткә барып, унда ун бишәр минут ултырып сыға торған булған. Ә 41-се көндә иһә ғәҙәт буйынса тағы мәсеткә килгән һәм намаҙға ултырған. Бында ул кешенең 40 көн һуҙымында башҡарған ғәмәленең ғәҙәткә әүерелеү миҫалын күрәбеҙме?**

**Әхмәт Әхмәров:** Ошо ҡиссаға ҡушып, шуны ғына әйтергә ҡала: бына әле Рамаҙан айын тамамлап торабыҙ. Был айҙа 30 көн дауамында ашау-эсеүҙән генә түгел, насарлыҡ эшләүҙән, ғәйбәт һүҙ һөйләүҙән, яман уй уйлауҙан тыйылдыҡ, 31-се көндә иһә бөтөн насарлыҡтар беҙҙе бөтөнләйгә ташлап китәсәк, тип ышанабыҙ. Иншаллаһ, шулай булһын!

**Морат Лоҡманов:** Хатта ки бәләкәй генә сөннәти ғәмәлдәрҙе башҡарыу ҙа һуңғы сиратта һинең холҡоңа килеп инә. Әйтәйек, уң яҡты өҫтөн күреү, уң аяҡ менән тупһа аша атлау, уң яҡ аяғыңа башлап кейем кейеү һәм башҡалар, бер яҡтан, ябай, кәрәкмәгән нәмәләр һымаҡ. Икенсе яҡтан ҡараһаң, холҡоңа килеп ингән был ғәҙәттәр кешене шул тиклем үҙгәртеп ҡуя, яҙмышың да икенсе төрлө сифат ала. Бәләкәй генә ғәмәлдәрҙең дауамлы булыуы ҙур эштәр башҡарыуға ҡарағанда ла әһәмиәтлерәк. Ундай бәләкәй ғәмәлдәр кешегә үҙен тәрбиәләргә булышлыҡ итеп, уның күңелен дә таҙартып ҡуя.

**Ни өсөн беҙҙең илдә халыҡ ҙур һынауҙар аша үткәс, ҡайһыһы ауыр сиргә тарып, ҡайһыһы яҡындарын юғалтып, ҡайһыһы яңғыҙлыҡҡа дусар ителеп, ҡайһыһы аварияға юлығып, ҡайһыһы пенсияға сыҡҡас ҡына дин юлына аяҡ баҫа икән? Беҙ нишләп шундай һынауҙарға дусар ителгәнбеҙ?**

**Морат Лоҡманов:** Был мәсьәләгә төрлөсә ҡарап була. Бына мин дә мәсеттә имам булып торам. Мин унда дингә төрлө юлдар менән килгән халыҡты күрәм. Ҡайһы берәүҙәре әсәһен юғалтҡан бала һымаҡ, Аллаһы Тәғәләгә килеп һыйына. Ундайҙар дингә нисек килгәнен дә аңлата алмай. Улар мәсеткә йүгереп килеп инә. Араларында ҡайҙалыр эшләргә ялҡауы килеп, мәсет тирәһендә уралып йөрөүселәр ҙә юҡ түгел. Ундайҙар эшләргә теләмәүен дин юлында йөрөүе менән аҡларға тырыша. Дәүләтте, ил башлыҡтарын тәнҡитләп, оло асыу менән мәсеткә аяҡ баҫыусылар ҙа юҡ түгел. Ундайҙар үҙе һымаҡ уйлаусыларҙы табып алып, бер сектаға ойоша. Бындай юлға барыусылар үҙҙәренән башҡа барыһын да кафырҙар тип иҫәпләй, үҙҙәрен генә дөрөҫ юлда йөрөүселәр итеп һанай. Үҙ-ара мөнәсәбәттәрендә бәләкәй генә аңлашылмаусанлыҡ килеп тыуған осраҡта ла улар бер-береһенә ҡул күтәрергә мөмкин.

**Морат хәҙрәт, ә нишләп дин юлына, мәсеткә кеше шатланып килмәй һуң?**

**Морат Лоҡманов:** Шатланып килеүселәр ҙә бар, әммә ундайҙар һирәгерәк.

**Әхмәт Әхмәров:** Урта Азия, Кавказ яҡтарында имамдарға айырата мөнәсәбәт бар. Баҙарҙарҙа йөрөгән саҡта шул яҡтан килгән һатыусылар һинең имам икәнеңде белеп ҡалһа, ихтирам йөҙөнән бәләкәй генә бүләк, һис юғы, бер лимон булһа ла һоналар. Беҙҙә ундай күренештәр бик аҙ. Ни өсөн? Минең уйымса, Урта Азия, Кавказ республикаларында совет осоронда имамдар беҙҙәге һымаҡ юҡ ителмәгән. Беҙҙең Башҡортостан Республикаһында ғына утыҙынсы йылдарҙа 6 мең имам атылған, һөргөнгә ебәрелгән. Үҙәк Диниә назараты ағзалары барыһы ла атылған. Береһен дә ҡалдырмағандар, хатта ҡатындарҙы ла аямағандар. Һеҙ миңә әйтегеҙ: бөгөн беҙҙә, мәҫәлән, тәмәке тартып ултырған йәш кешене тәмәкеһен ташларға мәжбүр иткән аҡ һаҡаллы бабайҙар бармы? Юҡ, сөнки беҙҙең халыҡта тәрбиә өлкәһендәге быуындар күсәгилешлелеге, быуындар бәйләнеше тигән төшөнсәләр шул утыҙынсы йылдарҙа юҡ ителгән, өҙөлгән. Ҡыҫҡаһы, беҙҙе атай-олатайҙарыбыҙ менән тоташтырған рухи күперҙәр өҙөлгәс, беҙ ул бәйләнештәрҙе китаптар аша ғына белә алабыҙ. Күп кенә йәштәрҙең радикализмға бирелеүе лә шул быуындар бәйләнеше өҙөлөүҙән килә. Әгәр ҙә беҙҙең күңелебеҙҙә: "Минең олатайым, атайым мулла ине, ул миңә бына шулай тип әйтеп ҡалдырҙы", - тигән аңлау юҡ икән, был осраҡта беҙ башҡа сығанаҡтан абруйҙар эҙләй башлайбыҙ.

**Морат Лоҡманов:** Ә бит тарихҡа күҙ һалһаҡ, элек беҙҙең быуындар бәйләнеше сылбыры ныҡлы булған һәм шуның өсөн дә беҙҙе бер генә һынау алдында ла ҡаҡшата алмағандар. Шуның өсөн дә батша беҙгә ҡарата махсус программа булдырырға мәжбүр булған.

**Әхмәт Әхмәров:** Петр Беренсе ваҡытында хатта "Башҡорт эштәре буйынса сенат" эшләгән. Айырым халыҡҡа айырым сенат тотҡандар булып сыға бит инде.

**Был мәсьәлә хаҡында минең яҙғаным да булды, һәр хәлдә, был һорауҙы әңгәмә ҡорғанда һәр ваҡыт бирәм. Ни өсөн совет осоронда кешеләр араһында дуҫтарса, иптәштәрсә мөнәсәбәт йәшәп килде лә, хәҙер килеп, кешеләр күпләп дингә килгән саҡта уларҙың араһында дошманлыҡ артты?**

**Морат Лоҡманов:** Революция динде бөтөрмәне ул. Совет дәүерендә диндең институты ғына туҡтатылды. Беҙҙең имамдарҙы юҡ иттеләр, ә кешенең күңелендә, йөрәгендә ятҡан дини тәрбиә, әҙәп совет осоронда иптәшлеккә, дуҫлыҡҡа нигеҙ булып йәшәне. Кешенең иман лөғәтендә генә аңлашылған яҡшылығы һаҡланып ҡалды барыбер. Ул күсә килде, шулай уҡ ваҡыт үткән һайын ул ниндәйҙер зәғифлек ала килде. Сөнки намаҙ бит ҡыҙыҡ булһын өсөн генә бирелмәгән. Беҙ ҡыҙыҡ булһын өсөн генә ураҙа тотмайбыҙ йә зәкәт түләмәйбеҙ. Дөрөҫөн әйткәндә, үткән быуаттың туҡһанынсы йылдарында беҙ шундайын бушлыҡҡа килеп сыҡтыҡ. Ә күңел бушлыҡты яратмай, уның буш булғанын күреп, яуыз көстәр тулып өлгөрә. Шуның өсөн дә бөгөн ололар түгел, балалар мәсеткә йүгерә.

Икенсе бер сәбәп: заман үҙгәреү менән илебеҙҙәге күптәр эшһеҙ тороп ҡалды. Бындай осраҡ өсөн халыҡта тағы ла бер тапҡыр һүҙ бар: тик торғанға шайтан таяҡ тотторған.

Өсөнсө сәбәп: бур бай йортҡа килә, ярлы йорттан ул бер нәмә лә алып сыға алмай. Әгәр ҙә үтә бай йортто һаҡсылар ныҡлап һаҡлаһа, ул унда инә алмай. Шуға күрә лә, бур һаҡсылары ла булмаған, урларлыҡ әйбер ҙә булған йортҡа килә. Бөгөн шайтан беҙҙең әҙәбебеҙҙе, иманыбыҙҙы урларға теләй. Шуға күрә ул мәсеткә ыңғайлаған кешегә һөжүм итә.

**Әхмәт Әхмәров:** Әгәр ҙә "Коммунизм төҙөүсенең әхлаҡ кодексы"н уҡып ҡараһаҡ, унда Ҡөрьәндән айырманы таба алмаҫһың. Икеһендә лә кеше араһындағы мөнәсәбәт бермә-бер тап килеп тора. Карл Маркс, Владимир Ленин үҙҙәренең хеҙмәттәрен яҙған саҡта дөйөм кешелек принциптарына таянған. Берҙән-бер етешһеҙлектәре - Аллаһты инҡар итеү. Совет осоронда ла шул уҡ система халыҡты билдәле сиктәрҙә тотҡан. Туҡһанынсы йылдарҙа был система емерелде һәм беҙ барыһын да өр-яңынан төҙөй башланыҡ. Был тәңгәлдә беҙҙең ғалимдарыбыҙ юҡ, имамдарыбыҙ юҡ ителгәс, кешеләр төрлө сығанаҡтарҙан мәғлүмәт туплап, яңылыша башлай. Был үҙ нәүбәтендә улар араһындағы дошманлыҡҡа нигеҙ булып тора. Ә инде Ислам динен аңлаған ғилемле кеше бер ҡасан да икенсе кешене дошман итеп күрмәйәсәк. Халыҡты нимәлер тоторға тейеш барыбер ҙә. Совет осоронда кешене яҙыҡ юлға баҫыуҙан партия һаҡлап торһа, хәҙер кешене Аллаһҡа инаныу тоторға тейеш.

**(Дауамы 11-се биттә).**

***✓ Тик һыбайлы, уға тапҡырлағас та, үтә һалып китмәгәс, ҡайырылып ҡараны ла, тигеҙ ерҙә һөрөнөп китте. Ат өҫтөндәге кеше Сәғит ине. Шул уҡ. Үҙгәрмәгән, аҙ ғына ла ҡартаймаған да әллә.***



Ҡатындар шул торған ерҙәрендә берсә өҙөк-йыртыҡ итеп бутала-бутала һөйләшкәндәй ҙә итте, берсә кире сеңләп илауға күсте, унан тағы кемуҙарҙан бер-береһен һорауҙар менән күмделәр, унан тағы күҙ йәштәренә быуылдылар. Был хәл әсә кеше тамам хәлдән тайып, быуындары йомшарып төшкәнгәсә дауам итте. Хәтирә әсәһен ҡултыҡлап аласыҡҡа алып инде, урындыҡҡа ултыртты. Үҙе ҡаршыһына сүгәләп, Сәғиҙәнең хәҙер инде әбейҙәрсә итеп йәйеп ябынған яулығынан туҙып сыҡҡан сал сәстәрен ипләп кенә кире тыҡты.

- Илама, әсәй, илама. Инде барыһы ла һәйбәт булыр. Беҙ хәҙер икәү, беҙ бергә.

Сәғиҙә лә тиреһе йоҡарған йомшаҡ устары менән ҡыҙының олоғайып киткән ҡаҡса битен һыпырҙы, йоҡа фуфайкаһының яғаларын ипләне:

- Ошолайтып утырғаныбыҙҙы нисәмә рәт төштә күрҙем бит... Ҡотоҡ яғынан һыу көйәнтәләп килгәнеңде лә күрҙем... Э-эй, бәпкәмде... Ней күрәтмәне был донъя беҙгә лә... илгә лә...

Бер аҙыраҡ танһыҡтары ҡанғас, илашып та бушанғасмы, Сәғиҙә усаҡ яғына ынтылды:

- Ҡулғикмәк һалғайным да һаң, белгән һамаҡ, - яланғас ҡулдары менән усағының ҡалай тимер ҡапҡасын да, шуны терәтеп ҡуйған кирбесен дә алып, эстәге табаны һөйрәне лә, өҫтө һарғайып сыҡҡан ус аяһындай ҡалынлыҡтағы сөсикмәкте бармаҡтарында һикертә-һикертә алып килеп, урындыҡҡа йәйелгән киндер япмаға һалды. Унан тағы берәүһен шулай итте. Бала саҡтың, тыуған йорттоң татлы еҫе танауҙы ярып инеп, мейегә үтте лә, әллә ниндәй хисле иҫтәлектәрҙе терелтеп ебәрҙе. Хәтирә, түҙмәй, эҫе түңәрәктең бер ситен һындырып ҡапты:

- М-м-м... - унан урындыҡҡа салҡан ауҙы, - бындай икмәк тәмен онотҡанмындыр, тиһәм.

- Күҙеңә сүп төшмәһен, ятып ашама, балам, әпәкәйҙе, - әсәһе хас әүәлгесә шелтәләне, самауырына усаҡ ситендәге әле баҙырашып ятҡан ҡуҙҙарҙы өрөп төшөргәндә. Әйтерһең, ҡара тамғалы алты йыл булмаған да, был йылдар икеһененең дә сәсен ағартмаған.

Мәтрүшкәле сәйгә сөсикмәк, йәш ҡорот ҡушып эстеләр. Башҡа һый юҡ та, кәрәк тә түгел ине. Шулай ҙа әсәһе аҡланды:

- Атаң бумағаны бире мал юҡ инде, балам. Һыйыр бумағас, аҡ та юҡ. Солоҡтарын да башта Рәйсә килендең малайҙары ҡараштыра ине, улар колхоз эшенә егелгәс, ҡорто осоп китеп бөткәндер инде хәҙер. Килен мынау ҡоротон индерҙе әле үткәндә. Ир балларына таянып мал тота әле ул, - унан ҡапыл иҫенә төштө: - Ырҙаман ағаңдың үлгәнен дә белмәйһеңдер әле.

Хәтирәнең сәйе тамағына торҙо, ике туған ағаһы, елкәһендә аҫылындырып йөрөтөп үҫтергән ағаһы ине бит Рамаҙан. Ул һүҙһеҙ генә башын сайҡаны.

- Ҡырғыстоң ҡышы килде микән бахарункыһы... әллә ҡырҡ дүрткә сыҡты микән. Ней буһа ла ҡыш ине инде. Рәйсә киленем алты бала менән торҙо ла ҡалды мына, - әбей ауыр көрһөндө. - Улай тиһәң, өй беренсә инде алар - толдар. Мынау яҡтан Әсмә утыра атаһын күрмәгән балаһын ҡосаҡлап... Ары Маһираның Көлсөмө өс баламан... Сәлихтың Сәйҙәһе лә бахарунный алды, тинеләр...

Хәтирәнең ҡолағы зыңлап китте лә, ишетмәҫ булды. Һуңғы йылдарҙа ҡапыл көйгәндә шулайтыр булып китте, әллә нишләп. Башындағы тауыш тынғанда Сәғиҙә һаман һөйләй ине әле:

- Ҡайтҡандарҙан йәмғеһе шулар ғына. Уларының да Хәмите һыңар бот, Хөрмәтенең ҡулдары эшкинмәй тей, тағы остағы бер йәш ир ҡултыҡ таяғында үткеләй.

- Сәғит... ҡайттымы... икән? - Хәтирә был һорауҙы биргәнен һиҙмәй ҡалды.

Әсәһе "йәлп" итеп ҡарап алды ла, яулыҡ осон тартып, тирләп сыҡҡан ауыҙ тирәһен һөрттө.

- Уҡытыусы Әлмираның улын әйтәңме? - Йәнәһе, белмәй булды. - Ул бала ярты йыл тирәһе әүәл генә ҡайтып төштө. Бер мәл юғалған, тигән дә хәбәр булғайны. Аҙаҡ табылған булып сыҡтымы. Һуғыш бөткәс тә ҡайтмай, ҡайҙалыр хеҙмәт итеп йөрөгән, тейҙәр.

- Балалары үҫеп торғандыр инде...

- Үһәрҙек балаһы юҡ бит аларҙың, - әбей китек кәсәһенең төбөн сайып, ер иҙәнгә һирпеп ебәрҙе лә, ҡабаттан сәй ҡойҙо. - Әллә ништәп балаға уҙманы шул килен. Һуғышҡа саҡты ла аҙыраҡ тороп ҡалдылар, әле лә, һау бисәгә эшме ней ул.

Ошонан ары һүҙһеҙ ҡалдылар. Ултыра торғасыраҡ, Сәғиҙә, күҙен йәшереп, алдындағын рәтләштергән булып, тағы һүҙ ҡушты:

- Кейәү тураһында хәбәр-хәтерең юҡтыр...

- Кейәү?.. Ғимранды әйтәһеңме ни? Ул ниндәй кейәү булһын һиңә, - күңелһеҙ генә көлдө үҙе.

- Ah-ah! Һине никахлап алғас һуң, кейәү булмай, кем була? Талаҡтап айырмаған, һин икенсегә бармаған...

- Ҡуйсы, әсәй, эсте бошормайыҡ әле шуны иҫләп.

Сәғиҙә, риза булып баш һелкһә лә, әйтәһен әйтеп ослап ҡуйҙы:

- Анда, Алла китабында, һеҙ хәләл әле, шуға ғына әйтәм дә.

Ары гәпләшеү яйлап ҡына ауыл тирәһендә, таныш-тоноштар араһында барҙы. Тик икеһе лә Хәтирәнең күргән-кисергәндәрен ҡуҙғатманы. Әсәһе ул хаҡта тыңлай, ҡыҙы һөйләй алмағанғалыр.




* * *

Ауылда йәшәүенә лә күнегеп бара Хәтирә. Тик әле һаман таң һарыһында уянып, ҡайҙалығын онотоп, тамаҡ ярып ҡысҡырып уятыусыны һағайып көтөп ята. Унан әтәс тауышын ишеткәс кенә, еңел һулап, йә һулҡылдап илап, йә көлөп ебәрә. Унда ла тора, ары-бире итә, мал ҡыуыусыларҙан алда ҡотоҡҡа һыуға барып килә. Ошо көндәрҙә ҡыйралып ятҡан ҡоймаларҙы ипләштерҙе, әсәһенең ус аяһындай ғына ергә ултыртҡан картуфын ҡаҙып алды. Тора-бара яйлап, ситһенә биреп булһа ла, ҡатын-ҡыҙ менән аралаша башланы. Уларға ҡушылып колхоз эшенә сыҡты, асыла, алсаҡлана төштө. Әсе теллеләрҙең "төрөмшик" тип мыҫҡыллауына ҡолаҡ һалмағанда, зар-хәсрәт араһында тереклек табып йәшәгән ауылдаштары араһында ят баҙыр булманы. Төпсөнгән кеше лә булманы артыҡ, һәр кемдең үҙ ҡайғыһы, үҙ көнө ине.

Иң ҡурҡҡаны Сәғитте осратыу булғайны, уныһын да үткәрҙе. Ураҡтан ҡайтып килә ине, артынан ишетелгән ат тояҡтары тауышын ишетеп, юлдан ситкәрәк сыҡты ла, үҙ уйҙары тотҡононда булып бара бирҙе. Тик һыбайлы, уға тапҡырлағас та, үтә һалып китмәгәс, ҡайырылып ҡараны ла, тигеҙ ерҙә һөрөнөп китте. Ат өҫтөндәге кеше Сәғит ине. Шул уҡ. Үҙгәрмәгән, аҙ ғына ла ҡартаймаған да әллә.

- Ни хәл?

Бер генә тәрән итеп тын алды ҡатын:

- Арыу әле...

- Ауылға ҡайттыңмы? - ир кеше лә һүҙ һайлай, күрәһең.

- Ҡайттым.

Бер аҙ өнһөҙ барҙылар. Ир атынан төшөп, йәнәш атланы.

- Ҡалаһыңмы?

Хәтирәгә саялығы ҡайтты, көлөп тура ҡараны:

- Ҡыуаһыңмы?

Сәғит уның ҡарашын тотоп йылмайҙы:

- Юҡ.

- Ҡыумағас, йөрөй бирәйем.

Тағы һүҙҙәр өҙөлөп ҡалды.

Тик ир үтеп китергә ашыҡманы.

- Хәтирә...

- Ы? - ҡатын ҡарашын юлдан алманы.

- Теге мәл... нишләп улайттың ул һин?

Йөрәге семетеп ҡуйҙы Хәтирәнең, тик башын иҫәргә һалды:

- Ҡайһы мәл ул? Минең хәҙер мәлдәрем буталған инде.

- Теге...

- Сәғит! Минең бер нәмәне лә иҫләгем килмәй. Онотҡанмын инде барыһын да.

- Онотҡанһың?.. Шулай еңелме?

- Онотмаҫлыҡ нимә бар?

Ир ҡапыл ярһыны:

- Оноттоң инде атыу? Ярай, улайһа! - ҡапыл һикереп атына менде лә, йүгән осо менән бер ғәйепһеҙ менгеһенең янбашына һыҙыра тартты. Тегеһе үрәпсеп алға ынтылды. Артынан саң ҡойоно ғына өйөрөлөп ҡалды.

Ҡулында йәлпелдәтеп килгән яулығы менән ауыҙын нығытып баҫып, үкһеүен сығармаҫҡа тырышты ла бит, көсө етмәне. Ахырҙа, йылға буйына, муйыл шырлығына йүгерҙе. Сыбыҡсатырға һуғылып бара торғас, һыу ситенә етеп, йылға аша бөгөлөп төшкән муйыл олонона ҡапланып үкһеп ебәрҙе. Ағасты һығып ҡосаҡлаған беләктәренә ҡаты ҡайыры батып инде, яулығы, туҙғыған сәстәре лыс һыу булды, үҙәге сиҡылданы, әммә тыныслана алманы. Был уның эсендә йыйылып сигенәсә тулышҡан, нисә йылдар томалап тотҡан, бөтөн яҡлап та сикләнгән хистәренең урғыуы, баш бирмәй тулауы, ярһыуы ине. Бөгөн тәүге тапҡыр был хистәр алдында көсһөҙ ине Хәтирә.

* * *

Әүеш-тәүеш итеп ҡышҡа инеп барғанда, колхоз рәйесе булған Әнүәр ағай килеп инде өйҙәренә. Урындыҡта киске ашҡа ултырырға йөрөгән әсә менән ҡыҙ ҡаушап төштө.

- Һаумыһығыҙ әле! - Гөрһөлдәк ир тауышынан иҫке йорттоң тәҙрә быялалары сыңлап китте.

- Һау! Шәппеҙ әле, - Сәғиҙә ашъяулыҡ мөйөшөнә бәләкәй күпмә түшәк шылдырҙы. - Әйҙә, ҡәйнеш, түрҙән уҙ!

- Уҙам, еңгә, ишек төбөндә генә һөйләшер һүҙ түгел.

Уҙаман һарыҡ тиреһенән тегелгән ауыр толобон сөйгә элеп, галушлы оло баймаларын һалып, һаҡал-мыйығын һыпыра-һыпыра урындыҡҡа яҡынланы.

- Ҡана, ағаңдын ҡулын сайҙыр әле.

Ҡунаҡты, йомошон йомошлар ҙа сыға һалып китер, тип, көлдөксә яғында йәшенеп торған Хәтирә, йәһәт кенә ҡаҙан төбөнән йылы һыу тырнап алып, ҡомғанға һалды ла, тас тотоп килде. Тегеһе ауыр эштән ҡарайып ҡатҡан ҙур устарын һыу йылыһында бер аҙ ләззәтләндереп торғас, урҙалағы таҫтамалға ынтылып һөртөп, менеп, аяҡ бөкләп тороп ултырып алды.

Сәғиҙә өтәләнеп уның алдына ҡабыҡлы картуфтарҙы тәгәрәтте, сәй яһай һалып ултыртты.

- Килен шәпме?

- Шәп. Мин юҡта бирешмәгәндәрен, хәҙер бирешмәҫтәр инде. Балнисҡа апарып килдем, бейә һөтөндә тоторға ҡуштылар.

- Ярай, анау бәләкәйҙәрегеҙ хаҡына йәшәһен инде.

- Йәшәр, бисәләр эт йәнле лә, - ир һаһылдап көлөп алған булды. Үҙенең тауышы нескәрә биреп китте. Әйткәненә үҙе лә ышанмай, күрәһең. Унан һаман усаҡ тирәһендә йөрөгән Хәтирәгә күтәрелеп ҡараны:

- Ҡарындаш, һин нишләп ултырмайһың әле. Һиндә ине бит әле йомош.

Әсәле-ҡыҙлы ҡарашып алдылар.

- Мынау Шанскый урыҫтары Уртайортта ағас ҡырҡып ята, шуларға ашнаҡсы кәрәк икән, - Әнүәр ҡаршыһында урындыҡ ситенә терәлеп кенә ултырған ҡыҙҙан аша ҡарап һөйләй, сит ҡатын-ҡыҙға тура ҡарау яҙыҡ бында. - Шуларға кеше тапмайбыҙ, берәү урысса белмәй. Һинән башҡаһы юҡ та, булмаҫ та.

Сәғиҙә күҙҙәрен селт-селт иттерҙе:

- Ата-аҡ! Урыҫтар араһына ҡалайтып барһын ул?

- Туҡтале! Һин, еңгә, ҡапаҡтамай тор, - рәйес тауышын күтәрә төштө. - Урыҫтар кеше түгелме әллә? Улар ҙа шул ике ҡуллы, ике аяҡлылар. Һуғышта беҙ улар менән бергә йөрөнөк, "Һин башҡортһоң" тип тайшанып торманылар.

Сәғиҙә алдына сығармаҫҡа булып:

- Саҡ ҡайтып күҙемә күренгән баламды тағы ҡайҙа олаҡтырғың килә? - тигәйне лә, ир ҡырҡа бүлдерҙе лә:

- Анда күмәк кеше араһында үҙенә лә урынлы булыр, эш хаҡы түләрҙәр, ике урамлы ауылда нимә тип һаман итәгеңә бәйләп тотмаҡсыһың? Мин аны ямандан әйтәмме ни, һин дә, еңгә, ҡыҙыҡ кеше, - тип ҡыҙып китә яҙҙы.

Ҡатындар шымып ҡалды. Тағы ла ике картуф әрсеп йотҡас, яңынан өгөтләүгә күсте:

- Ҡарындаш, ҡурҡма, мин көн аша шунда йөрөйөм, колхозсыларға тамаҡты шунан алам, өмәләргә. Ат бирәбеҙ, көн дә ҡайтып йөрөйһөң. Һин бит донъя күргән кеше... бирешмәҫһең.

Ошо юҫыҡтағы сәғәткә яҡын әңгәмә Хәтирәнең "ярай" тиеүенә ҡәҙәр дауам итте лә, яуап һығып сығарылғас, рәйес: "Oho-ho, ҡарындашым! Ағаңды ундырҙың! Иртәгә әҙерләнеп тор",- тип, ҡабаланып хушлашып сығып та китте. Ул киткәс, әсәһе әле оҙаҡ һуҡранды, өндәшмәй ултырып ҡалһаң булмағанмы, тип илауланы. Тик ризалыҡ бирелгәйне инде, һәм Хәтирә юлға төйнәнде.

**(Дауамы бар).**

**✓ *Беҙ динде, халҡыбыҙ өсөн зыянлы, тип ситтә йөрөп ятһаҡ, күп тә үтмәҫтән, дин тотҡан икенсе бер халыҡтан йотолоуыбыҙ бар. Шуға күрә, туған телебеҙҙе һаҡлау юлында йөрөүселәр иң тәүге нәүбәттә дингә иғтибар итергә тейештәр.***

# ХАЛЫҠТЫҢ ЙӘШӘҮ КӨСӨ...

## милли һәм дини берҙәмлектә

**(Башы 8-9-сы биттәрҙә).**

**Морат Лоҡманов:** Диндә "Яҡшылыҡҡа саҡырығыҙ, яманлыҡтан тыйылығыҙ" тигән бер саҡырыу бар. Ошо ҡанун емерелһә, кеше кирегә ағып китә. Йәғни һәр ваҡыт кеше яҡшылыҡҡа саҡырып, яманлыҡтан тыйып торорға тейешле. Бәғзе берәүҙәр: "Нимәгә кәрәк һинең намаҙың, мин яҡшы кеше булыу яғындамын", - ти. Тик ундайҙар ошо яҡшылыҡтың бик тиҙ арала юҡҡа сығыу ихтималлығын ғына аңламай. Совет осоронда яҡшы кеше булып йөрөгән кешеләрҙең бөгөн ниндәй хәлгә ҡалыуҙары ошо хәҡиҡәтте күрһәтте лә инде. Кеше, ысынлап та, дөрөҫ итеп, яҡшы ниәт менән намаҙ уҡыһа, ул насар кеше була алмайҙыр. Әгәр ҙә кеше үҙенең телен тыйып тора алмай икән, уның Ураҙа тотоп йөрөүенә Аллаһы Тәғәлә мохтаж түгел. Әгәр ҙә беҙ егерме-утыҙ йыл намаҙ уҡып йөрөп тә, һаман да алдашыуҙан туҡтала алмаһаҡ, был намаҙ уҡыуыбыҙҙың кәмселеге барлығы хаҡында аңлата. Әгәр ҙә кеше намаҙын дөрөҫ уҡыһа, үҙенең рухи зәғифләгәнән, әҙәпһеҙлегенән арына барырға тейеш.

**Әхмәт Әхмәров:** Бәләкәй генә бер ҡисса. Яңы ғына дини ғилем алған шәкертте хәҙрәт итеп бер ауылға ебәргәндәр, ти. Ауылда халыҡ мәсеткә йөрөмәгән. Бәҡтиһән, был ауыл халҡы намаҙ уҡыр алдынан тәһәрәтләнергә яратмаған икән. Йәш хәҙрәт: "Ярар инде, тәһәрәтһеҙ булһа ла, мәсеткә килегеҙ", - тип әйткән ти ауыл халҡына. Шәриғәт буйынса намаҙ уҡыр алдынан мотлаҡ тәһәрәт үтәлергә тейеш бит инде. Бер мәл мәсеткә ауыл халҡы килеп тулған. Дөрөҫ рәүештә йома ғәйеттәре үткәрә башлағандар. Дини эштәр ыңғайға киткәс, был хәҙрәтте икенсе урынға күсергәндәр. Уның урынына килгән яңы хәҙрәт ауыл халҡының мәсеткә тәһәрәтләнмәй йөрөгәнен белеп ҡалған. Шунан һуң ул үҙенә тиклем эшләгән хәҙрәткә: "Нисек һин халыҡҡа тәһәрәт алмайынса намаҙ уҡырға рөхсәт иттең? Һин бит Аллаһтың, тәһәрәтләнмәйенсә мәсеткә инергә лә ярамай, тигән ҡағиҙәһен боҙғанһың", - тип хат яҙған. Теге хәҙрәт уға: "Мин уларҙы мәсеткә йөрөргә өйрәттем, хәҙер инде һин уларҙы тәһәрәтләнергә өйрәт", - тип яуап хаты яҙған. Ошонан сығып, мин шуны әйтергә теләйем: кеше тәүҙән үк көнөнә биш тапҡыр намаҙ уҡымаһа ла, һис юғы бер тапҡырҙан башлаһын. Нисек кенә булмаһын, тәмәке тартамы ул, ҡайһы ваҡыт эсәме ул, ҡайһы ваҡыт ҡатындарға йөрөймө ул... барыбер, нисек кенә булһа ла Аллаһҡа рапортын бирһен. Иң мөһиме, ул намаҙ уҡый башлаһын. Аллаһ уға мохтаж түгел, кеше үҙе Уға мохтаж.

**Морат Лоҡманов:** Ысынлап та, дингә яңы аяҡ баҫыусыларға ҡаты талаптар ҡуйып, уларҙы диндән өркөтөп йөрөүселәр күп ул. Беҙ беренсе класҡа барған уҡыусыға күп нәмәләрҙе рөхсәт итәбеҙ. Әйтәйек, китапты асып һалып, шуны күсереп яҙырға ҡушабыҙ. Ә бына унынсыла уҡыған балаға бөтөнләй башҡаса талаптар ҡуябыҙ. Иң мөһиме, кеше дин юлына Аллаһы Тәғәләгә һөйөү менән килергә тейеш.

**Әхмәт Әхмәров:** "Еңеләйтегеҙ, ауырайтмағыҙ, һөйөндөрөгөҙ, нәфрәтләндермәгеҙ", тиелә Ҡөрьән Кәрим сүрәһендә.

**▸ "Атеизм самолет тәүге һелкенеүгә тиклем генә йәшәй", тиҙәр. Йәғни, осоп барған самолеттың ҡотолғоноҙ һәләкәткә дусар булғанын аңлаған пассажирҙар шул секундында уҡ Аллаһты иҫкә ала тиҙәр. Тағы ла "Иң диндар кеше - ул атеист. Сөнки ул Аллаһтың барлығын инҡар итә икән, булмаған нәмәне инҡар итеп булмай, тигән аңлау ҙа бар. Ә шулай ҙа совет халҡы атеизмды дин һымаҡ ҡабул итте лә, дингә юлдар асылғас та һаман динһеҙ булып йәшәй түгелме?**

**Әхмәт Әхмәров:** Минең быуында булмаһа ла, минән өлкән быуындарҙың ҡанына, ысынлап та, һеңдерелгән атеизм. Былдай кешеләргә динде аңлатыр өсөн нимә эшләргә кәрәк? Бер нәмә лә эшләп булмай. Быуындар алышынырға тейеш. Муса бәйғәмбәр үҙенең халҡын юҡҡа ғына ҡырҡ йыл буйына сүллек буйлап йөрөтмәгән. Бәйғәмбәр әйтеүенсә, кешеләрҙә ҡоллоҡ фекерләүе юҡҡа сыҡһын өсөн өс быуын алышынырға тейеш.

**▸ Тағы ла бер мөһим мәсьәлә. Йөҙ проценты менән тиерлек мосолмандар йәшәгән Ғәрәбстан илендә ир-аттар ҙа, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа дини кейем кейеп йөрөй һәм ул норма һанала. Ә бына күп динле, күп милләтле Рәсәй илендә Чечнялағы ваҡиғаларҙан һуң хиджаб кейгән ҡатын-ҡыҙ шәһит образын алды. Ул образ барлыҡҡа килеп, Рәсәйле мосолман ҡыҙы хиджаб кейеп китеп бара икән һәм уға ҡарап, башҡа диндәге кешеләрҙең күңелендә негатив тойғо ярала икән, был ҡыҙ гонаһлы була түгелме? Беҙ бында "Юҡ, беҙҙеңсә булырға тейеш", тип тә әйтә алмайбыҙ, сөнки илебеҙҙә башҡа диндәге кешеләр ҙә бар. Бында алтын урталыҡ булырға мөмкинме?**

**Әхмәт Әхмәров:** Тарихсы буларак, шуны әйтә алам: беҙҙең халыҡта ҡатын-ҡыҙҙың баш кейеме хиджаб тип аталмаһа ла, бер үк ваҡытта шул ролде үтәгән ҡушъяулыҡ булған. Беҙ "хиджаб ярамай" тип әйтә алмайбыҙ, сөнки ул дини талап, ул Ҡөрьән менән иҫбатланған, хәҙис шәрифтәре менән дәлилләнгән. Ә бит беҙ башҡа диндәге кешеләргә шулай тип тә әйтә алабыҙ: әгәр ҙә һеҙгә оҡшамай икән, ҡарамағыҙ. Югиһә, беҙ "беҙгә ят нәмә ҡурҡыныс" тигән ҡағиҙәгә өйрәнеп бөткәнбеҙ. Икенсе милләттәр беҙҙе нисек барбыҙ, шулай итеп ҡабул итергә тейештәр. Беҙ бында, атай-олатайҙарыбыҙ йәшәгән ерҙә, нисек теләйбеҙ, шулай кейенеп йөрөй алабыҙ. Бер генә нәмә: ҡайһы бер ҡатын-ҡыҙҙар күҙҙәрен генә күрһәтеп, баштанаяҡ сепрәккә төрөнөп йөрөй икән, ул беҙҙең ғөрөф-ғәҙәттәргә тап килмәй.

**Морат Лоҡманов:** Бында шуны ла өҫтәп әйтергә мөмкин: яңы барлыҡҡа килгән ғәҙәттәр ҙә була. Бер быуын итәген тубығының өҫтөнә мендерһә, икенсе быуын уны иң өҫкә килтереп еткерә. Егерме-утыҙ йыл элек әсәйемдәр телевизорҙан бөгөнгө фильмдарҙы күрһә, ҡоттары осор ине. Хәҙер иһә оло кешеләр үҙҙәре рәхәтләнеп ҡарап ултыра. Беҙ хәҙер бөтөнләй икенсе кейемдәр кейәбеҙ. Мин һәр ваҡыт милли кейем яҡлы, милли кейемебеҙ һәр ваҡыт мосолманса булды. Тик ниңә беҙ фәҡәт мосолманса кейенгән өс-дүрт ҡыҙға бәйләнәбеҙ һуң? Шул уҡ ваҡытта ҡыҫҡа юбка кейгән, кендеге күренеп йөрөгән ҡыҙҙарға бер нәмә лә әйтмәйбеҙ? Бына был беҙҙең замандың иң әсе парадоксы!

**▸ Тағы ла йәш кеше дингә килһә, уны автоматик рәүештә ярамаған эш башҡарған, яҙыҡ юлда йөрөгән кеше итеп күрә башлайҙар. Уларға хатта еңәйәтсегә ҡараған һымаҡ ҡарайҙар. Был нилектән шулай?**

**Морат Лоҡманов:** Бер йәш кеше дингә килеп, матур итеп йәшәй башлаһа, бөтөн ауыл уға ҡаршы сыға. Шунан теге йәш кеше үҙенән-үҙе һаҡланыу позицияһын ала ла, үҙе лә агрессив булып китә. Ҡыҙғаныҫҡа күрә, был һынау, һәм уны үтергә кәрәк.

**Әхмәт Әхмәров:** Әгәр ҙә йәштәребеҙ дини йәмғиәткә ойоша алмай икән, башҡа йәмғиәт формаларын файҙаланырға була. Мәҫәлән, яңыраҡ булып үткән юрматылар йыйынында мин йәштәребеҙ төрлө радикал ойошмаларға, сит илдәргә китмәһен өсөн ырыу системаһын кире тергеҙеү зарурлығы хаҡында сығыш яһаным. Әгәр ҙә ырыу системаһын дини нигеҙҙә аяҡҡа баҫтырһаҡ, ул милли ғөрөф-ғәҙәттәр үтәп йәшәгән көслө йәмғиәткә әүереләсәк. Һәр бер ырыу үҙе айырым бер йәмғиәт. Был хаҡта мин бөтә урында ла әйтәсәкмен.

**▸ Әхмәт хәҙрәт, үткәндә күренекле шағирыбыҙ Мәүлит Ямалетдиндың "Ҡөрьән Кәрим сүрәләренә шиғри аңлатма" китабының исем туйында ҡатын-ҡыҙҙар хаҡында ҡыҙыҡлы бер фекер әйткәйнегеҙ. Шул саҡта залда ултырған ҡатын-ҡыҙҙар дөрөҫ рәүештә ҡул сапты. Ул һүҙегеҙҙең нигеҙе нимәлә?**

**Әхмәт Әхмәров:** Бер хәҙистең аңлатмаһы ул. Ҡатын кеше үҙенең малын үҙенә сарыф итеүе мөмкин. Ә ир кеше барлыҡ мөлкәтен үҙенең ғаиләһенә генә сарыф итергә бурыслы. Шул уҡ ваҡытта ҡатын кеше үҙенең малын ғаиләһенең ихтыяжына тотонһа, бынан ул мәсет һалыуға тиң сауап ала.

**▸ Беҙҙә дини ғилем биреү ҙә юлға һалынып бөтмәгән. Бигерәк тә диңгеҙ аръяғында уҡып ҡайтыусыларҙың үҙҙәрен тотошо аптырата ҡайһы саҡта...**

**Әхмәт Әхмәров:** Туҡһанынсы йылдарҙа беҙ дини әҙерлектәре бөтөнләй булмағандарҙы дингеҙ аръяғына уҡырға ебәреп, ҙур хата эшләнек. Йәштәр нигеҙ дини ғилемде өс-дүрт йыл һуҙымында үҙебеҙҙә алып ныҡығандан һуң ғына уларҙы диңгеҙ аръяғына ебәреү дөрөҫ булыр ине. Улар унда нисек теләһәләр, шулай әүәләгәндәр икәне асыҡланды аҙаҡ.

**Морат Лоҡманов:** Ҡайһы бер башҡорт ғалимдары: "Беҙ дингә килһәк, милләтебеҙҙе дин эсендә юҡҡа сығарасаҡтар", - тиҙәр. Мин уларҙың хәүефен аңлайым. Әммә улар тағы ла бер нәмәне аңлап етмәй. Әгәр ҙә динегеҙҙе тотмаһағыҙ, мин һеҙҙе икенсе бер халыҡ менән алмаштырам, ти Аллаһы Тәғәлә. "Баҙарҙан да ҡурҡмаҫҡа кәрәк. Әгәр ҙә ҡурҡһағыҙ, һеҙ баҙарҙы үҙ ҡулына алған халыҡтың йоғонтоһонда ҡаласаҡһығыҙ", тип әйтелә бер хәҙистә. Тап шуның һымаҡ, беҙ динде, халҡыбыҙ өсөн зыянлы, тип ситтә йөрөп ятһаҡ, күп тә үтмәҫтән, дин тотҡан икенсе бер халыҡтан йотолоуыбыҙ бар. Шуға күрә, туған телебеҙҙе һаҡлау юлында йөрөүселәр иң тәүге нәүбәттә дингә иғтибар итергә тейештәр.

**▸ Әгәр ҙә милләтте һаҡлауҙа һәм үҫтереүҙә дәүләт механизмдары йомшара төшһә, милләт тәбиғи рәүештә үҙен һаҡлауҙың юлдарын барлыҡҡа килтерә, тиҙәр. Республикабыҙҙа киң ҡолас алған ағинәйҙәр хәрәкәте шундай башланғыстарҙың береһе. Һеҙ был хәрәкәттең эшен нисек баһалайһығыҙ?**

**Морат Лоҡманов:** Ағинәйҙәр хәрәкәте - Аллаһы Тәғәләнең беҙгә биргән ҙур бер мөмкинлеге. Ҡайһы ғына ауыл мәсетенә инһәң дә, унда ике-өс, уҙа барһа, биш-алты ир-ат та, милли кейемдәге егермеләгән-утыҙлаған ҡатын-ҡыҙҙы тап итәһең. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың барыһы ла ағинәйҙәр. Әгәр ҙә беҙ халҡыбыҙҙы дингә килтереүҙә Хоҙай биргән ошо мөмкинлекте ҡулланмаһаҡ, йәғни мәсеттәргә тик ир-аттар ғына йөрөргә тейеш, тип ултырһаҡ, Аллаһы Тәғәлә беҙҙән ул мөмкинлекте кире тартып алыуы ла ихтимал. Иншалла, бер мәл мәсеттәргә ир-аттарыбыҙ эркелеп килер һәм унда ҡатын-ҡыҙҙарға урын да ҡалмаҫ!

**Әхмәт Әхмәров:** Ағинәйҙәргә: "Һаҡал-ҡашмауҙар эшләп ултырып, ваҡытығыҙҙы әрәм иткәнсе, Ҡөрьән сүрәләре ятлағыҙ", - тип әйтеүсе дин әһелдәре лә бар икән. Ундай дин әһелдәренә шулай тип яуап бирергә кәрәк: "Улар һаҡал-ҡашмау ҙа эшләргә, намаҙ ҙа уҡырға тейеш. Ҡул эшен бәйғәмбәрҙәр ҙә хуплаған..." Икенсенән, ул ҡул эштәре беҙҙең милли йолаларыбыҙ һанала, өсөнсөнән, ҡатын-ҡыҙҙар шул эштәрҙе эшләү сәбәпле йыйылып, намаҙ уҡый икән, был эштәрҙе башҡарыуҙың сауабы меңләтә тапҡыр арта.

**Морат Лоҡманов:** Ауылдарҙа аҡһаҡалдар ҡорҙары йәнле генә эш башлай ҙа, был эш нисек башланып китһә, шул рәүешле туҡталып ҡала. Ундай ир-аттарҙы милләтебеҙ ағинәйҙәренән өлгә алырға саҡырам.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**"Ҡараңғылыҡ бер ваҡытта ла ҡараңғылыҡты еңә алмай, быға яҡтылыҡ ҡына һәләтле. Нәфрәт тә нәфрәтте еңә алмай, мөхәббәт кенә быға һәләтле", тигән Мартин Лютер Кинг. Дин юлында йөрөгән ике милләттәшебеҙҙең ошо әңгәмәһенән сығып, беҙ шундай һығымта яһай алабыҙ: халыҡ, милләт бары тик Аллаһы Тәғәләгә һөйөүе ярҙамында үҙенең киләсәген яҡтырта ала. Иншалла!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

*✓ Аралашыу дефициты кисергән кешеләрҙең ҡан ойошоу күрһәткестәре күтәрелә, йөрәк ауырыуҙарына килтерә. Йөрәккә яңғыҙлыҡтың кире тәьҫире тәмәке тартыу менән бер тигеҙ, ти ғалимдар.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ТӘҮГЕ ФЕКЕР ХАТА

■ Керҙе өйҙә киптереү астма сиренә килтереүе бар. Кер кипкән саҡта бүленеп сыҡҡан дымлылыҡ бәшмәк үҫешенә идеаль шарттар тыуҙыра. Ә бәшмәк споралары аллергия һәм астма булдыра. Балалар, өлкән йәштәгеләр, иммунитеты ҡаҡшаған кешеләр хәүеф төркөмөндә, тип иҫкәртә табиптар. Киптереү машиналары, бүлмәләрҙе даими еләтеп тороу был бәләнән ҡурсалаясаҡ. Бәшмәктең һәр бер төрө лә үпкә ауырыуҙарына килтерә. Улар миҙгел әйләнәһенә үрсей, тик бына артыҡ дымлылыҡта үҙҙәрен бигерәк яҡшы тоя. Иң ҡыҙығы, фатир артыҡ стериль булһа ла астма менән ауырырға була. Британия университеты белгестәре билдәләүенсә, артыҡ таҙа һыу ҙа балаларҙа астма хәүефен арттыра. Улар микробтар менән бәләкәйҙән "осрашырға" тейеш. Сер түгел, бактериялар кеше иммунитетын сыныҡтыра. Шуға ла артыҡ таҙалыҡ һаҡлау дөрөҫ түгел.

■ Өлкән йәштәге кешеләргә яңғыҙлыҡ нисек тәҫир итә - ғалимдар ошо һорауға яуап эҙләгән. Күптәр яңғыҙлыҡ психикаға насар йоғонто яһай тигән фекерҙә. Чикаго университеты ғалимдары 11 йыл дауамында 50-68 йәштәге 229 кеше менән тәжрибә үткәргән. Эксперттар билдәләүенсә, кеше яңғыҙ ҡалһа, бер ҡасан да сыға алмаҫлыҡ түңәрәккә эләккән кеүек була. Яңғыҙлыҡ эгоизмды көсәйтә. Быға тиклем Гарвард университеты ғалимдары яңғыҙлыҡ йөрәк ауырыуҙарына килтерә тигән һығымта яһағайны. Аралашыу дефициты кисергән кешеләрҙең ҡан ойошоу күрһәткестәре күтәрелә. Йөрәккә яңғыҙлыҡтың кире тәьҫире тәмәке тартыу менән бер тигеҙ, ти ғалимдар.

■ Принстон университеты белгестәре әйтеүенсә, беҙ яңы кеше менән танышҡанда уның тураһында туплаған фекеребеҙ дөрөҫлөккә бөтөнләй тура килмәй. Был фекерҙәр, ғәҙәттә, кешенең йөҙ сырайына ҡарап билдәләнә. Бындай хата ҡараш тормош иптәше эҙләүҙә, яҡшы эш урынына дәғүә иткәндә ҡамасаулай. Йылмаймаһалар ҙа шат күренгән кешеләргә күптәр тиҙ ышана. Ә йөҙө ярһыулы күренгәндәргә ышанып бармайҙар. Бынан тыш, йоҡоһо туймағандар, шулай уҡ аҡһыл йөҙлөләр интеллект кимәле түбән, тигән фекер уята икән. Шуға ла тәүге тәьҫораттар алдашыуы ла ихтимал, ти белгестәр.

■ Сыр һәм йогурт составында булған D-метионин ҡолаҡ нервы күҙәнәктәрен йәрәхәтләнеүҙән һаҡлай. Был матдә көслө тауыш һөҙөмтәһендә ишетеү һәләтен юғалтыуҙы ла булдырмай, хатта, кирећенсә, ишетеү һәләтен тергеҙә ала. Тик бының өсөн D-метионинды тауыш тәьҫиренән һуң 7 сәғәт эсендә биреп өлгөрөргә кәрәк. Бөгөнгө көндә хайуандарҙа тикшеренеүҙәр тамамланған.

■ Салат, ҡуҙғалаҡ һәм башҡа төрлө йәшел тәмләткестәр ябығырға ярҙам итә, ти Италия ғалимдары. Рационды бындай йәшелсәләр менән тулыландырыу организмды кәрәкле күҙәнәклек менән байыта, аппетитты көйләргә ярҙам итә. Сөнки уларҙың составындағы фолий кислотаһы һәм K витамины инсулин бүленеп сығыуҙы яйға һала. Клетчатка иһә эсәктәр өсөн "щетка", токсиндарҙы сығара, аш һеңдеререүҙе тиҙләтә.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# УМЫРТҠАЛЫҠТЫ ЛА...

## күҙең ҡараһылай һаҡлау кәрәк



**Көнсығыш медицинаһы, бөгөнгө заман медицинаһы менән сағыштырғанда, кешенең умыртҡа бағанаһына күпкә етдиерәк ҡарай. Кеше кәүҙәһенең мөһим өлөшө - умыртҡалыҡ, ул организмдың көс-ҡеүәте, яҡлауы, таянысы. Эске ағзалар иһә умыртҡа бағанаһын файҙалы матдәләр, кислород менән туҡландырып тора. Дауаланыуҙы тап умыртҡа бағанаһынан башлау беренсел киҫкен ауыртыуҙарҙан арындыра, ҡан һәм матдәләр алышыныуын яҡшырта. Умыртҡа бағанаһын һауыҡтырып, ҡан баҫымын да нормаға килтерәбеҙ, күп ауырыуҙарҙан да арынабыҙ. Хатта шуның өсөн генә лә умыртҡалыҡ сәләмәтлеген күҙәтеп тороу кәрәк. Протрузия йәки умыртҡалар араһы дискыһы бүҫере лә йыш осрай торған сирҙәр иҫәпләнә. Өфөләге "Йәйғор" шифаханаһы ошо һәм башҡа сирҙәрҙе уңышлы дауалауы менән билдәле. Ҡайһы осраҡта табипҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк? Умыртҡалыҡ сирҙәрен операцияһыҙ дауалау мөмкинме? Ошо һорауҙарға медицина фәндәре кандидаты, "Йәйғор" санаторийы директоры Альберт Рәшит улы ШӘМСЕТДИНОВ яуап бирә.**

➔ **Умыртҡалыҡ сирҙәрен дауалау - халыҡ араһында санаторийҙың ҙур һорау менән файҙаланыусы йүнәлеше булып иҫәпләнә. Был ошо сирҙәрҙең күбәйеүе тураһында һөйләйме, әллә шифахананың ауырыуҙарға ярҙам итә алыу мөмкинлеге менән бәйлеме?**

- Ысынлап та, беҙ күберәк остеохондроз, протрузия, умыртҡалар араһы дискыһы бүҫерен дауалайбыҙ һәм был йәһәттән ҙур тәжрибә туплағанбыҙ. Протрузия, дискылар бүҫерен операция ярҙамында дауаларға ашыҡмаһындар ине. Беҙҙең белгестәр 99 процент осраҡта ауырыуҙарға сирҙе операцияһыҙ еңергә ярҙам итә. Табип булараҡ, мин дә умыртҡа бағанаһына операция яһау яҡлы түгелмен. Бигерәк тә йәштәргә, әүҙем йәшәү рәүеше алып барырға теләүселәргә тиҙ генә операцияға ризалашырға кәрәкмәй. Бигерәк тә дискылар бүҫеренең ҡабаттан, инде икенсе дискыла барлыҡҡа килеү ихтималлығы ҙур. Етмәһә, умыртҡалар араһы дискыһы бүҫерен дауалауҙа ярамаған осраҡтар аҙ. Беҙҙең тәжрибәбеҙҙә тулыһынса һауығып ҡайтып китеүселәр бик күп. Ҙур үлсәмдәге бүҫерҙәр, бүҫер секвестры кеүек ҡатмарлы осраҡтарҙа ла дауалауҙан баш тартмайбыҙ, ярҙам итергә тырышабыҙ.

➔ **Дауалауҙың уңыш нигеҙҙәре нимә менән бәйле, заманса ысулдар ҡулланыуҙамы?**

-Дауалау комплекслы алып барыла. Умыртҡалыҡты һуҙыу ысулының бер нисә төрө бар. Һыу аҫтында башҡарылғанын дауаланыусылар бигерәк оҡшата. Протрузияны һәм умыртҡалар араһы дискыһы бүҫерен операцияһыҙ дауалау системаһы DRX9000 Америка аппаратында ҡоро һуҙыу рәүешендә башҡарыла. Был ҡоролма тап ошо ауырыуҙарҙы дауалауҙа фәндәге иң яңы ҡаҙаныш. Компьютерлаштырылған система умыртҡаның хатта айырым өлөштәрен һуҙырға мөмкинлек бирә. Башҡа төрлө сит илдә етештерелгән заманса ҡоролмалар ҙа бар. Көслө ауыртыу мәлендә үк умыртҡа бағанаһын һуҙа башлаһаң, һөҙөмтә лә яҡшыраҡ. Шешеү ҡайтҡанын көтөү дөрөҫ түгел.

Остеохондроз, протрузия, умыртҡалар араһы дискыһы бүҫерен дауалауҙа Башҡортостанда берҙән-бер булған хилттерапия менән дә дауалайбыҙ. Был бик ҡеүәтле лазер, дауалау мөмкинлектәре лә ҙур. Был ҡоролма ҡалала башҡа клиникаларҙа ҡулланылған лазерҙан нық айырыла. Ул, тәү сиратта, ауыртыуҙы баҫа. Дөрөҫөрәге, тәүге процедура ваҡытында уҡ ауыртыу баҫыла, әгәр ҙә баҫылмай икән, тимәк, табиптарға дауалауҙың башҡа юлдарын эҙләргә кәрәк. Хилттерапия шешеү процесын юҡҡа сығарып ҡына ҡалмай, микроциркуляцияны, ҡан әйләнешен яҡшырта, был иһә кимерсәк туҡымаһы яңырыуын тиҙләтә. Махсус ҡорамал ярҙамында кинезотерапия, озонотерапия, газлы уколдар - карбокситерапия, плазмолифтинг һ.б. ҡулланыла. Элек газлы уколдар менән дауаланыу өсөн Чехияға, Карловы Вары курортына бара инеләр. Умыртҡа бағанаһына һөлөк һалыу ҙа шифалы. Мануаль терапия менән дауалаусы 3 табибыбыҙ бар. Бына был ысулдарҙы ҡулланыу яҡшы һөҙөмтәгә өлгәшергә ярҙам итә. Улар тап умыртҡа бағанаһы менән бәйле ауырыуҙарҙы дауалауға тәғәйенләнгән.

➔ **Шулай ҙа умыртҡалыҡҡа ниндәйҙер процедуралар эшләтеү алдынан уға зыян килтереп ҡуймаһындар тип тә хәүефләнәләр күптәр. Умыртҡа бағанаһын һуҙыуҙың сәләмәтлек өсөн ҡурҡынысы ниндәй кимәлдә?**

- Ниндәйҙер сирҙәр был процедураға ҡаршылыҡ булып тора, әлбиттә. Мәҫәлән, остеопороз менән ауырығандарға, йәше 70-те үткәндәргә был сара кәңәш ителмәй. Әммә ҡаршылыҡтар юҡ икән, 40 йәште үткән һәр кемгә профилактика рәүешендә йылына 1-2 тапҡыр умыртҡа бағанаһын һуҙыу кәрәк. Был умыртҡалар араһы дискылары туҡланыуын яҡшырта, ҡыҫылған дискыларҙы нормаға килтерә. Йәнлектәрҙә умыртҡалыҡ менән бәйле сирҙәр юҡ, сөнки улар кеше кеүек ике аяҡ менән атлап йөрөмәй. Кеше атлап йөрөгәндә иһә умыртҡалыҡҡа көсөргәнеш ныҡ төшә, һөҙөмтәлә умыртҡалар араһы дискылары менән бәйле күңелһеҙ хәлдәр килеп сыға. Шуға ла был көсөргәнештән арыныу мотлаҡ кәрәк, тиер инем. Һәр хәлдә, ныҡ һыҙлана башлағансы мөрәжәғәт итһендәр ине был дауалау төрөнә.

Икенсенән, беҙ дәүләт учреждениеһы. Шәхси клиникаларҙа белгестәрҙе һайлауға артыҡ иғтибар бирмәйҙәр. Уларҙың аныҡ ҡына адресы ла юҡ, бөгөн бер урында ҡабул итеүҙәре, иртәгә бөтөнләй юҡҡа сығыуҙары ихтимал. Шифахана үҙ дауаһының һөҙөмтәһе өсөн үҙе яуап бирә. Табиптарҙың махсус белеме, сертификаты, лицензияһы бар һәм был йәһәттән тәртип ҡаты. Шуға ла умыртҡалыҡты дауалауҙы ышаныслы ҡулдарға ғына рөхсәт итегеҙ, тип әйтке килә.

➔ **Умыртҡа бағанаһы сирҙәренең тәүге билдәләре бармы?**

- Һәр кемдә ауырыу төрлөсә башлана. Кемдеңдер арҡаһы ауыртып йөрөй, кемдеңдер умыртҡаның муйын, күкрәк өлөшө һыҙлай. Кемдәлер шунда уҡ көслө, сәнсеп һыҙланыу барлыҡҡа килә. Бөгөнгө техника үҫешкән мәлдә диагноз ҡуйыу ауырлыҡтар тыуҙырмай. МРТ-ла умыртҡалыҡтың бөтөн төҙөлөшөн күрергә була. Шифахана МРТ эшләмәй. Әгәр ҙә профилактика өсөн генә мөрәжәғәт итәһегеҙ икән, МРТ һүрәттәре кәрәкмәй, ә бына дауаланыу өсөн киләһегеҙ икән, ҡулығыҙҙа был аппараттың тикшереүе булырға тейеш. Уға ҡарап, умыртҡалыҡты һуҙыу кәрәкме, юҡмы икәнен дә хәл итә табиптар. Иң кәмендә, 15-20 сеанс кәрәк була. Элек шифахана-курорт дауаланыуы 40 көндән ашыу булған, яйлап - 24, унан 21 көнгә ҡалдырғандар. Хәҙер кешеләр 1 аҙна эсендә дауаланырға теләй. Әммә был процедуралар ғилми яҡтан оҙайлы ваҡытҡа тәғәйенләнгән.

Беҙҙең халыҡтың психологияһы шулай, ул отпускыһын дауаланыуға түгел, ә йышыраҡ күңел асыуға ҡора. Һаулығығыҙға битараф булмағыҙ, тип кенә кәңәш иткем килә барыһына ла. Һәр сирҙе дауалауға ҡарағанда, иҫкәртеүе күпкә еңелерәк - табиптарға ла, үҙегеҙгә лә. Сәләмәт булығыҙ!

> ✓ *Ҡартлыҡтан ҡурҡыу ярамай, тик ғүмерҙең шул мәленә барып етеү бәхетенә өлгәшергә тырышырға тейештер кеше. Бик күптәрҙең йәшләй "китеүе"нә уларҙың тырышмауы, хатта "ашығыуы" сәбәпсе булып торғанлығы мәғлүм.*



*КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП...*

**Исмәғзәм Исмәғилев "Кинәйәне киңәйтеп" рубрикаһында береһенән- береһе ҡыҙығыраҡ булған көнүҙәк темалар күтәрә. Сираттағы "Йөҙ ҡартая инде... күңелде ҡартайтма" (21-се һанда) тип аталған мәҡәләгә битараф булып ҡала алманым.**



# ҠАРТЛЫҠ БӘХЕТЕН...

## татый алмағандар ҙа бар бит!

Инде туҡһанын ҡыуып барған минең ҡәйнәм һәр саҡ: "Элек ауылда бабайҙар күп була торғайны, хәҙер улар - көндөҙ сыра ягып эҙләрлек кенә..." - ти. Ғәжәп, әммә миңә лә шулай һымағыраҡ тойола. Быны, әлбиттә, бер яҡтан уйлап ҡараһаң, субъектив тойомлау, тип фекерләргә лә була. Сөнки оло ғына йәштә булған ҡәйнәмә ауыл бабайҙары һаман да йәш булып күренеүе мөмкин. Икенсенән, мин бергә уйнап үҫкән үҙ тиҫтерҙәремде лә, бәлки, әле булһа малайҙарға һанайымдыр... Тик улай ғына түгел икән шул. Беҙ бала саҡта, ысынлап та, ауылда бабайҙар күп ине.

Үкенесле, әммә юғарыла әйтмешләй, ҡала-ауылдарыбыҙҙа оло йәштәге ир-ат халҡының ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙға ҡарағанда күпкә һирәгерәк булыуын, моғайын, бер кем дә инҡар итеп маташмаҫ (ә бит малайҙар ҡыҙҙарға ҡарағанда күберәк тыуа!) Быны мин Ҡөрьән уҡыу, ифтар (ауыҙ асыу) мәжлестәрендә айырыуса ныҡ һиҙәм. Мәжлескә йыйылған кешеләр араһындағы минең йәштәге һәм минән олораҡ ҡатын-ҡыҙҙарҙың күбеһе - яңғыҙ. Тиҫтерҙәремдең күп кенәләре ҡартаймайынса ғына яҡты донъянан китеп барҙы. Беҙ мәктәпте тамамлаған кластағы ун алты малайҙың туғыҙы был донъяла юҡ. Шуға күрә лә, минең фәлсәфәм, башлыса, ир-ат халҡына ҡағылалыр. Алтмышын тултырып, етмешкә аяҡ баҫа башлаған тиҫтерҙәремә бына нимә әйтер инем: бик күптәр татый алмаған ҡартайыу бәхетенә өлгәшеүебеҙ өсөн Аллаһы Тәғәләгә шөкөр итеп, үҙебеҙҙең ошо донъя бәхетенең ниндәйҙер бер кимәленә килеп етә алғаныбыҙға шатланып ғүмер итергә тейешбеҙ. "Ҡартлыҡ - шатлыҡ түгел", тип тә әйтәләр. Ә бәғзеләр, сер бирмәҫкә тырышып: "Әлдә дәртле күңел, бирешерлек түгел, ҡартайһаҡ та йөрәк йәш әле лә..."- тип йырлап та ебәргән була. Әммә был тормош һәр саҡ һин уйлағанса һәм һин теләгәнсә генә бармай бит әле.

Минеңсә, ҡартайыуҙы шулай ҙа яҙыусы Лермонтовтар нәҫелен дауам итеүсе психоэнергетика белгесе, яҙыусы Владимир Лермонтов әйткән ниндәйҙер берәй ауырыу йәки эпидемия һымаҡ итеп түгел, ә нормаль физиология итеп ҡабул итеү кәрәк. Яҡты донъяға килеүе, сабый сағы, йәшлеге, унан олораҡ булып ғүмер иткән дәүере менән әҙәм балаһы ризалашһа ла, шулай уҡ мотлаҡ рәүештә килеп баҫҡан ҡартлығы һәм үлеме менән килешергә теләмәй. Ә бит ҡартлыҡ һәм үлем дә - нормаль физиология. Ҡартлыҡтан һис тә ҡурҡыу ярамай, тик ғүмерҙең бына шул мәленә барып етеү бәхетенә өлгәшергә тырышырға тейештер кеше. Бик күптәрҙең йәшләй "китеүе"нә уларҙың, йомшаҡ ҡына итеп әйткәндә, тырышмауы, хатта "ашығыуы" сәбәпсе булып торғанлығы барыбыҙға мәғлүм. "Тырышмау" һәм "ашығыу"ҙың мәғәнәһен тәфсирләп тороуҙың кәрәге юҡтыр, тип уйлайым, сөнки, үҙ һаулығына битараф булып, хәмер менән дуҫлашып алған кеше ысынлап та үлергә ашыҡҡанға тиң... Бала-сағаларыңды үҫтереп, ейән-ейәнсәрҙәреңде, уларҙың үҫкәнен күпмелер ваҡыт күреп, шуның менән ләззәтләнеп ҡалыу - үҙе бер бәхет бит! Икенсе яҡтан, ҡартайған кеше йәштәргә, балаларға өйрәтерлек тормош тәжрибәһенә лә бай була. Артист Вахтанг Кикабидзе "Мои года - мое богатство..." тип йырлаған кеүек, мин дә ана шундайыраҡ көйгә көйләнеү яғындамын.

Әлбиттә, йәш саҡта эшләй алған бик күп кенә нәмәләрҙе оло кеше атҡара ла алмай. Уныһы менән дә риза булырға тейешбеҙ, хатта ана шуға ла ҡыуанып йәшәргә кәрәк. Имсәк баланың имеү ваҡыты үткән һымаҡ, олоғайған кешенең дә йәштәргә хас була торған һәләттәре һүнеү мәле килеп еткәнлегенә реалист күҙлегенән сығып бағыу мотлаҡ. Гәзитебеҙҙең 21-се һанындағы риүәйәттә һөйләнгән ҡарт һымаҡ, "Минең көсөм һаман да йәш сағымдағы һымаҡ", тип, һис төшөнкөлөккә бирелмәй, үҙ хәлеңде һәр саҡ үҙ йәшеңә ҡарап самалап, шуның менән риза булып, хатта уға юмор менән ҡарау ҙа бик шәп нәмә ул, тиеп уйлайым.

Ә бына бәғзе берәүҙәр һымаҡ "һаҡаллы сабый" булып, һаман да йәш булырға маташып, көсәнеп йөрөү - килешмәгән эштер. Минең ныҡлы инаныуымса, олпат йәштәге оло кеше булып, үткән тормошоңдоң иң яҡшы хәтирәләрен балаларыңа, йәштәргә һөйләй-һөйләй, үҙ урыныңды белеп кенә, үҙеңдең һис шикһеҙ барасаҡ ахирәтеңде хәстәрлекләп, йәшлек менән ҡылған хаталарың, гонаһтарың өсөн Аллаһы Тәғәләгә тәүбә итеп, Уға баш эйеп өлгөрөп ҡалыу яғын ҡарау кәрәктер, минеңсә. Юғиһә, Уға бер мәртәбә лә сәждә ҡылмай, иман килтермәй, шул көйө генә аңғармаҫтан китеп барыу ҡурҡынысы бар. Бына шул хаҡта уйландырҙы мине Исмәғзәм ҡустының мәҡәләһе.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

*МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ*

# УРАҘАНЫҢ ФАЙҘАҺЫ БАРМЫ?



Рамаҙан айы мәлендә бер танышымды осраттым. Бер аҙ хәл-әхүәл һөйләшә торғас, ураҙа хаҡында һүҙ сыҡты. Минең ураҙа тотоуым тураһында белгәс, танышым:

- Ураҙаның берәй файҙаһы бармы ул? - тип һорап ҡуйҙы.

- Бар, - тинем мин, һис икеләнмәйенсә.

- Ниндәй?

- Ахирәттә уның файҙаһы тейә, - тип яуап бирҙем. Танышым ни тип әйтер икән, тип, ураҙаның был донъяла ла тәнгә, һаулыҡҡа ниндәйҙер файҙаһы булыуы хаҡында юрый өндәшмәнем.

- Ахирәттә?.. - тип бер аҙ ғәжәпләнә бирҙе яҡташым йөҙөнә ниндәйҙер аңлашылмаусанлыҡ билдәһе сығарып.

- Эйе, барыбыҙ ҙа иртәме-һуңмы барасаҡ ахирәттә...

Танышым был хаҡта ни уйлағандыр, бер Алла ғына белә, әммә башҡаса ураҙа хаҡында һүҙ оҙайтырға теләмәне.

Бына шулай, бик күптәребеҙ, ураҙаның фәҡәт донъяуи файҙаһы хаҡында ғына уйлап, ныҡ хаталана. Ә уның төп тәғәйенләнеше - Ислам дининең мотлаҡ үтәлергә тейешле биш терәгенең береһен атҡарып, Аллаһы Тәғәләнең ризалығына өлгәшеү икәнен күптәр белмәй. Ураҙаның барыбыҙға ла ахирәтебеҙ өсөн, унда Раббыбыҙ алдында яуап бирер өсөн кәрәклеген белергә тейешбеҙ. Ул - Аллаһ Собхәнә үә Тәғәлә алдындағы һәммәбеҙҙең бурысыбыҙ! Боронғо ата-бабаларыбыҙ бына ошо хәҡиҡәтте белгән һәм ниндәй генә ауыр йылдар булыуына ла ҡарамаҫтан, бер көн ураҙаһын ҡалдырыуҙан да ҡурҡҡан. Сөнки ураҙаны һис бер сәбәпһеҙ тотмай ҡалдырыу - оло гонаһ, уның өсөн ахирәттә һәммәбеҙ яуап бирәсәкбеҙ. Ә ахирәт тормошоноң барлығына ышанмау - тағы ла ауырыраҡ гонаһҡа һанала, сөнки был - иман шартының береһенә ышанмау! Уға ышанмаған кешенең хатта Ислам диненән сығып китеү ҡурҡынысы бар.

"Иннәмә әғмәлү бин-ниәт", тигән Аллаһ илсеһе ғәләйһис-сәләм, йәғни, һәр ғәмәл ниәткә ҡарап баһалана. Әгәр кеше ураҙаны ябығыу өсөн, һаулыҡ яҡшыртыу өсөн, ғөмүмән, диета урынына ғына ниәтләп тота икән, былдай ураҙа - тик асығыу ғына була. Аллаһ Тәғәләгә беҙҙең ҡоро асығыу кәрәкмәй. Шуға күрә, ураҙаны дөрөҫ ниәт менән тотоу кәрәк. Әлхәмдүлиллаһ, бына ураҙа байрамына ла килеп еттек. Аллаһ Тәғәлә тотҡан ураҙаларыбыҙҙы ҡабул ҡылһын, киләһе изге Рамаҙан айына тиклем имен-аман барып етергә насип итһен, тип доғалар ҡылайыҡ. Ҡәҙерле милләттәштәребеҙ, ураҙа ғәйете мөбәрәк булһын!

**Хөрмәтулла ҠЫУАНДЫҠОВ.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*

# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

## Бәлки, һеҙгә түбәндәге "легенда"лар буйынса йәшәгән кешеләр осрағандыр?

"Мин - абруйлы кеше, шуға ла миңә тейешенсә мөнәсәбәт кәрәк". Ҡайһы берәүҙәр уларҙы таныға, байлығына көнләшергә йәки ғилми дәрәжәләренә һоҡланырға тейеш тип уйлай. Тирә-яҡтағыларҙың ихтирамын көтөп, үҙебеҙҙе ғазаптарға дусар итәбеҙ, сөнки был осраҡта бәхетебеҙ сит ҡулдарҙа була. Үҙегеҙ уйлап тапҡан образдан сығығыҙ, сөнки ул бары тик стрестарға ғына килтерә. Үпкәләү зарурлығы бөтөү менән ял итергә лә мөмкин. Башҡаларҙан иғтибар көтмәгән һайын уны күберәк алаһың. "Мин ундайҙарҙан түгел..." (бизнес-класта осмайым, ай яҡтыһында бейемәйем, театрҙарға йөрөмәйем, смокинг киймәйем һ.б.). "Мин бер ваҡытта ла улай эшләмәйем" йәки " мин бары тик шулай ғына эшләйем" тип, үҙебеҙҙе ирекТән мәхрүм итәбеҙ һәм быны беҙ түгел, ә "легендабыҙ" әйткәнен аңламайбыҙ. Ә бит былдай легендаларыбыҙ әллә күпме булыуы мөмкин. Мәҫәлән: "Мин бик хисле кеше, шуға һәр саҡ күңелем төшә", "Мин - ысын ир-егет", "Мин - йондоҙнамә буйынса Уҡсы, шуға күрә..." "Мин ҡарт инде..." Минең әсәйем үҙенең беренсе китабын 67 йәшендә яҙа башланы. Бер йылдан вафат булды һәм китабын тамамлап өлгөрмәне. Әммә башлағаны өсөн ул бик шат һәм бәхетле ине. Йәшәүҙең бер генә ысулы бар: яңылыҡҡа өйрәнеүҙән туҡтамаҫҡа һәм һуңғы көнөңә тиклем эшләгән эшеңде яратырға. Үлгәндә китабыңды яҙып бөтөрмәгәнең йәки өйөң төҙөлөп бөтмәгән өсөн үкенергә ваҡытың булмаясаҡ. Ҡыҫҡаһы, үҙеңдән, ошо "легенда" булмаһа, мин кем булыр инем, тип һора.

## Ниндәй инаныуҙарҙан ҡотолорға кәрәк?

Йәшәргә, үҫергә һәм ҡыуанырға ҡамасаулағандарҙың барыһынан да! Әгәр ниндәйҙер инаныу тормошта ярҙам итмәй икән, уны сүплеккә ташлағыҙ! Бында уларҙың дөрөҫ йәки дөрөҫ түгеллеге тураһында һүҙ бармай, ә ауырлыҡ һәм ғазаптан башҡа бер нәмә лә бирмәүе тураһында. Тәү сиратта, кемдер һиңә нимәлер тейеш тигән инаныуҙан арынырға кәрәк:

- Кешеләр хеҙмәт өсөн хеҙмәт күрһәтергә тейеш!
- Кешеләр мине маҡтарға тейеш! (Ирем уның өсөн тырышҡанды иғтибарға алырға тейеш).
- Мин уларҙы яратҡан өсөн, башҡалар ҙа мине яратырға тейеш!
- Кешеләр миңә иғтибарлы булырға тейеш!
- Кешеләр миңә рәхмәтле булырға тейеш!

Был талаптар урынлы булып күренер. Әммә бер көн килеп уларҙан баш тартҡанда? Тирә-яҡтағыларға беҙҙең ғәмәлдәребеҙ өсөн хаҡ түләү, улар өсөн тырышҡаныбыҙҙы иҫәпкә алыу, яратыуыбыҙға яуап биреү мотлаҡ түгел. Ул саҡта тормошобоҙҙа нимә үҙгәрер? Башҡалар беҙҙе әҙерәк ихтирам итә һәм баһалай башлармы? Шулай булған хәлдә лә, тормошобоҙҙа бәхет кәмерәк булмаясаҡ. "Тейеш" тигән һүҙ булған инаныуҙар тормошта ярҙам итмәй, сөнки ысынбарлыҡ ундай мөнәсәбәттәрҙе аңламай. Донъяла барыһы ла нисек бар, шулай ҡабул ителә. Ысынбарлыҡты тәнҡитләү - мәғәнәһеҙ, сөнки ул һәр саҡ еңәсәк.

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**



## 26 ИЮНЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15 "Наедине со всеми" (16+).
13.20, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Первая студия". Прямой информационный канал (16+).
19.50 "Пусть говорят" с Андреем Малаховым" (16+).
21.30 "Время".
21.30 "Мажор-2". 5-я и 6-я серии. Криминальный сериал (16+).
23.40 "Вечерний Ургант" в Санкт-Петербурге"(16+).
00.10 "Познер" (16+).
01.10 Ночные новости.
01.25, 03.05 "Тора! Тора! Тора!" Военная драма (12+).
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Пыльная работа". Детективный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Шесть миллионов свидетелй". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Погоня за прошлым". Часть 1-я. Детективный сериал (12+).
00.20 "Специальный корреспондент" (16+).
02.50 "На солнечной стороне улицы". Драматический сериал (12+).
03.50 "Наследники". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Леонардо".**
**09.30, 22.30 "Старики-разбойники". Худ. фильм (12+).**
**11.00 Новости недели.**
**11.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**12.00 "Т.Миннуллин. "Мулла" (12+).**
**14.00 "Мелодии лета". Концерт творческих коллективов ГКЗ "Башкортостан".**
**15.30 "Книга сказок".**
**15.45 "Байтус" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Перекличка" (6+).**
**16.30 "Ловецветра". Худ. фильм (12+).**
**18.15 "Орнамент".**
**19.00 "Бизнес-проба" (12+).**
**19.15 "Бай" (12+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 Международный фестиваль искусств "Ufa-Kuraifest" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "ФК "Уфа" - наша команда!" (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**00.45 А.Островский. "Без вины виноватые" (12+).**

## 27 ИЮНЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 03.40 "Наедине со всеми" (16+).
13.20, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Давай поженимся!" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Первая студия". Прямой информационный канал (16+).
19.50 "Пусть говорят" с Андреем Малаховым (16+).
21.30 "Время".
21.30 "Мажор-2". 7-я и 8-я серии. Криминальный сериал (16+).
23.40 Ночные новости.
23.55 "Свой среди чужих, чужой среди своих". Боевик (12+).
01.50, 03.05 "Ковбойши и ангелы". Худ. фильм (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Пыльная работа". Детективный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Горячие следы". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Погоня за прошлым". Часть 2-я. Мелодраматический сериал (16+).
00.20 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
02.30 "На солнечной стороне улицы". Драматический сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Тайна замка тамплиеров". Сериал (16+).**
**11.00 "Следопыт" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Бизнес-проба" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Дорога к храму" (6+).**
**15.30 "Йырлы кәрәҙ".**
**15.45 "Бауырһаҡ" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Семәр" (6+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.45 "Дознание" (16+).**
**18.15 "Неизвестный Башкортостан" (12+).**
**19.15 "Автограф" (12+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр".**
**20.45 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "Грабители поезда". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.00 "Бәхетнамә" (12+).**
**02.00 Х.Ибрагимов. "Зятек" (12+).**

## 28 ИЮНЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10, 04.25"Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15 "Наедине со всеми" (16+).
13.20, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Давай поженимся!" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Первая студия". Прямой информационный канал (16+).
19.50 "Пусть говорят" с Андреем Малаховым" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Мажор-2". 9-я м 10-я серии. Криминальный сериал (16+).
23.40 Ночные новости.
23.55 "На ночь глядя" (16+).
00.50 "Развод в большом городе". Драма (12+).
02.45, 03.05 "Хроника". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Пыльная работа". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Чужая дверь". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Погоня за прошлым". Часть 3-я. Мелодраматический сериал (12+).
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.50 "На солнечной стороне улицы". Драматический сериал (12+).
03.45 "Наследники". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Тайна замка тамплиеров". Сериал (16+).**
**11.00 "Наука 102" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Тәмле" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "У дачи" (12+).**
**15.30 "Городок АЮЯ".**
**15.45 "Ал да гөл".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Физра" (6+).**
**17.15 "Дорожный патруль" (12+).**
**17.45 Док. фильм "Приют титанов" (12+).**
**19.15 "Үткән ғүмер" (12+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр".**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Возврата нет". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 "Бәхетнамә" (12+).**
**02.30 Т.Миннуллин. "Любовница" (12+).**

## 29 ИЮНЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 03.50 "Наедине со всеми" (16+).
13.20, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 "Новости" (с субтитрами).
16.00 "Мужское/женское" (16+).
17.00 "Давай поженимся!" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Первая студия". Прямой информационный канал (16+).
19.50 "Пусть говорят" с Андреем Малаховым" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Мажор-2". 11-я и 12-я, заключительная, серии. Криминальный сериал (16+).
23.40 Ночные новости.
23.55 "На ночь глядя" (16+).
00.50, 03.05 "Маргарет". Мелодрама (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести - Башкортостан".
11.55 "Пыльная работа". Сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести - Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Перевернутая Дженни". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести - Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир" (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести - Башкортостан".
21.00 "Погоня за прошлым". Часть 4. Мелодраматический сериал (12+).
23.20 "Поединок". Программа Владимира Соловьева (12+).
01.20 Торжественное открытие 39-го Московского международного кинофестиваля.
02.30 "На солнечной стороне улицы". Сериал (12+).
03.30 "Наследники". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Тайна замка тамплиеров". Сериал (16+).**
**11.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Бай бакса" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Неизвестный Башкортостан" (12+0.**
**15.15 "ДОСААФ: испытано на себе" (12+).**
**15.30 "Борсаҡ".**
**15.45 "Фанташ" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ".**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.45 "Клио" (12+).**
**19.15 "Башҡорттар" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр".**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Бандиты". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 "Бәхетнамә" (12+).**
**02.30 М.Гафури. "Черноликие" (12+).**

## 30 ИЮНЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00 Новости.
09.10, 05.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 04.10 "Модный приговор".
12.15 "Наедине со всеми" (16+).
13.20, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым" (16+).
19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Победитель".
23.10 "Мастрояни, идеальный итальянец" (16+).
00.15 "Молодая кровь". Боевик (16+).
02.20 "Неверный". Худ. фильм (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Пыльная работа". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Черная метка". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести ПФО".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Погоня за прошлым". Часть 5 (16+).
00.20 "Родная кровиночка". Мелодрама (12+).
02.15 "На солнечной стороне улицы". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Тайна замка тамплиеров". Сериал (16+).**
**11.00 "Автограф" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 "Эх, холостяки, холостяки..." (12+).**
**13.45 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.00 "Хазина" (6+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45 "Бала-сага" (6+).**
**15.30 "Сулпылар". Детский музыкальный телеконкурс.**
**15.45 "Шәп арба" (6+).**
**16.00 "История граффити" (6+).**
**16.15 "Перекличка" (6+).**
**16.45, 21.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**17.15, 20.45 "Полезные новости" (12+).**
**17.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**18.00 "Йома".**
**19.00 "Алтын тирмә".**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**22.00 "Наука 102" (6+).**
**23.00 "Песня года" (12+).**
**23.30 "Ларго Винч: начало". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 И.Ибрагимов. "Башмачки" (12+).**

## 1 ИЮЛЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.40, 06.10, 05.05 "Наедине со всеми" (16+).
06.00 Новости.
06.40 "Кураж". Сериал (16+).
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости.
10.15 "Александра Яковлева. Жизнь с чистого листа" (12+).
11.20 "Смак" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.15 "Вокруг смеха".
16.30, 18.15 "Точь-в-точь". Шоу перевоплощений (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.50 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым".
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.00 "Другая Бовари". Мелодрама (16+).
00.50 "Дружинники". Комедия (16+).
02.45 "Без следа". Детектив (12+).

### РОССИЯ 1

05.15 "Как развести миллионера". Сериал (12+).
07.10 "Живые истории".
08.00 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.20 "Сто к одному". Телеигра.
10.10 "Пятеро на одного". Развлекательно-интеллектуальное шоу.
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50, 14.30 "Только ты". 8 серий. Мелодраматический сериал (12+).
14.00 "Вести".
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Любовь говорит". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
00.50 "Красотка". Мелодрама (12+).
02.50 "Марш Турецкого-3". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45, 12.30, 18.30, 22.30, 01.45 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 Мультфильм.**
**09.30 "Аль-Фатиха" (6+).**
**10.00 "У дачи" (6+).**
**10.30 "Большой чемодан" (6+).**
**11.15 "Клио" (6+).**
**12.00 "Следопыт" (12+).**
**13.00 "Бай бакса" (12+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байык-2017" (12+).**
**17.00 "Мелодии моей души".**
**19.00 "Человек слова" (12+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Колесо времени" (12+).**
**21.00 "Полезные новости" (12+).**
**21.15 "ДОСААФ: испытано на себе" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Мистический Бапшкортостан" (12+).**
**23.00 "Башҡорт йыры-2017" (12+).**
**23.45 "Ларго Винч-2: заговор в Бирме". Худ. фильм (12+).**
**02.15 Ф.Буляков. "Похищение стариков" (12+).**

## 2 ИЮЛЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Кураж". Худ. фильм (16+).
08.10 "Смешарики. ПИН-код".
08.20 "Часовой" (12+).
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости.
10.15 "Непутевые заметки".
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.15 "Теория заговора" (16+).
14.00 "Никита Хрущев. Голос из прошлого" (16+).
18.25 "Аффтар жжот" (16+).
19.30 "Лучше всех!"
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Что? Где? Когда?" Летняя серия игр.
23.40 "Прометей". Фантастика (16+).
02.00 "Мы не женаты". Комедия (12+).
03.35 "Наедине со всеми" (16+).
04.30 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00 "Как развести миллионера". Худ. фильм (12+).
07.00 "Мультутро". "Маша и Медведь".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама Евгения Петросяна".
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному".
11.20 "Вести - Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.20 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа.
13.10 "Семейный альбом" (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Девушка в приличную семью"
16.20 "Сводная сестра". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
24.00 "Дежурный по стране". Михаил Жванецкий.
00.55 "Иван Агаянц. Путь в Историю". Док. фильм (12+).
01.55 "Химия чувств" (12+).

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 Бюро находок".**
**09.00 "Йома".**
**09.30 "Бай".**
**10.00 "Физра" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Байтус" (6+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Сулпылар".**
**11.15 "Йәйләү" (6+).**
**11.45 "Алтын тирма".**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.00 "Млечный путь" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30 "Историческая среда" (12+).**
**17.00 И.Абдуллин. "Озорная молодость" (12+).**
**19.00 "Дом у озера" (12+).**
**19.45 "Бизнес-обзор" (12+).**
**20.00 "Байык-2017" (12+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 Гала-концерт XXI Международного фестиваля балетного искусства им.Р.Нуреева (16+).**
**24.00 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.00 "Смертельное благословение". Худ. фильм (16+).**
**02.45 Б.Брехт. "Кавказский меловой круг" (12+).**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Июнь - Июль (Шәүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 26 (2) дүшәмбе | 3:12 | 4:42 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |
| 27 (3) шишәмбе | 3:13 | 4:43 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |
| 28 (4) шаршамбы | 3:14 | 4:44 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |
| 29 (5) кесе йома | 3:14 | 4:44 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |
| 30 (6) йома | 3:15 | 4:45 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |
| 1 (7) шәмбе | 3:16 | 4:46 | 13:30 | 20:23 | 21:53 | 23:23 |
| 2 (8) йәкшәмбе | 3:16 | 4:46 | 13:30 | 20:23 | 21:53 | 23:23 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*


### ИҒЛАН

Утерянный студенческий билет **№131183,** выданный ФГБОУ ВПО Башкирским государственным аграрным университетом на имя **Улмасбаева Ильгама Минисламовича**, считать недействительным.

✓ ***Милли кейем парадындағыларҙың күпселек өлөшөн Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының "Ағинәй" төбәк йәмғәт ойошмаһы ағзалары тәшкил итте. Райондарҙан һәм ҡалаларҙан килгән 779 ағинәй теркәлеү үткән.***



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# МИЛЛИ КЕЙЕМ ТАНТАНАҺЫ

**(Башы 1-се биттә).**

Был байрамды күптәр, бигерәк тә республика райондарында йәшәгән ағинәйҙәр ашҡынып көттө. Интернет селтәрҙәрендә әленән-әле "Байрам ҡасан була?", "Беҙ белмәй ҡалмайыҡ..." тигәнерәк яҙмалар күҙгә ташланды. Беренсе тапҡыр үткән былтырғы парадта милли кейеме булмағандар тамашаны ситтән генә күҙәтеүсе ролендә булһа, быйыл инде улар махсус рәүештә әҙерләнеп, күлдәк-камзулдар тектереп кейеп, биҙәүестәр эшләп тағып, байрамдың түрендә булыуҙары тураһында ғорур белдерҙе.

Милли кейем парады театр майҙанынан ҡуҙғалғанда, шуны ғына көткәндәй, күктән ямғыр тамсылары ишелде. Әммә беҙме һуң июнь ямғырына бирешә торған халыҡ: парад алдынан ғына түгелеп ямғыр яуып ебәреүе лә кәйефте төшөрмәне. Беҙҙең халыҡ фәлсәфәүи аңға таянып йәшәгән милләт бит инде. Яҡты донъялағы һәр бирелгән көндө оло бүләк итеп ҡабул итеп, асфальт өҫтөндә тыптырлап бейешкән тамсылар йырына ҡурай моңдарын ҡушып ебәреп, атланы ла киттеләр. Был мәле лә һынау булды, күрәһең. Бындай тәүәккәллекте тәбиғәт тә ҡабул итте - нисек ҡапыл башланған булһа, шулай ҡапыл тынды ла ямғыр, ҡояш көлөп тә ебәрҙе. Ҡурайсылар һәм ил ағалары артынан эйәргән башҡорт милли кейемендәге ҡеүәтле сафтар әле ҡурайға, әле гармунға ҡушылып йырлашып, Әхмәтзәки Вәлиди урамы буйлап Салауат һәйкәленә юл алды. Был сафҡа Театр, Аксаков, Гоголь урамдарынан урыҫ, татар, мари, украин, сыуаш һәм республикала йәшәгән башҡа халыҡтар төркөмдәре ҡушылды. Башҡортостандың 43 районынан вәкилдәр ҡатнашты был сарала.

Милли кейем парадындағыларҙың күпселек өлөшөн Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының "Ағинәй" төбәк йәмғәт ойошмаһы ағзалары тәшкил итте. Райондарҙан һәм ҡалаларҙан килгән 779 ағинәй теркәлеү үткән, тинеләр. Афарин, милләтебеҙ бәҫен күтәргән, төрлө төбәктәрҙә йәшәгән ағинәйҙәр, апайҙар. Һеҙһеҙ был байрамды күҙ алдына ла килтереүе ҡыйын! Нисек маҡтамайһың да, нисек һоҡланмайһың инде һеҙҙәргә! Парадта атлаған ағинәйҙәрҙең ҡайһы берҙәре күҙ йәштәренә лә ирек ҡуйҙы. Ҡасандыр ошондай кейемдәр кейеп, ошо ерҙәрҙән иркле атлап йөрөү өсөн башын һалған, ҡан ҡойған, иркенән мәхрүм булған милләттәштәребеҙҙең рухынмы, әллә бөгөн бына ошолай күкрәк киреп, нык баҫып йөрөй алыр илебеҙ булыуын уйлапмы, әллә ниндәй башҡа ҡанатлы хистәр солғанышында булыпмы, иланы улар...

Сарала башҡорт милли кейеме кейгән Өфө балаларының ҡатнашыуы байрамға үҙе бер йәм өҫтәне. Уларға ата-әсәләре, мәҙәниәт учреждениелары етәкселәре ана ниндәй сағыу, матур кейемдәр тегеп кейҙергән. Һеҙ тормошобоҙ йәме, балалар! Быуындарҙы быуындарға ялғап торған епте дауам итеүселәребеҙ шулай артып торһон!

Был көндө республика халҡы шағир, сардар Салауат Юлаевтың тыуған көнөн дә билдәләне: ҡурайсылар, йәмғәт эшмәкәрҙәре, ағинәйҙәр бергәләп батырҙың һәйкәленә сәскәләр һалды. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Әмир Ишемғолов, Башҡортостан мәҙәниәт министры урынбаҫары Рәнис Алтынбаев халҡыбыҙҙың, шәхестәрҙең мәртәбәһе хаҡында телмәр тотто.

Байрам Салауат Юлаев һәйкәле янында дауам итте. Башлыса ағинәйҙәрҙән торған фольклор коллективтары ике сәғәт дауамында сәхнәлә сығыш яһаны, йырланы, бейене. Артабан барыһы ла этно-ауыл майҙанына төшөп, шулай уҡ "Евразия йөрәге" фестивале сиктәрендә ойошторолған "Этно-төн" фестивален - баш ҡаланың сәнғәт, мәҙәниәт учреждениелары музыканттары, оркестрҙары, йыр һәм бейеү ансамблдәре сығыштарын тамаша ҡылды. Ҡала халҡы был көндө тамаша өҫтөнә тамаша ҡарап, рәхәтләнеп ял итте.

**Әлиә ИСМӘҒИЛЕВА,**
**Лариса АБДУЛЛИНА.**



















✓ *Йә кешелек һуғышты бөтөрә, йә һуғыш - кешелекте.*

*(Джон Кеннеди).*



*ҠЫҪҠА ИНТЕРВЬЮ*

# ҺАРЫ ЙӨҘЛӨЛӘР ҘӘ...

## зәңгәр күҙлеләр ҙә - беҙҙекеләр



**Әүҙем башҡорт йәштәре беҙҙе ҡыҙыҡлы проекттар менән ҡыуандырыуын дауам итә. Бөгөнгө көндә "Урал мираҫы" тигән исем менән таныш #БашЭтноФорум мәғариф форумы авторы, #UfaForum проекты авторҙашы, шулай уҡ республикала воркаут хәрәкәтен булдырыусы һәм уға нигеҙ һалыусы, сәләмәт йәшәү рәүешен популярлаштырыусы Роберт ДӘҮЛӘТШИН яңы проект тәҡдим итә. Light Bashkirs - Һары башҡорт тип атала ул.**

**Бик үҙенсәлекле был проект идеяһы нисек барлыҡҡа килде?**

- Һәр милләттең үҙ мәҙәниәте, үҙ холҡо, үҙенә генә хас тышҡы ҡиәфәте була. Күптәрҙең аңында башҡорттар ҡара сәсле, ҡара күҙле, ҡара ҡашлы, ҡуңыр йөҙлө, тигән ҡараш йәшәй. Әммә беҙ бит төрлө. Һәр ырыуҙың үҙенә хас йөҙө лә бар. Мәҫәлән, мин үҙем тап һары башҡорт. Бәләкәй саҡтан уҡ бер күренешкә осрайым: мине белмәгәндәр араһында милләтем тураһында һүҙ сыҡһа, башҡорт тип танымайҙар. Урыҫһындыр, тиҙәр, йәки башҡа милләттәрҙе атайҙар. "Башҡорт" тигән вариантты иң аҙаҡтан ғына әйтәләр, йә бөтөнләй әйтмәйҙәр. Үҙем ошоноң менән даими осрашҡас, был хаҡта уйланып йөрөй инем. Башҡорт ул тик ҡара күҙле, ҡуңыр йөҙлө тигән стереотипты юҡҡа сығарыр һәм башҡаларҙың башҡорттарҙың тышҡы ҡиәфәте тураһындағы белемдәрен киңәйтергә теләп, ошо проект барлыҡҡа килде.

**Уның шарттары менән дә таныштырып үтһәң...**

- Был проект бер нисә этаптан торасаҡ. Әлегә уның беренсе этабы ғына. Унда йәшел, зәңгәр, һоро күҙлеләр ҡатнаша ала. "Бәйләнештә" социаль селтәрендә махсус төркөм булдырылған. Унда 30 июнгә тиклем асыҡ төҫлө күҙле башҡорттар милли кейемдә фотоға төшөп, шунда ебәрергә тейеш. Бөгөнгө көндә унда 150-нән ашыу фото килгән. Һайлап алыу турын үткәндәр өсөн фотосессия 8 июлдә, "Урал мираҫы" этнофорумы сиктәрендә буласаҡ. Ул этник стилдә эшләнәсәк. Йәш буйынса сикләүҙәр юҡ, ваҡыт бар әле, барыһын да был фотопроектта ҡатнашырға саҡырабыҙ. Шулай уҡ беҙгә ярҙам итергә теләүселәргә шат буласаҡбыҙ. Был социаль проект, ижади ҡарашлы фотографтар, видеооператорҙар, дизайнерҙар, рәссамдар, милли кейемдәр тегеүселәр, милли биҙәүестәр яһаусыларҙы ҡатнашырға саҡырабыҙ.

**Был проектҡа ғалимдар ҙа ҡушылып, уны фәнни яҡтан нигеҙләйәсәкме?**

- Социаль тикшеренеүҙәр институты фәнни яҡтан беҙгә ярҙам итәсәк. Ошо уҡ төркөмдә үҡ бер нисә мәҡәлә баҫыласаҡ. Нигеҙенә фәнни мәғлүмәт һалынғанда ғына уның ҡиммәте буласаҡ. Проекттың маҡсаты - башҡорттарҙың тышҡы ҡиәфәте тураһындағы ҡараштарҙы киңәйтеүгә генә түгел, ә ситтәрҙең халыҡтың этник мәҙәниәтенә иғтибар йүнәлтеү ҙә. Шуға ла бында бөтөн нәмә лә әһәмиәтле.

**Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЭШЕҢ ҠАЛЬА ИРТӘГӘ...

## сиҡан сығыр елкәңә

Ир хазинаһы - исҡе һүҙ, уның сыраҕы - исҡе дуҫ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Йә кешелек һуғышты бөтөрә, йә һуғыш - кешелекте.

**(Джон Кеннеди).**

Баш күтәреүҙәр - ул ишетелмәгән халыҡтың теле.

**(Мартин Лютер Кинг).**

Иртән торғанда мин гел генә тешемде таҙартам һәм телемде үткерләйем.

**(Оскар Левант).**

Ғәжәп: һәр кеше үҙенең нисә һарыҡ тотҡанын еңел генә әйтә ала, ә дуҫтарының һанын һораһаң, бер кем дә әйтә алмай. Шул тиклем дә дуҫтарҙың ҡиммәте юҡ...

**(Сократ).**

Ахмаҡ та, шым торһа, аҡыллы булып күренә ала.

**(Соломон).**

Кеше ҙурая барған һайын үҙгәрештәргә ҡаршы тора, бигерәк тә яҡшы яҡҡа үҙгәрештәргә.

**(Джон Стейнбек).**

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың хоҡуҡтары беҙҙекеләр менән тиң, тик ул хоҡуҡтарҙы ҡулланмау ҡатын-ҡыҙ өсөн уңайлы.

**(Шарль Талейран).**

Тәмәкене ташлауҙан да еңелерәге юҡ. Мин утыҙ тапҡыр ташланым инде.

**(Марк Твен).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Урмандағы бар кейектәр бүренән ҡурҡып йәшәгән. Ул килгәндә күреп ҡалһалар, барыһы ла йән-фарман ҡасыр булғандар. Бер саҡ бүре барыһын да йыйып алған да, былай тигән: "Беҙҙең урманда ҡурҡыу тигән тойғоноң батшалыҡ итеүен теләмәйем. Минә ас йырткыска ҡараған кеүек ҡарамағыҙ, ҡурҡып ҡасмағыҙ. Мин бары тик ауырыу һәм көсһеҙҙәрҙе генә ашарға яратам. Арағыҙҙа шундайҙар булһа, алып килегеҙ минә уларҙы. Ә һеҙгә мин теймәм..."**

**Кейектәр ризалаша. Улар бүрегә ул һораған ауырыу һәм көсһеҙҙәрҙе килтерә тора, тегеһе улар менән тамаҡлана тора. Әммә ҡайһы саҡта ауырыу йәнлекте алып килгән һау йәнлекте лә ашап ҡуя был. Шунан йәнлектәр унан: "Ниңә һин һауҙарыбыҙҙы ла тамаҡлайһың?" - тип һорай. Бүре: "Мин һеҙҙең барығыҙҙы ла ауырыу итеп күрәм шул", - тип яуап бирә. Кейектәр унан тағы ҡаса башлай, ә бүре баҫтыра. Шулай ҡасыша-ҡасыша йәшәй улар урманда..."**

*ВИКТОРИНА*

# ӘҘӘБИӘТ ҺӘМ ӘҘИПТӘР



**Был юлы шағирә, Ш. Бабич исемендәге дәүләт йәштәр премияһы лауреаты Лариса Абдуллинаның ижады буйынса викторина тәҡдим итәбеҙ.**



**1. "Балҡантау рухы" китабында малайҙар ҡайһы башҡорт батыры менән осраша?**
а)Урал батыр;
б) Заятүләк;
в) Иҙеүкәй;

**2. Лариса Абдуллина шиғырына яҙылған һәм Искәндәр Ғәзизов башҡарған йыр?**
а), "Һары сәскәләр";
б) "Сыҡма юлдарыма";
в) "Ҡарағай урманында".

**3. Лариса Абдуллина ҡайһы шағирҙың нәҫел шәжәрәһен төҙөгән?**
а) Рауил Бикбаев;
б) Шәйехзада Бабич;
в) Абдулхаҡ Игебаев;
г) Рәсимә Ураҡсина.

**4. Лариса Абдуллина кемдәрҙең китаптарын урыҫ теленән башҡортсаға тәржемә иткән?**
а) Ләйсән Үтәшеваның "Һынмаҫ рухлы" китабын;
б) Марат Сәйетовтың " Ағас сәғәт" китабын;
в) Светлана Дегтяреваның "...Һәм мин һинә ҡайтырмын..." китабын;
г) өс яуап та дөрөҫ.

**Ҡәҙерле дуҫтар! Кем дә кем 246-03-24 номеры буйынса шылтыратып, ошо һорауҙарға дөрөҫ яуап әйтә, шул Лариса Абдуллинаның автографлы "Балҡантау рухы" исемле китабын алып һөйөнәсәк. Үткән уйын йомғаҡтары буйынса Айгиз Баймөхәмәтовтың автографы ҡуйылған "Ҡалдырма, әсәй!" һәм "Әкиәтһеҙ бала саҡ" китаптарын Ишембай районы Ғүмәр ауылынан Гөлсөм Мәҡсүтова, Өфө ҡалаһынан Эльмира Хәсәнова һәм Магнитогорск ҡалаһынан Физәлиә Йәһүҙина отто! Йәгеҙ, кем алыҡ?**

**Рубриканы Иҙел РӘХИМОВ алып бара.**

# ҠОТЛАЙБЫҘ!

Ошо йәмле көндәрҙә Ейәнсура районының гүзәл тәбиғәтле Үтәгол ауылында йәшәүсе **Вәкил Әхмәт улы БУРАНҒОЛОВ** үҙенең 80 йәшлек күркәм юбилейын билдәләй.



Гәзиз атайыбыҙ гәзел дә, талапсан да булғаны өсөн халыҡ араһында оло хөрмәт ҡаҙанған кеше, ихлас та, алсаҡ та сифаттары өсөн туғандары ла өҙөлөп тора. Ә инде балаларына ул өлгөлө атай, ейән-ейәнсәрҙәренә яратҡан ҡартатай. Атайыбыҙға киләсәктә лә шулай яҡындарының һөйөү, ихтирамын тойоп, бәхет-һөйөнөстәр генә кисерел, оҙон-оҙаҡ йылдар исәнлектә-һаулыҡта, бәхетле тормошта ғүмер итеүен теләйбеҙ.

*Тиҫһәң әле тимер өҙөрлөкһең,*
*Баҫһаң әле - баҡыр иҙерлек.*
*Ғүмер юлың үтһен бәхет менән*
*Хәүеф-хәтәр килмәһен берүк.*
*Тормош һуҡмағында ғорур атла,*
*Һин лайыҡлы хәҙер-хөрмәткә.*
*Барыбыҙ ҙа һине яратабыҙ*
*Һәм мохтажбыҙ һинең терәккә.*

**Иң изге теләктәр менән балаларың, кейәү-килендәрең, ейән-ейәнсәрҙәрең, бүлә-бүләсәләрең.**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:** Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Гөлназ МАНАПОВА, Илгиз ИШБУЛАТОВ, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 23 июнь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5007
Заказ - 1264/06